ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 февраль (шаҡай) 2020

№7 (893)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡолас йәйеп...
#Өйҙә көтәләр




6

Минең шәжәрәм бар...
ҡая шикелле ул



8-9

Ижадта ла шулай:
кем эшләмәй, шул ашамай



11

Атлы, этле һәм...
мылтыҡлы Хәбир



12

ТВ-программа 14

*Күп һанлы ахмаҡтар араһында аҙ һанлы яҡшыларға ҡаршы көрәшкәнгә ҡарағанда, аҙ ғына һанлы яҡшы кешеләр араһында күп һанлы ахмаҡтарға ҡаршы көрәшеү һәйбәтерәк.*

**(Антисфен).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Китап-гәзит һүҙенәме, әллә интернет мәғлүмәттәренә ышанаһығыҙмы?

***Мәжит МӘХМҮТОВ, физика-математика фәндәре кандидаты:*** Китап - китап инде ул, юҡҡа ғына әйтмәгәндәр бит "ташҡа баҫылған" тип. Кешелек аҡылы булдырған һәм кешелек аҡылын туплаған мәңгелек ҡиммәттәрҙең береһе ул - китап, шулай булғас, уның һүҙенә нисек ышанмайһың! Фәнни хеҙмәттәр булһынмы, художестволы әҙәбиәт өлгөләреме - барыһы ла тормошобоҙ ағышын, ысынбарлыҡты сағылдыра. Икенсенән, китап китап булып нәшриәт "кухняһынан" (шулай әйтергә яраһа) өлгөрөп килеп сыҡҡансы кемдәр ҡулы аша ғына үтмәй! Ул мөхәррир, баш мөхәррир, корректор, ә инде махсус ниндәйҙер тармаҡ буйынса фәнни йә фәнни-популяр әҫәр икән - ғилми дәрәжәле ғалимдар, рецензенттар тарафынан уҡыла. Ҡыҫҡаһы, китап һүҙенә шуға күрә лә ышанабыҙ. Шуны уҡ матбуғат баҫмаларына ҡарата ла әйтергә булыр ине, ләкин һуңғы ваҡыт ҡайһы бер гәзит-журналдар, айырыуса үҙәк баҫмалар, йыш ҡына журналистика этикаһына хыянат итеп, юҡ-барҙы баҫып та сыҡҡылай. Унан һуң халыҡ телендә "һары" пресса, "бульвар гәзите" тип йөрөтөлгән баҫмалар рәтендәгеләр арҡаһында матбуғат һүҙенә халыҡ ышанысы кәмей төштө. Бында инде ҡайһы берәүҙәрҙең үҙе яҡшы белгән, ышаныс күрһәтеп алдырып уҡыған "үҙ" баҫмалары барлыҡҡа килде. Кеше хәҙер һайлап ҡына уҡый ваҡытлы матбуғатты. Ә уҡымағандары инде "тулайым" интернет донъяһына күсеп бөттө. Был да әллә ни насар түгел, ләкин унда ла һуңғы ваҡыт ялған, дөрөҫ булмаған (интернет телендә "фейковый" тип йөрөтөлә) мәғлүмәттәр күбәйҙе. Бына инде ундағы мәғлүмәттәрҙең барыһына ла ышаныуы ауыр. Хатта Википедияла ла хаталар китеүе ихтимал. Ә бит уға, рәсми белешмә сығанағы булараҡ, бик йыш мөрәжәғәт итергә тура килә. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡайһы берәүҙәр, айырыуса интернетҡа "һалҡын ҡан" менән ҡараусылар (өлкәнерәк быуын вәкилдәре, мәҫәлән) уны күберәк тап ана шул белешмә сығанағы булараҡ ҡына файҙаланыуҙан ары китмәй ҙә. Шуға күрә ундағы мәғлүмәттәр һүҙ тейгеһеҙ дөрөҫ, объектив булырға тейеш. Әйткәндәй, ил Президенты В. Путин "Википедия"ны Ҙур Рәсәй энциклопедияһының электрон вариантына алыштырыу яғында булыуын белдерҙе. Совет заманындағы "Ҙур Совет Энциклопедияһы"ның тос һәм олпат томлыҡтарын хәтерләйһегеҙме - бына уларға, исмаһам, ышанырға була ине!

Интернеттың бәхәсһеҙ өҫтөнлөктәренең береһе тип мин уны уҡыу-уҡытыу эшендә файҙаланыуҙы әйтер инем. Ф.Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының әле 1-се класында ғына уҡып йөрөгән ейәнсәрем Алһыу, мәҫәлән, уҡыуҙан ҡайтҡас та бик ихлас өйгә эштәренә тотона, сөнки уға интернетта ултырып мәсьәләләр, миҫалдар сисеүе бик мауыҡтырғыс шөғөл. Дистанцион программанан уға исеме менән мөрәжәғәт итеп, төрлө варианттта биремдәр ебәрелә һәм ул ошо заданиеларҙың хәл ителеш юлдарын эҙләй, таба, сисә - ҡыҫҡаһы, интернет киңлегендә "балыҡ кеүек йөҙә", хатта мине өйрәтеп, төҙәткеләп тә ала. Әле бына карантин ваҡытында дистанцион программа бик уңайлы. Ләкин бына өлкәнерәк балалар, үҫмерҙәр мәсьәлә сисеп кенә ултырмай шул, улар бер мәғлүмәт эҙләй башлай ҙа, икенсе мәғлүмәткә юлыға, унан башҡа темаларға күсеп китә йә уйын менән мауыға ла дәрес ҡайғыһы онотола. Ошо яҡлап, әлбиттә, үҫмерҙәр һәм балаларға контроль кәрәк, сөнки улар кәрәкмәгән йә хәҡиҡәткә тап килмәгән мәғлүмәттәр артынан ҡыуып, бик күп ваҡыттарын юғалта.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

**Белемлелек - арыҫландан көслө батыр булыуын иң яҡшы белгән һөнәр эйәләре уҡытыусыларҙыр. Ни тиһәң дә, тап улар балаларға ошо хәҡиҡәт тураһында һөйләй, батырлыҡты үҙ өлгөһөндә һәм хеҙмәте аша күрһәтә. Ошо көндәрҙә Өфөлә йомғаҡ яһалған "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы-2020" һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2020" конкурстары ла белем кимәленең, һөнәри оҫталыҡтың ниндәй көскә эйә булыуын аңғартты.**

# БЕЛЕМЛЕ УҠЫТЫУСЫЛАР...

## Өфөлә баһаланды

Был һөнәри конкурстар йыл да уҙғарыла һәм унда баш ҡала педагогтары бик актив ҡатнашып килә. Быйыл 50 белем усағынан 16 төрлө предмет буйынса йәмғеһе 59 педагог ҡатнашты, улар араһынан ун бише - башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары. Республика кимәлендә Өфө ҡалаһы намыҫын яҡлау хоҡуҡтары "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы-2020" тип танылған 56-сы мәктәптең рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Дамир Шәмсетдинов менән "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы-2020" исеменә лайыҡ булған 17-се мәктәп уҡытыусыһы Илсиә Сирьяждановаға **(һүрәттә)** бирелде.

**(Дауамы 2-се биттә).**




12+

**✓ Элек байрам ваҡыттарында улар беҙгә ҡәләм, китап һәм дәфтәр бүләк итә торғайнылар. Ошо өс нәмәгә тотонһағыҙ, хур булмаҫһығыҙ, тиҙәр ине. Был изге һүҙҙәрҙең асылына мин аҙаҡ ҡына төшөндөм.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Китап-гәзит һүҙенәме, әллә интернет мәғлүмәттәренә ышанаһығыҙмы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәнис ИСХАҠОВ, партия, дәүләт һәм хужалыҡ эшмәкәре, иҡтисад фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе, Рәсәй газ сәнәғәтенең почетлы хеҙмәткәре, бокс буйынса спорт мастеры:*** Беҙҙең быуын халҡы баҫма мәғлүмәткә ышанып йәшәне, ләкин китап, айырыуса ваҡытлы матбуғат баҫмаларындағы хәҡиҡәт һәм ялғанды, күҙ буяуҙы ғына айырырлыҡ үҙеңдә мәғлүмәт тә, донъяға киңерәк ҡараш та, уҡымышлылыҡ та, сәйәси һиҙгерлек тә булырға тейештер, тейем. Бөгөн бигерәк тә, сөнки бөгөнгө матбуғат баҫмалары араһында ниндәй генә йүнәлеш тотҡандары, ниндәй генә ҡатлам мәнфәғәттәрен күҙәтеүселәр юҡ! Элегерәк матбуғат баҫмалары партия күрһәтмәләренә бәйле булһа, унең ҡарауы, хәҙер ҡайһы бер гәзит-журналдар бәйелһеҙлек "өлгөһө" лә күрһәтеп ҡуя һәм күрәләтә наҡаҡ, ялған мәғлүмәттәр баҫып сығара. Шуға ла һәр бер баҫма һүҙенә ышанып барырға ла ярамай.

Ә бына китап һүҙенә, документаль әҫәрме ул, әҙәби баҫмамы - мин ышанам. Үҙебеҙҙең башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәрен генә алып ҡарағанда ла, уларҙың бит күпселеге халҡыбыҙ яҙмышын, уның рухи ынтылыштарын, республикабыҙ үҫешенең төрлө осорҙарын һәм унда ҡатнашлыҡ иткән айырым шәхестәрҙең, ябай кешеләрҙең тормош юлын, хеҙмәт ҡаһарманлыҡтарын - башҡарған эштәрен һүрәтләй. Тик улар әҫәр геройҙарының прототиптары булараҡ, икенсе төрлө исемдәр менән, ә ваҡиғалар, художестволы әҫәр алымдарына ярашлы, матурлап йә булмаһа уйлап сығарылған сюжеттар аша бирелһә лә, идея-тематика, төп йөкмәтке барыбер реаль ысынбарлыҡҡа нигеҙләнә һәм шуның менән ул уҡыусыны ышандыра ла.

Интернет мәғлүмәттәренә килгәндә, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, мин уның менән файҙаланмайым. Мине күберәк шуныһы борсой: йәш быуындың күҙ алдында ана шул интернет ҡулдарына әүерелеүен күреү. Әлбиттә, заманы шулай, интернетһыҙ хәҙер мөмкин дә түгел, мин уның мөһимлеген, ролен инҡар итмәйем, тик үҙ аҡылыңды юйыр дәрәжәлә уның һәр бер ымына буйһоноп, баштан-аяҡ виртуаль донъя "ауына" сырмалып йәшәү ҙә яҡшы түгел. Айыҡ фекерләү һәләтеңде юғалтмайынса, үҙ йөҙөңә, үҙ һүҙеңә тоғро булып ҡала белергә лә кәрәк, тип уйлайым.

***Зөбәйҙә КӘЛӘМОВА, Учалы районы Сораман ауылы әбийәһе, мәғариф ветераны:*** Иң тәүҙә әҙәбиәткә ҡарата һөйөү уятҡан уҡытыусыларым Шаһиязданова Рәйсә Мәүлитбай ҡыҙына, Бапанина Гәүһәр Әхмәт ҡыҙына, тел-әҙәбиәт уҡытыусыһы Иҫтамғолов Рәхим Әнәс улына рәхмәтемде белдергем килә. Элек байрам ваҡыттарында улар беҙгә ҡәләм, китап һәм дәфтәр бүләк итә торғайнылар. Ошо өс нәмәгә тотонһағыҙ, хур булмаҫһығыҙ, тиҙәр ине. Был изге һүҙҙәрҙең асылына мин аҙаҡ ҡына төшөндөм. Әйткәндәй, 14 февралдә Халыҡ-ара китап бүләк итеү көнө билдәләнә. Китап бүләк итеү йолаһы беҙҙең ғаиләлә күптән килә. Хәләл ефетемдең йыр ятҡанын белеп, мин уға баҙарҙан 1988 йылда "Йырҙар" тигән китап алып ҡайтҡанмын икән. Тора-бара китап бүләк итеү яҡшы ғәҙәткә әүерелде. Сөнки һәр китапта яңынан-яңы мәғлүмәттәр, белем донъяһы. Өҫтәүенә, йортобоҙҙан яҙыусылар өҙөлмәне. Кеме генә килмәһен, улар үҙҙәренең китаптарын бүләк итә торғайны. Бөгөнгө көндәрҙә бүләк-китаптар кәштә түрендә генә тора. Ваҡыты-ваҡыты менән уларҙы ҡулға алғанда күңелдәрҙә хәтирәләр яңыра. Ауылдашым Әхмәт Нуретдиновтың "Изге хәтер"ен уҡып сыҡҡас, бер яңылыҡҡа аһ иткәнем хәтеремдә. Баҡтиһәң, Пушкиндың "Капитан ҡыҙы" әҫәрендә телгә алынған телһеҙ башҡорт Зәйфутдин тыуған ауылым Иҫтамғолдан булған икән.

Беҙ китап һүҙенең көсөнә, хаҡлығына ғүмер буйы ышанып, уны ихтирам итеп, уға тоғро ҡалған быуын. Үкенескә, бөгөн йәштәр, үҫмерҙәр һәм хатта кескәйҙәр ҙә китап уҡыу тигәнде онотоп, башкөллә интернетҡа ҡапланды. Мин үҙ ейән һәм ейәнсәрҙәремде бындай хәлдән нисек тә араларға тырышам һәм ҡунаҡҡа килгәндәрендә уларға ҡысҡырып китап уҡыуҙы ғәҙәт итеп алдым. Хәҙер балаларым үҙҙәре үк, әйҙә, китап уҡыйыҡ, тип алдан иҫкә төшөрөп тора башланы. Интернет тигәндән, мин үҙем уны ҡыҙыҡһыныу менән, ихлас ҡабул иттем, тик ныҡлап хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына шөғөлләнә башланым, сөнки заман үҙе шуны талап итте: ручка менән яҙғанды ҡабул итмәй башланылар. Статьяларҙы ла электрон почта аша ебәреүҙе үтенделәр. Шул сәбәпле, теләһәң-теләмәһәң дә, заман талабына яраҡлашырға тура килде. Оҙайлы ялға сыҡҡас, ауыл тарихын, шәжәрәләр яҙырмын тигән ниәтем бар ине. Хәләл ефетем тәүҙә иҫке генә бер компьютер алып ҡайтты. Текст баҫырлыҡ хәлгә еткәс, яңыһын һатып алып бирҙе. Интернет яңылыҡтары, һуңғы хәбәрҙәр менән танышып барыуҙы ла хуп күрәм, тик рәттән бөтөн мәғлүмәттәрҙе гиҙеп сығыу яғында түгелмен, ә кәрәклеләрен, мөһимдәрен генә ҡарайым. Әҙәм ышанмаҫтай хәбәрҙәргә бүленергә ваҡытым да, теләгем дә юҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

АФАРИН!



# БЕЛЕМЛЕ УҠЫТЫУСЫЛАР...

## Өфөлә баһаланды

**(Башы 1-се биттә).**

Әйтергә кәрәк, Дамир Илдус улының эш стажы ни бары 2 йыл булыуға ҡарамаҫтан, ул бик күп һөнәри конкурстарҙа ҙур баһаларға өлгәшкән, ә былтыр "Педагогик дебют" район конкурсы еңеүсеһе булған. Уҡыусыларға белем биреүҙән тыш, үҙе лә һәр яҡлап камиллашыуҙы дауам итә һәм әлеге көндә Башҡорт дәүләт университетында аспирантурала белем ала. Ә бына Илсиә Сирьяждакованың хеҙмәт стажы 10 йыл һәм ул уҡытыусы күңелендә эшенә лә, балаларға ла ҡарата һөйөү йөрөтөү мөһим, тип иҫәпләй.

- Был һөнәри конкурста икенсе тапҡыр үҙемде һынап ҡараным, быға тиклем 2014 йылда йәш педагогтар араһында ярышып, еңеүселәр исемлегенә ингәйнем. Ул ваҡыттан алып конкурс бик күп ыңғай үҙгәрештәр кисергән: яңы һынау төрҙәре өҫтәлгән, талаптар һәм кимәл күтәрелгән, - тип һөйләне Илсиә Рәсүл ҡыҙы. - Мәҫәлән, быйыл "Кластан тыш сара" тигән һынау булды һәм коллегалар менән түңәрәктәге дәрес, айырым берәй тематик сара формаһында таныш булмаған балаларға мауыҡтырғыс дәрестәр үткәрҙек. Мин 2-се Башҡорт лицейы уҡыусыларына Башҡорт теле көнөнә арналған "Тел белгестәре" тигән турнир ойоштorҙом. Беҙҙең өсөн "Түңәрәк өҫтәл" һәм "Эссе" һынауҙары традиционға әйләнгән, шулай ҙа беренсеһенең темаһы һәм жюри менән әңгәмәләшкәндә көтөлмәгән һорауҙар биреү ихтималлығы бар. Ә икенсеһе бына нисә йылдар дауамында артыҡ ҙур үҙгәрештәр кисермәй һәм "Мин - уҡытыусы", "Мин - заман уҡытыусыһы", "Мин- XXI быуат уҡытыусыһы" тигән темаларға эссе яҙабыҙ, быйыл "Минең һөнәри хаталарым" тураһында фекер төйөнөн һүттек. "Оҫталыҡ дәресе"ндә мин редакцияла ҡунаҡта тигән эш формаһын алып, дәресемдә ҡатнашыусылар корректор, версткалаусы, мөхәррир эшен - хаталарҙы төҙәтеү, гәзиткә атама уйлау, һөйләмдәрҙе тулыландырыу кеүек төрлө күнегеүҙәр үтәне. Ғөмүмән алғанда, конкурста быйыл бик тәжрибәле коллегалар ҡатнашты, арабыҙҙа бер генә йәш уҡытыусы булды. Хәҙер республика кимәлендәгеһенә әҙерләнәм, ундағы яңылыҡтар әле үк күңелгә ятты - быйыл тәүге тапҡыр милли кейемдәрҙе презентациялау этабы була. Түлҡынланып март айын - конкурсҡа старт бирелеүен көтәм.

Конкурстарҙы ябыу тантанаһы барышында шулай уҡ өҫтәмә белем биреү уҡытыусылары араһында "Сердце отдаю детям", "Педагог-эҙләнеүсе" һәм "Педагог - оҫта" ҡала конкурстары еңеүселәренә лә наградалар тапшырылды. "Бөгөн һөнәри абруй ҡаҙаныу көнө. Был залда үҙ көсө һәм ижады менән кескәй уҡыусыларының йөрәгенә дәрт һала белгәндәр йыйылған. Конкурстанттар оҫталығын һәм иң яҡшы кешелек сифаттарын күрһәтә алды. Йылдан-йыл беҙҙең педагогтар йәштәргә тәжрибәһен тапшыра килеүенә һәм балаларыбыҙ ышаныслы ҡулдарҙа булыуына ҡыуанабыҙ", - тине барыһын да тәбрикләп Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, үҙ тәжрибәһен йәшерәк коллегаларына тапшырһа, педагогтарыбыҙ конкурстарҙан бөртөкләп йыйнап ҡайтҡан оҫталығын эшендә, еңеүҙән күтәрелгән күңел йылыһын, дәртен уҡыусыларына бүләк итә. Бына ошоноң менән дә әһәмиәтлелер һөнәри конкурстарҙа еңеү яулауҙар.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Әлшәй районы буйлап эш сәфәре барышында Шафран ауылындағы Туғандар ҡәберлегенә ҡуйылған һәйкәлгә сәскәләр һалды. Бында 369 Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, өс Афған һуғышы яугиры ерләнгән. Шафранда 1942 йылдан алып һуғыш яланында яраланған һалдаттарҙы дауалау өсөн эвакогоспиталь эшләгән. Үлгән һалдаттар туғандар ҡәберлегендә ерләнгән. Радий Хәбиров ошонда уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Рәшит Ғәлинур улы Ғөбәйҙуллин менән аралашты.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировты Әлшәй районына эш сәфәре ваҡытында Аксенов агросәнәғәт колледжы эше менән дә таныштырҙылар. Бында түбәндәге һөнәрҙәргә уҡытыла: агрономия, ветеринария, умартасылыҡ, иҡтисад һәм бухгалтер иҫәбе, ер-мөлкәт мөнәсәбәттәре, ауыл хужалығы продукцияһын етештереү һәм эшкәртеү технологияһы. Шулай уҡ иретеп йәбештереүсе, ашнаҡсы-кондитер, тракторсы-машинист һөнәрҙәре буйынса әҙерлек алып барыла.

✓Башҡортостан 2020-2022 йылдарҙа социаль контракттар программаһын тормошҡа ашырыу өсөн 1,12 миллиард һумдан ашыу - йыл һайын 375,6 миллион һум йүнәлтә. Финанслауҙың артыуына бәйле ярлылыҡҡа ҡаршы көрәш программаһы күберәк ҡатнашыусыларҙы йәлеп итергә мөмкин - 2024 йылға тиклем йыл һайын 2 мең, һөҙөмтәлә 10 мең ғаилә ярҙам алырға тейеш.

✓Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Ленара Иванова хәбәр итеүенсә, 2014-2019 йылдарҙа 6728 кешегә адреслы ярҙам күрһәтелгән. Айырыуса шәхси ярҙамсы хужалыҡты алып барыуға 50 мең һумға тиклем түләү талап ителгән. Ауыл ерендә ошо ярҙам сараһын 6570 кеше алған (башлыса улар мал һатып алған). 151 кеше, 100 мең һумға тиклем аҡса алып, шәхси предприятие асҡан, етәүһенә һөнәри белем алыуға бәйле ярҙам күрһәтелгән. Бының өсөн 15 мең һумға тиклем бүленә.

✓2020 йылдың 1 мартынан республиканың ҡайһы бер ҡалаларында һәм райондарында "Башавтотранс" автобустарында юл хаҡы ҡиммәтләнә. "Алға" картаһы буйынса юл хаҡы бөтә муниципалитеттар өсөн үҙгәрешһеҙ ҡала. Шулай итеп, Өфөгә үҙгәрештәр ҡағылмай. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡта ҡулаҡса һәм банк картаһы буйынса юл йөрөү биш һумға ҡиммәтләнә.

*✓ Беҙҙең тираж баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон ғына түгел, ә уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, шулай уҡ милләтебеҙҙең аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе билдә.*



*КЕМ АЛЫҠ!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр. Гәзитебеҙҙе, үҙе бөлөк ул, тип ҡабул итһәгеҙ ҙә, һәр яҙылыу кампанияһы мәлендә квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһында даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Шулай итеп, 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан "китап отоу бәхете" тейгән уҡыусыларыбыҙҙы бүләкләп китәбеҙ:**




• Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан Илдар Шәйәхмәтов, Илеш районы Үргә Йәркәй ауылынан Гөлсирә Мостафина, Учалы районы Учалы ауылынан И. Ҡужагилдин, Тәтешле районы Ҡыҫҡыйылға ауылынан Ринат Әхмәтов, Хәйбулла районы Йәнтеш ауылынан Мөхәмәт Хәсәнов, Мәләүез районы Әбет ауылынан Йомағол Иҫәнов, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Рәшит Сәлимов - **"Башкиры"**;

• Бөрйән районы Әтек ауылынан Азамат Хәкимов, Белорет районы Өмөтбай ауылынан М. Кинйәабызова, Өфө ҡалаһынан Зәкиә Ҡунаҡасова, Учалы районы Уральск ауылынан Г. Зиннурова, Хәйбулла районы Уфимский ауылынан Р. Хәсәнов, Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Шәймәрҙәновтар, Ғафури районы Ибраһим ауылынан Файза Садыҡова, Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан Рәмил Мәтинов, Ишмөхәмәт ауылынан Сынбулат Ярмуллин, Күгәрсен районы Үргә Һаҙ ауылынан Рәшит Мәзитов, Архангел районы Аҙау ауылынан Зәкиә Хисамова - **Рәшит Шәкүрҙең "Йөрәктәге аҙмалар"**;

• Баймаҡ районы Йәнгаҙы ауылынан Гөлнур Тимербулатова, Билал ауылынан Мансур Кәримов, Йылым ауылынан Дамулла Кәйекбирҙин, Ҡариҙел районы Яңы Муллаҡай ауылынан Н. Әхкәмәтдинова - **Азат Ярмуллиндың "У истоков Башкирской республики"**;

• Нуриман районы Н. Субай ауылынан З. Ғафарова, Миәкә районы Илсеғол ауылынан Гүзәл Ниғмәтуллина, Көйөргәҙе районы Яңы Мораптал ауылынан Г. Сынбулатова, Йылайыр районы Матрай ауылынан Гөлсирә Сәйетова, Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан З. Нәбиуллина - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яктың шифалы үсемлектәре"**;

• Архангел районы Аҙау ауылынан Фәнилә Ғөбәйҙуллина, Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Людмила Зиннурова, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан З. Низамова, Йылайыр районы Һултантимер ауылынан Мәҙинә Әфләтунова, Баймаҡ районы Ғәзелбай ауылынан З. Хәсәнова - **"Башҡорт халыҡ ижады"ның XV томы (мөнәжәттәр)**;

• Әбйәлил районы Сиҙәм ауылынан Мәҙинә Ғүмәрова, Ҡырмыҫҡалы районы Бишауыл-Уңғар ауылынан Рәмилә Ихсанова, Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан Б. Кәримова, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Әлфиә Нураева - **Фәүзиә Усмановаҙың "Бөрйән йөрәге" (Икенсе китап)**;

• Ишембай районы Әхмәр ауылынан Мөнир Таһиров - **"История башкирских родов. Юрматы"**;

• Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Хафиза Амантаева, Ейәнсура районы Новопавловка ауылынан Минибикә Даутова, Хәйбулла районы Таштуғай ауылынан Ш. Рахманғолов, Сәғит ауылынан Роза Мәмбәтова, Күгәрсен районы Төкәт ауылынан Рәшит Байғәбәков, Белорет районы Сосновка ауылынан Р. Мөхәмәтйәров, Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан М. Шәғәлиева - **Зәйнәб Биишева**;

• Әбйәлил районы Салауат ауылынан М. Ноғаманова, Белорет районы Үҫмангәле ауылынан Ф. Галина, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Әнисә Юнысбаева, Әбйәлил районы Дәүләт ауылынан Рима Абдуллина - **Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы**;

• Мәләүез ҡалаһынан Рәшит Кутузов, Көйөргәҙе районы Ермолаево ауылынан Урал Ҡәйүпов - **Әмир Әминевтың "Бер кәмәлә"**;

• Ейәнсура районы Самаҙы ауылынан Рәшиҙә Ҡарабаева, Баймаҡ районы Ҡыуат ауылынан Р. Солтанғолова, Ишмөхәмәт ауылынан Зәкиә Әбүбәкерова, Өфө ҡалаһынан Наилә Закирова, Роза Әйүпова, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Фәниә Фәйзуллина, Әбйәлил районы Аҫҡар ауылынан Нәғимә Илһамова - **Рауил Бикбаевтың "Онотолоҡ булдымы ни?"**;

• Әлшәй районы Ҡармыш ауылынан М. Ғәбделмәнова, Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Радик Солтанғолов, Әбйәлил районы Әбделмәмбәт ауылынан Рәшит Ҡарабандин, Сиҙәм ауылынан Р. Юлдыбаев, Учалы районы Озерный ауылынан Нәкип Әйүпов, Ейәнсура районы Үргә Бикбирҙе ауылынан Ҡасим Янбаев - **Рауил Бикбаевтың "Атлы азамат"**;

• Әбйәлил районы Үргә Әбдрәш ауылынан И. Кәримов, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин, Ишембай ҡалаһынан Р. Абдрахманова, Ейәнсура районы Яңы Павловка ауылынан З. Әлмөхәмәтова - **Әнүәр Бикчәнтәев "Һайланма әҫәрҙәр"**;

• Учалы районы Озерный ауылынан Нәйрә Ишмөхәмәтова, Иҫке Байрамғол ауылынан Әлфиҙә Сәйфетдинова, Ишкен ауылынан Хафаса Әлхәмова, Баймаҡ районы Ишей ауылынан Рәсилә Аҙнағолова, Урғаҙа ауылынан Г. Хисаметдинова, Таһир ауылынан Клара Байраҡаева, Ғүмәр ауылынан Гөлсирә Исчурина, Семеновка ауылынан Рәйхана Ҡашҡарова, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Д. Ишмөхәмәтова, Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылынан Флүрә Аҡсулпанова, Дыуан районы Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева, Әбйәлил районы Аҫҡар ауылынан Хөснә Ҡунафина, Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, Целинный ауылынан Нурзиә Утарбаева, Ишембай районы Биксән ауылынан Н. Насретдинова, Хәйбулла районы Уфимский ауылынан Ғилминур Такалова, Ейәнсура районы Трушино ауылынан Сәйҙә Хәмитова, Ғафури районы Ибраһим ауылынан Фәниә Ғәлиуллина, Бөрйән районы Мәһәҙей ауылынан А. Маликова, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Ш. Сәйетова, Архангел районы Аҙау ауылынан Таңһылыу Сәғәҙәтова, Ҡыҫынды ауылынан Гөлдәр Абдуллина, Күгәрсен районы Яҡшымбәт ауылынан А. Аллағыуатова - **2020 йылға "Башҡортса дини календарь" китаптары менән бүләкләнә**.

**Иҫкәрмә: китаптарҙы Баймаҡ районынан (Баймаҡ почтампы), Әбйәлил, Бөрйән, Учалы, Белорет райондарынан (Белорет почтампы), Хәйбулла, Йылайыр райондарынан һәм Сибайҙан (Сибай почтампы) булған бүләкләнеүселәр үҙҙәренең почтальондары аша алыр, ҡалған райондарҙың бүләкләнеүселәре китаптарҙы балалары, туғандары, таныштары аша редакциянан алдырыу сараһын күрһен ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.**

Әйткәндәй, таныштарығыҙ, дуҫтарығыҙ араһында 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, беҙҙең сәләмде тапшырығыҙ, зинһар: **17 мартҡа** тиклем яҙылып өлгөрһәләр, гәзитте апрелдән алдыра башлаясаҡтар. ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ҡалған 3 ай өсөн 338 һумға яҙыла алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!

**• 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреүҙе дауам итегеҙ, ошондай һәм башҡа китаптар кемдәрҙеңдер өлөшөнә эләгеүе бик мөмкин.**

**Әйҙәгеҙ, хөрмәтле йәмәғәт, киләсәктә лә "Киске Өфө"гә беҙҙән генә яҙылайыҡ. Беҙҙең тираж баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон ғына түгел, ә уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, шулай уҡ милләтебеҙҙең аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе билдә икәнен онотмайыҡ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓14-15 майҙа Татарстанда Башҡортостан Республикаһы көндәре уҙғарыла. Татарстан делегацияһын Татарстан Президенты Рөстәм Миңлеханов етәкләй, ә Башҡортостан вәкилдәре Радий Хәбиров етәкселегендә килә. Яҡтарҙың берлектәге проекттар, хеҙмәттәшлек мөмкинлектәре тураһында фекер алышыуы, ТАССРҙың 100 йыллығына арналған байрам сараларында ҡатнашыуы көтөлә.

✓Башҡортостанда яңы туристик сайт менән таныштырҙылар. Terra-bashkiria.ru порталында рус, итальян, испан, ғәрәп, ҡытай, инглиз һәм немец телдәрендә республика, тәбиғәт ҡомартҡылары хаҡында мәғлүмәт бар. Сайтты Башҡортостандың туризм министры Салауат Нафиҡов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә күрһәтте. Унда туристик маршруттар, шифаханалар, милли аш-һыу, сувенирҙар, шулай уҡ Башҡортостандың баш ҡалаһының күркәм урындары тураһында мәғлүмәт тупланған.

✓Рәсәй Конституцияһына төҙәтмәләр буйынса тауыш биреүҙе эш көнөндә үткәреү һәм уны ял тип иғлан итеү күҙаллана. Төп дата итеп шаршамбы, 22 апрель, ҡарала. Тауыш биреүҙе эш көнөндә үткәреү идеяһын президент хакимиәте тәҡдим иткән. Был һайлаусыларҙың күберәк килерәнә иҫәп тотоп эшләнә. Бынан алда төп дата итеп йәкшәмбе, 12 апрель, ҡаралды, икенсе вариант - йәкшәмбе, 26 апрель.

✓Башҡортостанда быйыл март айы ғәҙәттәгенән аҙ ғына йылыраҡ була. Яуым-төшөмдөң бик аҙ булыуы көтөлә. Киров өлкәһендә, Пермь крайында, Башҡортостанда, шулай уҡ Һарытау өлкәһенең көнсығышында, Уралдың көньяғында, Төмән өлкәһенең көньяғында, Омск өлкәһендә, Иркутск өлкәһенең төньяғында, Байҡал арьяғында, Сахалиндың көньяғында яуым-төшөмдөң аҙ булыуы фаразлана.

✓23 февралдә Башҡортостан халҡы, тотош Рәсәй кеүек үк, Ватанды һаҡлаусылар көнөн билдәләй. 2020 йылда байрам йәкшәмбегә тура килгәнгә тағы бер ял көнө - дүшәмбе, 24 февраль, өҫтәлә. Йәға, 21 февралдә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡармай. 25 февралдән 28-енә тиклем - эш көндәре. Хеҙмәт кодексына ярашлы, йыллыҡ төп йәки йыллыҡ өҫтәмә түләүле отпуск биргәндә 23 февралдәге һәм 8 марттағы байрам көндәре отпускының календарь көндәре иҫәбенә индерелмәй.

ҠЫҪҠАСА

# ИШЕМБАЙҘА...

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә Ишембайҙың Ленин исемендәге майҙанын төҙөкләндереү буйынса күләмле проект тураһында хәбәр итте.** Был - 1932 йылда ҡала үҫешә башлаған, "икенсе Баҡы" булараҡ билдәле нефть ятҡылыҡтары асылған урын. "Ишембайға - яңы һулыш" проекты майҙанда концерттар өсөн амфитеатр булдырыуҙы, нефтте символлаштырған фонтан төҙөүҙе күҙ уңында тота. "Әлбиттә, Ишембайҙың символы - данлыҡлы "вышка-өләсәй" балалар майҙансығының төп элементы булыр. Уға архитекторҙар тауҙарҙы һәм ҡаяға үрмәләү конструкцияларын да индергән. Эргә-тирәләге скверҙарға каштан һәм декоратив алмағастар ултыртырбыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров һәм алдағы йылдарҙа республиканың барлыҡ ҡалаларында парктар, скверҙар һәм майҙандар яңыртылыр тип өҫтәне.

✓ **Башҡортостан халкын магазин һәм дөйөм туҡланыу урыны бер бинала урынлашкан осраҡта алкоголде ваҡлап һатыуҙы тыйыуға ҡағылышлы закон проекты тураһында фекер алышыуҙа ҡатнашырға саҡыралар.** Магазиндың сауҙа итеү залы ҡаһүәнән, тәғәмхананан һәм башҡа нөктәләрҙән ситтә урынлашырға йәки айырым инеү урыны булырға тейеш, тип билдәләнә республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай әҙерләгән документта. 9 мартҡа тиклем власть органдарының ғәмәлдәге норматив акттарын һәм проекттарҙы асыҡтан-асыҡ тикшереү өсөн интернет-порталда закон проектының тексы менән танышырға һәм фекер алышыуҙа ҡатнашырға мөмкин.

✓ **Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы республиканың хәүефле туристик объекттары исемлеген баҫтырып сығарҙы.** Ҡотҡарыусылар фекеренсә, Асҡын, Киндерле, Ҡотоҡ-Сумған, Сыңғырауыҡ мәмерйәләрендә хәүефле. Исемлектә бөтәһе 31 объект - улар араһында тауҙар ҙа, шарлауыҡтар ҙа, һикәлтәләр ҙә бар. Бөтә ерҙә лә тиерлек ҡырағай йөнлектәр: айыуҙар, һеләүһендәр, бүреләр осрау хәүефе янай, шулай уҡ үлемесле йәрәхәттәр алырға мөмкин. Ҡотҡарыусылар инструкторҙар менән һәм тейешле әҙерлек үткәндән һуң ғына барырға, ә тауға (мәҫәлән, Ирәмтауға) походҡа сыҡҡанда сағыу кейем кейергә кәңәш бирә. Туристарға Шүлгәнташ һәм Яңы Мораҙым мәмерйәләренә барырға тәҡдим ителә.

✓ **Росстат Рәсәй төбәктәрендә халыҡтың кәмеүе тураһында мәғлүмәттәр баҫтырып сығарған. Волга буйы федераль округы ошо рейтингта беренсе урынды биләй.** 2020 йылдың 1 ғинуарына һәм 2019 йыл өсөн уртаса алғанда, даими халыҡ һанын баһалау буйынса бигерәк тә Волга буйы (110,8 мең кеше), Себер (54,2 мең) һәм Алыҫ Көнсығыш (21,3 мең) федераль округтарында халыҡтың кәмеүе теркәлгән. Төньяҡ Кавказ (62,0 мең), Үҙәк (61,4 мең кеше), Көньяҡ (11,6 мең кеше), Урал (10,4 мең кеше) һәм Төньяҡ-Көнбайыш (5,2 мең) федераль округтарында халыҡтың күпләп артыуы билдәләнгән. Ә халыҡтың артыуы күҙәтелгән алдынғы төбәктәр иҫәбендә: Мәскәү өлкәһе (88 мең), Мәскәү (77,2 мең), Төмән өлкәһе (31,8 мең).

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙЫЛ ЯРЛЫҒЫ ӘҘЕР




**Башҡортостанда Зауыҡлы биләмәләр йылы эмблемаһы раҫланды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республикала 2020 йыл Зауыҡлы биләмәләр йылы тип иғлан ителде. Эмблеманың иң яҡшы макетына тауыш биреү ойошторолдо. Ун вариант тәҡдим ителде.**

Шулай итеп, Зауыҡлы биләмәләр йылына әҙерлек этабы тамамланды. Муниципалитеттарҙа ойоштороу комитеттары булдырылды, саралар планы әҙерләнде, "Таҙалыҡ көндәре" билдәләнде. Муниципаль берәмектәр газондарҙы, тротуарҙарҙы, яҡтыртыуҙы, ҡоймаларҙы тикшереп сыҡты һәм ошо йүнәлештәр буйынса кәрәкле ресурстар күләмен билдәләне. Мониторинг буйынса, Башҡортостан Республикаһында 4 меңгә яҡын тораҡ пункт иҫәпләнә, үҙәк урамдарҙың һәм ҡыҙыл һыҙаттарҙың дөйөм оҙонлоғо - 52 мең саҡрым. Ревизия йомғаҡтары буйынса 587 саҡрым ҡоймаға, 3 мең квадрат километр газонға ремонт талап ителеүе асыҡланды. "Ҡалаларҙы һәм районлдарҙы тәүге контроль датаға - 9 майға әҙерләү өсөн ни бары ике ай ярым ваҡыт ҡалды. Биләмәләрҙе ҡарҙан, сүп-сарҙан, ауған ағастарҙан таҙартырға, техниканы һәм кәрәкле материалдарҙы әҙерләргә кәрәк", - тине Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Борис Беляев.

# УЛАР АҘ ҠАЛДЫ...

**Республикала бөтәһе 22 мең ветеран һәм инвалид, уларға тиңләштерелгән кешеләр һәм тыл эшсәндәре Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығы айҡанлы юбилей миҙалдары менән бүләкләнәсәк.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ветерандарға тәүге миҙалдарҙы тапшырҙы ла инде. Осрашыуҙа Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары Рәис Әбдрәшитов, Хәнәфи Әйүпов, Григорий Девятых, Владимир Егоров, Сәғит Ишбирҙин, Родион Лобанов, Тәкмилә Миңлеголова, Сергей Оловянников, Әнүәр Талипов, Фаяз Шәрифуллин ҡатнашты. Бөтәһе лә 95 йәште үткән. Улар хәрби наградалар менән бүләкләнгән, күптәренең яралары бар, әммә шуға ҡарамаҫтан, рух күтәренкелеген юғалтмаған һәм, уларҙың һүҙҙәренсә, Бөйөк Еңеүҙең юбилейын яҡшы кәйеф менән ҡаршыларға йыйына. "Осрашыу алдынан мин һеҙҙең биографияларығыҙҙы өйрәндем, күптәрегеҙ ун һигеҙ йәшен дә тултырмайынса фронтҡа алынған", - тине Радий Хәбиров һәм Бөйөк Ватан һуғышында Башҡортостандан 700 меңдән ашыу кешенең ҡатнашыуын, уларҙың 300 меңдән күберәге яу яланында ятып ҡалыуын, 278 яҡташыбыҙҙың Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булыуын хәтергә төшөрҙө. "Республика биләмәһендә Башҡорт атлы дивизияһының ойошторолоуы - беҙҙең ғорурлығыбыҙ", - тине Радий Хәбиров һәм атлыларыбыҙ дошманға ҡаршы һуғышҡан, легендар комдив Миңлеғәле Шайморатов һәләк булған Луганск Халыҡ Республикаһына сәфәре хаҡында һөйләне. Ул шулай уҡ Совет майҙанын төҙөкләндереү, унда сквер булдырылыуы һәм генерал Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйылыуы кеүек пландары менән уртаҡлашты.

# СИРГӘ ЮЛ ҠУЙМАЙБЫҘ

**Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты республика биләмәһендә коронавирустың таралыуына юл ҡуймаҫ өсөн транспорт комплексы ойошмалары етәкселәренә һәм шәхси ташыусыларға аэропорттарҙа, тимер юл вокзалдарында, автовокзалдарҙа һәм халыҡ күп йөрөгән урындарҙа дезинфекция режимын үтәү йәһәтенән контролде көсәйтергә бойороҡ бирҙе.**

Ведомство бойороғона ярашлы, уларға "транспортта һауаны зарарһыҙландырыу ҡулайламаһының төҙөклөгән тәьмин итеү", халыҡ күп йыйылған урындарҙа һауаны зарарһыҙландырыу өсөн ҡулайламаларҙы файҙаланыу һәм поездарҙа дезинфекция режимын көсәйтеү бурысы йөкмәтелде. Бынан тыш, республикала пассажирҙарҙар менән эшләгән һәр кемде медицина битлектәре, бирсәткәләр һәм тән тиреһе антисептиктары менән тәьмин итергә ҡушылды. Документта билдәләнеүенсә, "Башавтотранс" етәкселегенә "автовокзалдарҙы тепловизорҙар менән йыһазландырыу тураһында мәсьәләне ентекләп өйрәнергә" йөкләмә бирелде. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, коронавирус менән зарарланғандарҙың дөйөм һаны 35 000 кешегә яҡынлаша, 700-ҙән ашыуы вафат булған. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы быны халыҡ-ара әһәмиәттәге ғәҙәттән тыш хәл тип таныны. Бөгөн Ухань ҡалаһында коронавирус менән сирләгән пациенттарҙы дауалау өсөн икенсе госпиталь файҙаланыуға тапшырылды.

# ВЕТЕРАНДАР ДАУАХАҺЫНДА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Һуғыш ветерандарының республика клиник госпиталендә булды.**



Ул үҙәк һәм периферияль нервы системаһы, хәрәкәт-таяныу аппараты сирҙәренән яфаланған пациенттарҙы медицина реабилитациялауы бүлектәренең эше менән танышты, табиптарҙың кабинеттарын, һыу-ләм менән дауалауҙарын ҡараны. Йыл һайын госпиталдә ике меңгә яҡын кеше реабилитация үтә. Уларға төрлө хеҙмәттәр - дауалау ысулдары тәҡдим ителә: дауалау физкультураһы, физиотерапия, рефлексотерапия, транскраниаль магнит стимуляциялау, операцияһыҙ умыртҡа декомпрессияһы һәм башҡалар. "Күргәндәрем яҡшы тәьҫораттар ҡалдырҙы. Бында заманса ҡорамалдар ҙа, профессиональ колллектив та бар. Ләкин иң мөһиме - өмөттәре һүнә башлаған, ауыр йәрәхәтләнгән, инсульт кисергән кешеләрҙе аяҡҡа баҫтыралар. Реабилитация үҙәгендә ябай кешеләрҙең дауаланыуы ҡыуаныслы - Белореттан, Күмертауҙан, эшселәр, хаҡлы ялдағылар... Асылда, бында кешеләргә икенсе ғүмер бирелә. Республиканың беренсе Президенты Мортаза Рәхимовҡа рәхмәт белдереүҙе дөрөҫ тип иҫәпләйем, сөнки уның арҙамы ошондай үҙәк ойошторороға булышлыҡ итте", - тип билдәләне Радий Хәбиров госпиталдә ҡарап сыҡҡандан һуң.

# МӘКТӘПКӘ - ҒАРИЗА

**Башҡортостанда 2020 йылдың 1 февраленән "Башҡортостан Республикаһы мәктәптәрен электрон комплектлау" һәм "Дәүләт хеҙмәттәре" лыуға арналған Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрендә Халыҡ-ара диктант үткәрелә. Диктантты башҡорт, татар, мари, урыҫ, сыуаш, удмурт телдәрендә яҙыу БДУ, М. Акмулла ис. БДПУ аудиторияларында, мәктәптәрҙә сәғәт 12.00-лә башлана. Ҡатнашыу өсөн ғаризаны 18 февралгә тиклем Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы сайтында ҡалдырырға кәрәк.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда йәшәүселәр күләмле "Хәтер юлы" проектында ҡатнаша ала. Уның партнерҙарының береһе - Рәсәй почтаһы. 17 февралдән 31 майға тиклем республиканың почта бүлексәләрендә сканерлау һәм проекттың рәсми сайтына ҡуйыу өсөн Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының фотоһүрәттәрен ҡабул итәләр.

✓2020 йылда Өфө биләмәһендә генә түгел, ә Башҡортостанда беренсе дәүләт ябыҡ спорт майҙаны төҙөй башлайҙар. Йыл әйләнәһенә эшләгән спорт объекты "Нефтсе" стадионы биләмәһендә һалына. Спорт объектының дөйөм майҙаны - 6,5 мең квадрат метр, шунын алты мең метр квадрат метр самаһы - футбол майҙаны.

✓Фәндең төрлө тармаҡтарында инновация проекттары өҫтөндә эшләгән 25 йәш ғалимға 2020 йыл өсөн Башҡортостан Республикаһы гранттары тапшырыла. Уларҙың һәр береһенә - 1 миллион һум. Еңеүселәр исемлеге республика гранттарына дәғүә итеүгә йәш ғалимдарҙың проекттар конкурсын уҙғарыу буйынса комиссия эше йомғаҡтары буйынса төҙөлгән.

✓**21 февралдә "Халыҡ-ара туған тел көнө" айҡанлы легендар генерал-майор М. Шайморатовтың тыуыуына 120 йыл ту**

✓16 апрелдә Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалында Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына һәм Башҡортостан Республикаһында Башҡорт теле йылына бағышланған "VI Биишева уҡыуҙары" була. Конференцияны ойоштороусы - филиалдың башҡорт һәм төрки филологияһы факультеты. 10-11-се класс уҡыусылары өсөн еңеүсе һәм призер дипломы Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалына уҡырға ҡабул иткәндә шәхси ҡаҙаныш булараҡ иҫәпләнә.

✓Әбйәлил районының Тупаҡ ауылында 60 урынлыҡ балалар баҡсаһы менән 120 уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәп асылды. Объект "Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына - 100 объект" программаһын тормошҡа ашырыу барышында төҙөлдө.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ ***Дәғүәселәргә талаптар иҫәбендә - уҡытыусының йәше 50-нән артмаҫҡа, махсус белеме булырға, аҙнаһына 18 сәғәттән кәм булмаған уҡыу йөкләмәһе менән уҡытыусы вазифаһына эшкә урынлашырға тейеш.***

**порталдары аша беренсе кластарға алыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү башлана, тип хәбәр итә Һанлы үҫеш министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

Ғаризаны ҡағыҙға яҙып килтерергә лә мөмкин. Беренсе класҡа алыу тураһында ғаризаларҙы ҡабул итеү ике этапта башҡарыла. 1 февралдән 30 июнгә тиклем - учреждениеға беркетелгән биләмәлә теркәлгәндәр өсөн; 1 июлдән 5 сентябргә хәтлем - учреждениеға беркетелгән биләмәлә теркәлмәгәндәр өсөн. "Мәктәптәрҙе электрон комплектлау" һәм "Башҡортостандың дәүләт хеҙмәттәре" порталдары аша ғариза биреү мәктәпкә документтар тапшырыуҙы алмаштырмай, тип белдерҙеләр ведомствола. Шуға күрә электрон ғариза биргәндән һуң 3 көн эсендә баланың ата-әсәһе (законлы вәкиле) күрһәтелгән мәғлүмәттәрҙе раҫлаған документтарҙы мәктәпкә килтерергә тейеш. Әгәр документтар билдәләнгән ваҡытта тапшырылмаһа йәки документтарҙа бала хаҡында мәғлүмәттәр Башҡортостан мәктәптәренә электрон сират сервисы сайтында яҙылған мәғлүмәттәр менән тап килмәһә, ғариза ғәмәлдән сығарыла һәм бала дөйөм белем биреү мәктәбенә алынмай. Был осраҡта ата-әсәгә ҡабаттан ғариза тапшырырға кәрәк.

# АУЫЛҒА КҮС!

**Башҡортостанда ауыл-ҡасабаларға, ҡала тибындағы ҡасабаларға йәки 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларға эшкә күсеп ҡайтҡан уҡытыусыларға 1 миллион һум күләмендә компенсация түләй башлайҙар.**

Ошондай бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр тураһында тейешле ҡарар республиканың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылып сыҡты. Субсидиялар өс йыл дауамында - 2020-2022 йылдарҙа бүленә. Аҡса йыл һайын 1 декабргә тиклем күсерелә. Документта билдәләнеүенсә, уҡытыусыларға бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләүҙәрен алыуға дәғүәселәрҙе конкурс комиссияһы һайлай.

Дәғүәселәргә талаптар иҫәбендә - уҡытыусының йәше 50-нән артмаҫҡа, махсус белеме булырға, аҙнаһына 18 сәғәттән кәм булмаған уҡыу йөкләмәһе менән уҡытыусы вазифаһына эшкә урынлашырға тейеш. Ауылда мотлаҡ биш йыл эшләргә кәрәк. Күсеп барырға ниәтләгән урындан 50 саҡрымдан кәмерәк алыҫлыҡта эшләгәндәр йәки йәшәгәндәр конкурста ҡатнаша алмай. Уҡытыусыларҙан ғаризалар йыл һайын, 10 ғинуарҙан 15 апрелгә тиклем ҡабул ителә.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ЯЗАНЫ...

## хеҙмәт менән аҡла



**Мәшғүллек хеҙмәттәре мәғлүмәттәрен күҙәтеп барһаң, шундай күренешкә тап булаһың: күп урынға эшсе ҡулдар, йәғни етәкселәр түгел, ә халыҡсан итеп әйткәндә, "ҡара эшселәр" - тир түгеп, ҡул көсө биреп эшләүселәр етешмәй. Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә һүҙ ошо хаҡта барҙы. Дөрөҫөрәге, хакимиәттең нисек итеп баш ҡаланың енәйәт-яза башҡарыу системаһы учреждениелары менән хеҙмәттәшлек итеү мөмкинлеге ҡаралды. Яза башҡарыуҙың федераль хеҙмәте идаралығының Башҡортостан Республикаһы буйынса начальнигы Алексей Чириков енәйәт-яза башҡарыу системаһының сәнәғәт секторы эшмәкәрлеге тураһында бәйән итте.**

Ойошманың сәнәғәт комплексы дөйөм майҙаны 285 мең квадрат метр тәшкил иткән 11 майҙансыҡтан тора һәм бында йылына 2 миллиард һумдан ашыу продукция етештерелә. Ҡаланың енәйәт-яза башҡарыу системаһы учреждениелары яза үткән, әммә һаҡһыҙ йөрөү хоҡуғына эйә булған хөкөм ителеүселәрҙе ҡаланың төрлө эштәренә йәлеп итеү буйынса хеҙмәттәшлеккә әҙер. Уларҙы, мәҫәлән, төҙөкләндереү, ҡаланы таҙартыу һәм йәшелләндереү, төҙөлөш һәм ауыл хужалығы эштәренә, шулай уҡ ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын сорттарға айырыу һәм ҡайтанан эшкәртеүгә ҡушырға була. Быныӊ тағы бер ыңғай яғы бар: хөкөм ителеүселәр ҡануниәт нигеҙендә төрлө эштәргә йәлеп ителә һәм улар ҡушылған эштән баш тарта алмай. Шулай итеп, улар үҙҙәрен дә тәьмин итә, суд ҡарары менән билдәләгән зыян күләмен дә ҡаплай. Әлбиттә, бындай хеҙмәттәшлектән ике яҡ та ота, сөнки бер хөкөм ителеүсене тотоу дәүләткә йылына 60 мең һум самаһына барып баҫа (айына 5 мең тирәһе). Икенсе яҡтан, эшсе ҡулдары етмәгән урындарға был категория граждандарҙы йәлеп итергә була. Бынан тыш, хөкөм ителеүселәрҙең күпселеге учреждениеның үҙендә ҡулланылышта булыр һәм производство-техник тәғәйенләнештәге тауарҙар етештерә. Алексей Чириковтың сығышынан һуң ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин учреждение сығарған продукцияны һәм эшсе көстәрҙе ҡала хужалығында файҙаланыу тәҡдимен өйрәнеү бурысын ҡуйҙы.

Оператив кәңәшмәләрҙә район хакимиәттәре башлыҡтарының отчетын тыңлау хәҙер инде ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Был юлы һүҙ Киров районы хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтовҡа бирелде. "Тышҡы яҡтылыҡты модернизациялау" программаһын тормошҡа ашырыу барышында былтыр районда яҡтылыҡ сығанаҡтары етешмәгән мәктәптәр һәм балалар баҡсалары участкалары булыуы асыҡланған һәм етешһеҙлек төҙәтелгән. Подъездарҙы комплекслы ремонтлау программаһына ярашлы, әлеге ваҡытта ремонт эштәре киң ҡолас менән алып барыла. Урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһы сиктәрендә былтыр республика конкурсында райондан 4 проект ҡатнашып, 3-һө еңеп сыға. Быйыл район 11 проектты тормошҡа ашырырға ниәтләй. "Башҡорт ихаталары" программаһы буйынса былтыр 15 ихатала төҙөкләндереү эштәре алып барылған, һөҙөмтәлә 6000 квадрат метр күләмендә юл киңәйтелгән, 400 өҫтәмә парковка булдырылған. Илвир Нурдәүләтов белдереүенсә, районда футбол ғына түгел, волейбол майҙандары ла төҙөкләндерелгән. Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылында төп иғтибар халыҡтың уңайлы йәшәү шарттарына, төҙөкләндереү кимәлен һәм райондың зауыҡлылығын күтәреүгә йүнәлтеләсәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЙЫЛ ЙОМҒАҠТАРЫ




## Юлдар йүнәтелә

**Өфөлә "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты нигеҙендә урамдарҙы ремонтлау тулыһынса башҡарылған. Өс йыл эсендә баш ҡалала дөйөм оҙонлоғо 190 километр булған 114 урам-юл селтәре объекты ремонтланған.** Яңы миҙгелдә юл эшләүселәр тағы ла 22 участканы норматив талап иткән торошҡа килтерергә уйлай. Төп объект булып Өфө - Нуғай автомобиль юлының Бородинская урамынан М-5 "Урал" трассаһына тиклем арауығы тора. Ремонт эштәре ике йылға планлаштырыла. Шулай уҡ ремонтланасаҡ объекттар исемлегенә академик Королев, Ветошников, Красин, Левитан, Мәжит Ғафури, Новоженов, Нехаев урамдары һ.б. инә. Бынан тыш, милли проект сиктәрендә Ибраһимов һәм Һәҙиә Дәүләтшина бульварҙарында, Шәфиев, Парковая, Галле ҡалаһы урамдарын Комсомол урамына тиклем арауыҡта капиталь ремонтлау ҡаралған. Бөгөн шулай уҡ былтыр башланған проекттар ҙа - Ағиҙел йылғаһы аша яңы күпер төҙөү, бер нисә урамды реконструкциялау һәм Мостай Кәрим урамын капиталь ремонтлау эштәре дауам итә.

## Технологиялар ярҙамы

**Мәғлүмәт технологиялары үҙәгендә аналитиктар һәм эшләнмәләр эшләүселәр булыуы иң яңы инновацион технологияларҙы ҡулланырға ярҙам итә, ти учреждение директоры Руслан Ғайсин.** Әлеге ваҡытта ойошма 40 мәғлүмәт системаһын һәм 12 мәғлүмәт ресурсын хеҙмәтләндерә. Муниципалитеттың рәсми сайтында бөгөн 11 интерактив мәғлүмәт картаһы бар һәм ошо нигеҙҙә халыҡ менән тура бәйләнеш каналы эшләй. Сайт граждандарға урындағы үҙидаралыҡ органдарының эшмәкәрлеге, мәғлүмәт, электрон һәм башҡа хеҙмәттәргә, сервистарға инеүҙе тәьмин итә. Уға йылына 1 миллион самаһы кеше инә. Хәҙер граждандар менән эшләүҙә лә электрон документ әйләнеше системаһы ҡулланыла һәм ул йылдан-йыл камиллаштырыла. Былтыр 2018 йыл менән сағыштырғанда 15 процентҡа күберәк мөрәжәғәт ҡабул ителһә (40 мендән ашыу), шуның 14,6 меңе, йәғни яртыһынан күберәге электрон почта аша килгән. Ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, граждандар үҙ телендә мөрәжәғәт итә ала. Йыл дауамында башҡорт телендә 26 кеше мөрәжәғәт итеп, яуап алһа, татар телендә - 15. Был эш Башҡорт теле йылында ла дауам итәсәк. Бөгөн граждандарҙың социаль селтәрҙәрҙәге мөрәжәғәттәре менән эшләү ҙә көн үҙәгендә тора. Былтыр "Инцидент-менеджмент" системаһы аша 26 мең һорау килгән. Уларҙың барыһына ла яуап бирелгән, бер төрлө һорауҙар берләштерелгән.

## Етемлек булмаһын, тип

**Өфө ҡалаһының опека һәм попечителлек органдары эшмәкәрлеге ҡаҙаныштары республикала ғына түгел, федераль кимәлдә лә үҙҙәренең төрлө проекттары менән иғтибар үҙәгендә ҡала килә.**

Әле ҡалала 17 йәшкә тиклемге 243 642 бала йәшәй. Опека органдарында иҫәптә 2270 бала тора, шул иҫәптән 1972 - етем һәм үҙ ғаиләһендә ҡалдырылған 298 бала. Иҫәптә торған балаларҙың 88 проценты ғаиләләргә бирелгән. Эшмәкәрлектең бер йүнәлеше - "хәүеф төркөмөндәге" ғаиләләрҙе асыҡлау һәм реабилитациялау, яңы тыуған сабыйҙарынан баш тартыуҙы иҫкәртеү. Былтыр 35 баш тартыу ниәте асыҡланып, уларҙың 23-ө балаһын ала. Шулай уҡ етемдәрҙең йәшәү урынын ремонтлау ҙа даими иғтибар талап итә. Былтыр 19 фатир ремонтлана, уларҙың иҫәбе район хакимиәттәренә яҙылған ғаризалар нигеҙендә билдәләнә. Уҙған йылда Опека һәм попечителлек идаралығы инновацион социаль проекттар конкурсында ҡатнашып, 1,7 миллион һумлыҡ грант ота. Ауыр тормош хәл-торошонда ҡалған ғаиләләр менән эшләүгә йүнәлтелгән был "Ҡояшлы ҡала" проекты 2020-2021 йылдарҙа тормошҡа ашырыласаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тәмәке ташлағанда

❖ Тәмәке тартыуҙы ташларға теләһәгеҙ, берәр ҡалаҡ һаҙанаҡ һәм һары мәтрүшкә үләндәрен 800 грамм һыуға һалып бешерегеҙ. Талғын утта 20 минут ҡайнатып, 3 сәғәт төнәтергә һәм яртылаш ҡайнар һыу ҡойоп, сәй итеп эсергә. Бүлмә температураһында 3 көн торһа ла төнәтмә боҙолмай. Был сәй аппетитты кәметә, эсәктәр, бәүел ҡыуығы, бөйәр эшмәкәрлеген, оҙаҡ ҡулланғанда бит тиреһенең торошон яҡшырта. Иң мөһиме, үпкә юлдарын таҙарта.

## Грипп

❖ Сирләй башлауҙы тойғас та ярты литр саҡ ҡына йылытылған һөткә сей йомортҡа һалып, 1 балғалаҡ бал һәм аҡ май өҫтәп, яҡшылап болғатырға һәм төнгөлөккә эсеп ятырға.

## Ҡоро йүтәл

❖ Кишер һутына шундай уҡ миҡдарҙа ҡуйы шәрбәт ҡушып, йылы көйөнә көнөнә 5-6 тапҡыр эсергә. Балаға балғалаҡлап эсереү ҙә етә. Шулай уҡ бал ҡушылған торма һәм шалҡан һуттарын да ҡулланырға була, ә бына бер ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәле ҡайнатмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡушып көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә була.

Ҡоро йүтәлде дауалау өсөн бер лимонды талғын утта 10 минут ҡайнатып, һыуытып, ҡабығын әрсергә һәм һутын стаканға һығып алырға. Шул һутҡа 2 ҡалаҡ глицерин ҡушырға (стакан тулырға тейеш) һәм яҡшылап болғатырға. Йыш, ҡаты йүтәлләгәндә ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр һәм йоҡларҙан алда 2-шәр балғалаҡ эсергә. Әгәр ҙә ауырыу һирәк, ҡоро йүтәлдән яфаланһа ашарҙан алда һәм ашағандан һуң, йоҡларҙан алда берәр балғалаҡ эсергә.

## Йөрәк ауыртҡанда

❖ Йөрәк тәңгәлендә невропатик һыҙланыуҙар булғанда, йөрәк ритмы боҙолғанда берәр ҡалаҡ бөтнөк һәм вахта үләндәре япраҡтарын, берәр балғалаҡ ҡомалаҡ һәм бесәй үләне тамырын эмалле һауытҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ауыҙын ябып 15 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр 1/4 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Киләсәктә Башҡортостанға Мәскәүҙән ҡайтҡан өсөн генә түгел, ә үҙ көсөнә ышанған юғары кимәлдәге белгес булғанлыҡтан эш урынында өҫтөнлөктәр алған һәм республика мәнфәғәтенә хеҙмәт иткән шәхес булғым килә.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Төҙөлөшө буйынса күпкә ҡатмарлы һуңғы күскенселек ҡатламында Азия алды һәм Көнсығыш Азия сәнғәтенән үҙләштермәләр табыла. С.И. Вайнштейн буйынса, тәүгеләренә остары мөгөҙгә оҡшаш тармаҡтары булған әүернә рәүешле фигуралар ҡарай. Һуңғы күскенселек ҡатламына шулай уҡ ҡыя шаҡмаҡҡа оҡшап ҡалынайтылған һәм ҡайһы берҙә кәкерсәктәр өҫтәлеп киткән әүернәләр, мөгөҙгә оҡшаш тармаҡлы ҡыя шаҡмаҡ рәүешендәге фигуралар, дүрт тажлы оя биҙәктәр һәм башҡалар индерелгән. Мөгөҙгә оҡшаш мотивтар был ҡатламда мөһим урын биләй. Улар тәүге күскенселәрҙә барлыҡҡа килгән тип иҫәпләй С.И. Вайнштейн (быны Алтайҙағы Пазырык ҡурғанында табылған әйберҙәр иҫбатлай); уныңса, һуңғы күскенселек осоронда хайуан мөгөҙөн (йыш ҡына тәкә мөгөҙөн) кәүҙәләндереүе билдәле булһа ла, "быңдай биҙәктәр хайуан образы менән конкрет бәйләнешен юғалта һәм абстракт орнаменталь төргә әйләнә".

С.И. Руденко буйынса "ҡусҡар" биҙәк "башҡорт һынлы сәнғәтенә хас булған һәм уның тамырҙары бик боронғо замандан килә". Башҡорт орнаментында хакас, малсы тува халҡы, ҡырғыҙ һәм башҡа Азия халыҡтары сәнғәтенә яҡын комплекс барлығы башҡорттарҙың Көньяҡ Себер һәм Үҙәк Азия менән тығыҙ этногенетик бәйләнеше күрһәтксе. Был тарихи тикшеренеүҙәр ярҙамында ла иҫбатланған. Р.Ғ. Кузеев килтергән мәғлүмәттәргә ярашлы, тамъяндарҙың тарихы, шулай уҡ башҡа көньяҡ-көнсығыш ырыуҙарҙыҡы кеүек, Саян-Алтай таулығының ҡатмарлы этник донъяһына ҡарай. Тиләүҙәргә яҡын булған күбәләк ырыуына ла ошо ҡағыла, тиергә була. Ҡырғыҙҙарҙа ла "кубулек" һәм "теле" ырыуҙары барлығы билдәле. Һуңғы быуаттарҙа күбәләк башҡорттарының матди мәҙәниәте һәм биҙәү сәнғәте тамъяндар йоғонтоһон кисергән. Күрәһең, ҡусҡарлы биҙәктәр тәү сиратта көньяҡ-көнбайыш башҡорттарында киң таралыуы был төбәктә ярым күсмә тормош оҙаҡ һаҡланыуға ғына түгел, ә этногенетик үҙенсәлекле тарихи тәүшарттарға ла бәйле булғандыр.

Ҡуш элмә ҡайыу алымы малсылыҡ менән көн күргән күсмә халыҡтарҙың күбеһенә таныш булған. Этнография сығанаҡтары буйынса XIX быуат аҙағы - XX быуат башында ҡырғыҙҙар һәм төркмәндәр, хакастар ҙа булыуы бар, ошо рәүешле ҡайығандар. Амур буйы халыҡтары нивхтар, ульчалар, нанайҙар, ороктар, орочтар ҙа ҡуш элмәне белгән. С.В. Иванов был йөйҙө "козлик с петлей" тип атай, ябай тамбур (элмә) кеүек Амур халыҡтары художестволы мәҙәниәтендәге төрки-монгол компоненттарына ҡарай тип һанай һәм Алыҫ Көнсығыш территорияһында урта быуаттарҙа урындағы халыҡтың күскенселәр менән бәйләнеш тотоуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүенә ҡайтарып ҡала. Бер халыҡта ла, хатта төркиҙәрҙә лә был ҡайыу ысулына Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында йәшәгән тамъяндарҙың ҡайыуҙарында кеүек өҫтөнлөк бирелмәгән.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

**Башҡортостанда йәштәрҙе эш урындары менән тәьмин итеү йәһәтенән барыһы ла атҡарыла тибеҙ ҙә, был турала аныҡ ҡына ниндәй саралар күрелеүе тураһында белеп етмәй инек. Ниһайәт, ошо көндәрҙә баш ҡаланың "Торатау" Конгресс-холл бинаһында үткән #Өйҙә студенттар форумы был мәсьәләгә асыҡлыҡ индерҙе. Сарала Мәскәү, Санкт-Петербург, Силәбе, Ҡаҙан, Екатеринбург, Магнитогорск, Ырымбур, Һамар, Пермь, Ханты-Манси, Әлмәт, Ижевск, Соргот ҡалаларынан һәм республика юғары уҡыу йорттарынан 900-ҙән артыҡ йәштәр ҡатнашты. Уларҙы ун ике йүнәлеш буйынса әҙерләнгән фекер алышыу майҙансығында республика министрлыҡтары, ҙур предприятие етәкселеге, үҙ өлкәһендә уңыш ҡаҙанған яҡташтар урындағы шарттар менән таныштырҙы.**

# ҠОЛАС ЙӘЙЕП...

## #Өйҙә көтәләр




Бөгөн Башҡортостанда сифатлы белем алырға ла, артабан дәүләт йәки шәхси предприятиеларҙа хеҙмәт юлы үтергә лә, үҙ эшеңде асырға ла мөмкинлектәр булдырылған. Ләкин ситтә вуз тамамлаған йәштәр генә түгел, республиканың юғары уҡыу йорттарында уҡығандар ҙа Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә эшкә сығып китергә генә тора. Баш ҡала тирәһендә эш урыны таба алмағандары ауыл еренә миллиондар вәғәҙә ителһә лә ҡайтырға ашыҡмай. Шулай ҙа #Өйҙә студенттар форумында һәр кемдең күңеленә юл табыу, республикала асыҡ мөмкинлектәр территорияһы булыуын сағылдырыу өсөн барыһы ла эшләнде. Ун ике майҙансыҡта республиканың цифрлы сәнәғәт, энергетика, медицина, ауыл хужалығы, туризм, мәҙәниәт һәм сәнғәт, мәғариф һәм фән, ресторан кәсебе, шәхси эшҡыуарлыҡ, көс структуралары, шәхесеңде үҫтереү һәм карьера төҙөү буйынса файҙалы лекциялар, фәһемле фекерҙәр, әңгәмәләр ойошторолдо. Сара БР Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин, Премьер-министр урынбаҫары - БР ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фәнүр Йәғәфәров һәм студенттарҙың һорау-яуап формаһындағы аралашыуы менән тамамланды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йәштәргә видеояҙма аша мөрәжәғәт итте: "Бөгөнгө осрашыу минең башланғысым: һеҙҙең менән аралашырға, нисек йәшәйһегеҙ, ҡасан өйгә ҡайтырға йыйынаһығыҙ тигән һорауҙарымды үҙ-нәлтергә теләгәйнем. Иң мөһиме, бик күп йәштәребеҙ илдең иң яҡшы вуздарында белем алыуы менән ғорурланабыҙ, төплө белем алыуығыҙ һәм шәп практика үтеүегеҙгә шатбыҙ. Үҙем дә ун йыл тирәһе илгә хеҙмәт итеп өйгә ҡайттым. Өйҙә беҙ кәрәк. Беҙ һеҙҙе көтәбеҙ!" - тине ул.

Шулай итеп, #Өйҙә студенттар форумы республика етәкселеген, эш урындары тәьмин итеүселәрҙе һәм эш эҙләүселәрҙе бергә туплаған, үҙ-ара аңлашылмаусанлыҡтарҙы юйған сараларҙың береһе булды. Унда ҡатнашыусыларҙың үҙҙәренән дә осрашыуҙың һөҙөмтәләре тураһында һораштыҡ.

***Илгиз Байморатов, "FinExpertiza" халыҡ-ара аудитор-консалтинг селтәре вице-президенты, "ФинЭкспертиза" ЯСЙ генераль директоры, иҡтисад фәндәре кандидаты, "Рәсәй лидерҙары" конкурсы еңеүсеһе:*** Фекер алышыу барышында йәштәргә карьера төҙөү буйынса кәңәштәремде еткерҙем. Ғәҙәттә, бөгөн йәш кеше һөнәрҙе йә күңеленә ятыуы, йә аҡсалы булыуына ҡарап һайлай. Ә мин йәштәргә талантына ҡарап һөнәр һайларға, карьера төҙөргә кәңәш иттем. Һәр кемдең һәләте бар, тимәк, кеше ҙур көс түкмәйенсә еңел генә ниҙер эшләй ала. Форумда БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов әйтеүенсә, Волга буйы округында беҙҙең республика йәштәргә бай төбәк. Күптәре ситкә китһә лә, төбәктә ҡалғандар ҙа етерлек һәм алдыбыҙҙа уларҙың көсөн һөҙөмтәле файҙаланыу бурысы тора. Ә бының өсөн тәү сиратта төбәктең ихтыяжы, эш урындары тураһында мәғлүмәтте ваҡытында еткереү мөһим. Башҡортостандың мәғариф системаһы һәм иҡтисады, сәнәғәте араһында уртаҡлыҡ булһын өсөн мәғлүмәт еткереү һәм тығыҙ аралашыу кәрәк. Ошо бурыстарҙы #Өйҙә студенттар форумы яҡшы үтәне...

***Марат Төхвәтуллин, Schneider group консалтинг компанияһы хеҙмәткәре:*** Карьераны проектлау буйынса аҡыллы фекерҙәргә арналған майҙансыҡта эшләнем. Бында үҙ өлкәһендә уныш ҡаҙанған төрлө шәхестәрҙең фәһемле сығыштары яңғыраны, һуңынан студенттар араһында тимбилдинг уйыны ойошторолдо. Мин дә тәжрибәм менән бүлештем һәм студент йылдарынан уҡ карьера тураһында уйлана башларға кәңәш иттем. Бынан 5 йылдар самаһы элек бакалавр дипломын алғас та магистратураға уҡырға инһәләр, хәҙер бакалаврҙан һуң эшкә урынлашыуҙы хуп күрәләр. Шуға студенттар ҡайһы вуздарҙа эш менән уҡыуҙы бергә алып барыуы уңайлы, йәшәү шарттары менән ҡыҙыҡһындылар. Мин Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтын тамамлағандан һуң 3 йыл эшләйем, шул уҡ ваҡытта Башҡорт дәүләт университетында аспирантурала белем алам. Ошо 3 йыл эсендә 3 эш урынын алмаштырҙым, билдәле бер ваҡыт етеү менән эшмәкәрлек өлкәһен алмаштырырға кәрәк булыуын аңлай инем. Йәштәр менән был турала ла фекер алыштыҡ. Сөнки элек кеше бер урында оҙайлы ваҡыт эшләп кенә һөнәри оҫталыҡ туплай ала һәм үрләтелә тиһәләр, бөгөн бер нисә урында үҙен һынап ҡарап кимәлен үҫтергәндәр ҙә байтаҡ. Һуңғылары эш урынын ғына түгел, бөтөнләй эш өлкәһен ҡапма-ҡаршыға үҙгәртеп, бөтәһен дә янынан башларға ярата. Әммә бик йыш бер ерҙән икенсе ергә күсеп, һөнәреңде үҙгәртеп йөрөп карьера эшләүҙең уңайлы осорон үткәреп ебәрмәҫкә кәрәк. Бер мәл 30 йәшең тулып, бер өлкәлә лә уныш ҡаҙана алмаған кешегә әйләнеүең бар. Ә үҙемә килгәндә, Мәскәүҙә 2010 йылдан бирле йәшәйем һәм һөнәри уңыш ҡаҙаныу йәһәтенән аныҡ пландарым бар. Киләсәктә Башҡортостанға Мәскәүҙән ҡайтҡан өсөн генә түгел, ә үҙ көсөнә ышанған юғары кимәлдәге белгес булғанлыҡтан эш урынында өҫтөнлөктәр алған һәм республика мәнфәғәтенә хеҙмәт иткән шәхес булғым килә.

***Тимур Ниғмәтуллин, шәхси эшҡыуар:*** Цифрлы сәнәғәт һәм энергетика темаһына арналған майҙансыҡ эшендә ҡатнаштым, "Башнефть", "Башкирэнерго", Өфө моторҙар төҙөү берекмәһе һәм башҡа республикалағы ҙур предприятиеларҙың етәксе хеҙмәткәрҙәре менән осраштыҡ. Мәскәү политехник университетының 3D технологиялар һәм эшҡыуарлыҡ өлкәһендәге инновациялар йүнәлеше буйынса юғары белем алған кеше булараҡ, бик ҡыҙыҡлы аралашыу көткәйнем. Республикала йәш кадрҙар ялларға теләгән ҙур ойошмалар барлығына ышаныс тыуҙы, һәр береһе төрлө уңайлыҡтар, мөмкинлектәр вәғәҙә итә. Шулай ҙа бында эшкә ҡайтыу өсөн минә барыһын да яҡшы уйларға кәрәк, сөнки әлегә мин шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнәм һәм уҡыуҙы тамамлағандан һуң бер ҡайҙа ла эшләгәнем юҡ. Иптәш егет менән студент сағыбыҙҙа уҡ майҙар етештереп һатыу итә башланыҡ һәм үҙебеҙҙе түйындырырлыҡ аҡса эшләйбеҙ. Аҙнаһына ике көн эшләнәм, бер айлыҡ эш хаҡын алам, төрлө йәрминкәләрҙә ҡатнашыу ҙа килемле. Башҡортостанға ҡайтҡан хәлдә, минең өсөн хеҙмәткәрҙәрҙе танышлыҡ йәки башҡа шундай шарттарға ҡарап түгел, ә һөнәри оҫталығы, белеме буйынса баһалауҙары мөһим.

***Азалия Ғиләжева, Санкт-Петербург тау университеты студенты:*** Бер йылдан университетты маркшейдер эше йүнәлеше буйынса тамамлайым. Шуға һөнәрем буйынса республикала эшкә төшөү мәсьәләһен белергә, тип килгәйнем форумға. Осрашыуҙа ҡатнашҡан барлыҡ компаниялар ҙа, йәштәргә эш бар, тип ышандырҙы һәм үҙемдең дә республиканың ҡайһы бер ойошмалары менән хеҙмәттәшлек тәжрибәм бар. Мәҫәлән, былтыр "Башкиравтодор" акционерҙар йәмғиәтендә практика үттем, бигерәк рә районда буйлап йөрөп эшләү оҡшағайны. Быйыл "Башнефть" компанияһында практика тыләүле тигәйнеләр, шунда ҡайтырға ниәтләйем. Унда хеҙмәткәрҙәре лә башҡа урындарға ҡарағанда юғарыраҡ эш хаҡы алыуы сер түгел. Эш урыны һәм аҡса табыу йәһәтенән Себер тарафтары уңайлыраҡ булһа ла Башҡортостанға ҡайтырлыҡ шарттар тыуҙырылыуы ҡыуандырҙы. Артабан да эштәр ошолай ыңғай барһа, минең менән бергә тағы 4 яҡташыбыҙ белем ала, улар ҙа үҙ тыуған еренә ҡайтырға риза булыр ине.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ШАНЛЫ ТАРИХЛЫ ҠАҢЛЫЛАР БЕҘ!



Турандан көнбайышҡа табан, Көньяҡ Уралдан Дон йылғаһына тиклемге Көнсығыш Европа далаларында сармат (Авестала - sairima) ҡәбиләләре күсмә тормош алып бара. Бөгзе тикшеренеүселәр башҡорттарҙың юрматы этнонимының лексик-этимологик тамырҙарын тап ошо сармат һүҙе менән бәйләп аңлата. Ысынлап та, сарматтарҙың грекса аталмышы сюрмат йә иһә сирмат формаһына тап килә.

Беҙҙең эраға тиклем I мең йыллыҡ аҙаҡтарында Туран ҡәбиләләренең тарихи яҙмаларҙа теркәлеп ҡалдырылған дәүләт берләшмәләре барлыҡҡа килә. Улар Ҡытай хроникаларында Кангюй, Яньцай, Усунь тип исемләнә. Уларҙың беренсеһенең боронғо Канха атамаһынан килеп сығыуы шик ҡалдырмай. Урындағы халыҡ телендә ул Кангар формаһында булып, Канг тамырынан һәм -ар суффиксынан хасил була.

Авестала Канг-диз (Канг ҡәлғәһе) "Изге Канха", тип атала. Ошо ер боронғо арий ҡәүемдәре өсөн "изге йөнә" булған урын була. Ошо хаҡта Авеста китабында легендар хикәйәттәр теркәлеп ҡалған. Афрасиаб батша (Авестала - Франхрасьян) үҙенең ҡыҙы Фарангизға өйләнгән кейәүе Сиявушты (Сьяваршананы) үлтерә. Уларҙың улы, арий батшаһы Кей Хосров (Кави Хаосрава) атаһының үсен алып, Афрасиб ҡартатаһын үлтертә. Туранды тар-мар итеп, ул оҙаҡ йылдар дауам иткән һуғышҡа сик ҡуйыуға өлгәшә. Шунан һуң ул атаһы тәҙөткән ҡәлғәне үҙенең батша һарайы итергә ниәт итә. Әммә ошо ниәткә өлгәшер өсөн, ул, ярҙам һорап, изге "Кангха Йәнәнә" мөрәжәғәт итә: "Һин - минең ҡыҙ туғаным, ә мин - һинең ир туғаның. Һинең төйәгең Кангханы Сьяваршан дошман булған Туран ерендә булдырҙы, мине лә - шулай ук; әсәм минең - турҙарҙың иң яуызы Франхрасьян ҡыҙы. Һин миңә ҡайт инде!" Ошо ялбарыу ҡабул ителә: "Һәм Кангха Йәне ошолай эшләй. Ул Туран еренә, уның иң алыҫ көнсығыш яғына килә, мең соҡор ҡаҙый, мең бағана ултырта, ҡойма ҡуйып, уның эсенә Хаосрава изге йәнле кешеләрҙе индерә. Ул ҡойманың тәүгеһе таштан, икенсеһе - ҡоростан, өсөнсөһө - кристалдарҙан, дүртенсеһе - көмөштән, бишенсеһе - алтындан, алтынсыһы - халцедондан һәм етенсеһе рубиндан була. Ә һарайҙар унда - көмөштән, ә башнялар - алтындан һәм 14 тау унда; һәм ете караптар йөҙөрлөк йылға унда һәм ете туғай...".

Ҡайһы бер тикшеренеүселәр фекеренсә, арийҙар - иранлыларҙың һәм һиндтарҙың ата-бабалары - ҡасандыр Көньяҡ Уралды төйәк иткән. И.М. Стеблин-Каменский фаразлауынса, легендар арий батшаһы Йиманың легендар Вар ҡәлғәһе тап ошонда булып, уның Арҡайым ҡуласа ҡалаһына тура килеүе бар. Боронғо донъя тарихы белгесе А. Парпола яҙыуынса, һуңғы осорҙағы прото-арий теле Һинташты һәм Арҡайым ҡаласыҡтары дәүерендә, йәғни беҙҙең эраға тиклем 2200-1800 йылдарға ҡараған мәҙәниәт сиктәренә тура килә. Ригведала арийҙарҙың изге тауы Су-Меру Рипа тауҙарының түбәһе, тип нарыҡлана, ә был Урал тауҙарының әүәл башҡа халыҡтар тарафынан Рифей тип аталыуына тап килә.

Беҙҙең эраға тиклем 128 йылда ҡытай сәйәхәтсеһе Чжан Цянь Фирғәнәгә килеп, ошондай яҙыу ҡалдыра: "Кангюй Давань еренән (Фирғәнәнән. - **Ред. иҫк.**) 2000 ли (ли - 300-360 аҙым самаһы. - Ред. иҫк.) тирәһе төньяҡ-көнбайыштараҡ ята. Был күскенселәр биләмәһе; ғәҙәттәре юечжиларҙыҡына ныҡ оҡшаш; 90 меңгә тиклем ғәскәре бар. Кангюй Давань менән сиктәш, көсһеҙ булғанлыҡтан, көньяҡта үҙҙәре өҫтөндәге юечжи, көнсығышта һун власын таный". Ул заманда ҡытайҙар тохар исемле һинд-европа ҡәбиләһен юечжи тип атай.

Хань империяһы Урта Азия халыҡтары үрсеткән йылҡы малына, бигерәк тә үҙҙәре "күк аттары", тип атаған менге аттарға ҡыҙыға, ундағы ҡәүемдәрҙе үҙенә буйһондорорға тырыша. Б.э. тиклем 101 йылда 60 меңлек ҡытай ғәскәре Фирғәнәгә баҫып инә, әммә былдағы яугирҙар ҡәлғә эсенә инеп бикләнә. Улар ҡытайҙар талап иткән аттар хаҡына килешеү төҙөргә тәкдим итһәләр ҙә, баҫҡынсылар риза булмай. Шул саҡта Фирғәнәгә ярҙам итеү маҡсатында Кангарҙан атлы ғәскәр ебәрелә, ҡытай ғәскәре башлыҡтары тиҙ арала тәкдим ителгән солох шарттарына риза булып, үҙ иленә ҡайтып китергә мәжбүр була.

Б.э. I быуатында Хунну империяһы көсһеҙләнә барып, тарҡалыуға дусар була. Тап шул осорҙа Кангар дәүләте айырыуса ҡеүәтле була. Ҡытайҙарҙың "Цянь Хань-шу" хроникаһында былай тип яҙыла: "Кангюй хакимы Лоюень илендә, Битянь ҡалаһында, Чаньандан (хәҙерге Сиань) 12 300 ли алыҫлыҡта йәшәй... Уның ерҙәренең әйләнәһе 9 104 ли. Халҡы 120 000 ғаиләнән тора, 600 000 йән; стройҙағы ғәскәре 120 000 кеше". Берләшкән һун һәм Кангар ғәскәре Хань империяһына союздаш булған Усунь армияһын тар-мар итә. Артабан, Хунну дәүләте тамам тарҡалғас, Кангар менән Ҡытай араһында килешеү төҙөлә.

Беҙҙең эраның тәүге быуатында Кангар барса Азия илдәрендә билдәле булған көслө дәүләткә әүерелә. Был дәүләт берләшмәһенә ингән ҡәүемдәр көньяҡта Амударъя йылғаһынан алып, төньяҡта Көньяҡ Уралға һәм Кама буйҙарына тиклемге, көнсығышта Балхаш күленән алып, көнбайышта Каспий диңгеҙенәсә йәйрәп ятҡан ғәйәт киң далаларҙа көн итә.

Әммә II-III быуаттарҙа ошо ғәйрәтле берләшмә әкренләп көсһеҙләнә һәм тарҡала башлай. Сәбәбе - бар донъяны тетрәтәсәк күп һанлы һун ҡәбиләләренең көнбайышҡа табан йүнәлтелгән хәрәкәте Хаҡлыҡтарҙың бөйөк күсеше эпохаһын башлап ебәрә. Тап ошо дәүерҙә һундарҙың һәм һинд-европа сығышлы ҡәүемдәрҙең ҡушылыуы артабан төркиҙәр исемен алған күп һанлы ырыу-ҡәбиләләрҙе хасил итә. Хазар, булгар, печенег (бәшәнәк), уғыҙ, ҡыпсаҡ, төркөт, төркмән, башҡорт һәм башҡа төркиҙәрҙең этник сығышын ошо дәүерҙең тарихи-мәҙәни һәм сәйәси ваҡиғаларынан башҡа объектив ҡарап булмай. Тикшеренеүсе С.Г. Кляшторный билдәләүенсә, "төрки телле этник төркөмдәрҙең көнсығыштан туҡтауһыҙ көсәйә барған инфильтрацияһы йөгонтоһонда, б.э. I мең йыллығының урталарынан да иртәрәк булмаған осорҙа, ошо ваҡытҡа тиклем бүлгеләнеп һәм айырымланып бөткән кангюй ҡәбиләләре үҙҙәренең этник йөҙөн үҙгәртә башлай".

III быуат аҙаҡтарына Кангар иленән ҙур булмаған бер өлкә - Чжеше биләмәһе генә ҡала. "Бэй-ши" ҡытай хроникаһында "Чжеше - Кангюйҙың боронғо биләмәһе", тип әйтелә. Был атама Согдиананың "Чач" топонимына тура килә, уның әүәлге бер исеме Шашкент булып, хәҙерге Ташкентҡа әйләнгән. Ҡытай хроникаларына ярашлы, Чач (Чжеши) дәүләте Давань (Фирғәнә) еренең төняҡ өлөшөн биләгән, уның хакимы Ши (шаһ) исемен йөрөткән. Был дәүләттең әйләнәһе ни барыһы 500 саҡрымдар тирәһе булып, уның төп ҡалаһы Чач исемендә була, был ерҙәр Чжен-чжу, йәғни Һырдаръя йылғаһы буйында ята.

Хәҙерге Ташкенттан 70 саҡрымда табылған боронғо ҡаласыҡ "Канка" тип атала: быныҡ Канга атамаһына тап килеүе беленеп тора. Артабанғы осорҙарҙа Чач дәүләтенең Сасанидтар империяһына буйһоноуы шаһиншаһ Шапур I (240-272 й.й.) заманынан ҡалған "Каабе Зороастра" яҙмаһында теркәлеп ҡалдырылған. "Канка" археологик ҡаласығында табылған металл тәңкәләрҙә (III-IV б.б.) Чач хакимы Ванвандың башы һүрәтләнгән, тамғаһы төшөрөлгән. Чач һәм Хорезм тамғалары бер иш, уларға оҡшаш тамғалар сарматтарҙа, Боспор батшалары Аспургиандарҙа ла була. Был факт Туран экспансияһының заманында көнбайышҡа табан бик алыҫ ерҙәргә барып етеүе менән аңлатылып, Кавказ тарафтарында ла алан, бурджан, кангар исемле ҡәүемдәр менән бәйле мәғлүмәттәр теркәлеүендә лә сағыла.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 6-сы һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Дивизияның тыуыуы

112-се атлы дивизияны һуғышҡа әҙерләү эшендә ауырлыҡтар ҙа етерлек ине. Дивизияға алынған рядовой составтың 33,6 проценты бөтөнләйгә хәрби әҙерлекһеҙ, 35 процентының бик аҙ ғына кимәлдә хәрби күнекмәләре була. Уларҙың 41 процентының ғына башланғыс белеме булып, 14,6 проценты грамотаһыҙ, йә иһә аҙ ғына уҡый-яҙа белгән була. Дивизияның тарихи формулярында хәрби әҙерлек шарттары тураһында бына ниҙәр теркәлгән: "Личный состав орудие, пулемет, танк, винтовкаларҙың ҡулдан эшләнгән ағас макеттарын ҡулланып өйрәтелде. Атлы күнегеүҙәр эйәрһеҙ көйө үткәрелде, сабыш өсөн ағас ҡылыстар ғына бар ине." Һәр полкта тик бер нисә ысын винтовка, автомат һәм бер генә пулемет була. Шул ҡоралдарҙы нисек һүтергә-йыйырға өйрәтәләр, әммә боевой атыу күнекмәләрен ойоштороу мөмкинлеге булмай. Башлыса атта һыбай йөрөү күнекмәләре, ҡылыс һуғышына өйрәтеү өҫтөнлөк итә.

Һәр полкта кесе командирҙар әҙерләү мәктәптәре ойошторолоп, 1942 йылдың март аҙаҡтарына 305 сержант әҙерләнә. Полктарҙа артиллерия, миномет, пулемет расчеттары, сабельниктар эскадрондары, элемтә подразделениелары комплектлана. Март аҙағына дивизия һәм уның подразделениелары өсөн командирҙар, штаб офицерҙары ла тупланып бөтә тиерлек. Подполковник Иван Голенев - дивизия штабы начальнигы, уның урынбаҫары итеп Герасим Черников, полковник Александр Курмакаев штаб начальнигы ярҙамсыһы вазифаһына тәғәйенләнә. Ул һуңынан дивизияның разведка начальнигы булып китә. Бында бына нимәгә иғтибар итеү кәрәктер: башҡорт милләтенән булған офицерҙарҙың күбеһе фронтта булғанлыҡтан, командирҙар составына рус һәм украин милләтле офицерҙар ҙа йәлеп ителә.

Өлкән лейтенант Әхнәф Йосоповҡа дивизия штабының оператив бүлеге начальнигы урынбаҫары вазифаһын башҡарыу йөкмәтелһә, артиллерия менән командалыҡ итеү капитан Мөнир Вәлиевҡа, ә дивизияның интендант хеҙмәте менән идара итеү 1-се ранглы техник-интендант Шириязҙан Ханнановҡа тапшырыла. Артиллерия тәьминәте өсөн 3-сө ранглы интендант Яҡуб Аблаев яуаплы булһа, инженер хеҙмәте начальнигы вазифаһына капитан Василий Авакумов ҡуйыла. Химия хеҙмәте начальнигы - лейтенант Исмәғил Уразманов, хәрби прокурор - 3-сө ранглы хәрби юрист Афзал Ғималетдинов, айырым (особый) бүлек начальнигы - дәүләт именлеге лейтенанты Михаил Кузнецов, дивизияның парткомиссия секретары вазифаһында батальон комиссары Хәбир Хәйруллин була.

Дивизияның полктары менән командалыҡ итеү тәжрибәле, хәрби белемле офицерҙарға тапшырыла. 275-се полк командиры вазифаһына майор Таһир Кусимов тәғәйенләнә, комиссары - өлкән политрук Сәғиҙулла Әлибаев, штаб начальнигы - капитан Юрий Назаров. 294-се полкта: командиры - майор Гәрәй Нафиҡов, комиссары - өлкән политрук Хәйрулла Әхмәтов, штаб начальнигы - майор Иван Юренко. 313-сө полкта: командиры - майор Ғариф Макаев, комиссары - өлкән политрук Байғужа Сәйетғәлин, штаб начальнигы - капитан Хәнәфи Нурғәлиев.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

# МИНЕҢ

**Фәһемле әңгәмәбеҙҙә Туймазы ҡалаһы ҡунаҡтары - "Родина" мәҙәниәт һарайының музыкаль бүлеге мөдире Альберт ИСМАИЛ үҙенең хәләл ефете Хаят менән ҡатнашты. Татарстанда рок-музыкант булараҡ танылған ошо ир-уҙаман үҙенең аҫаба башҡорттар нәҫеле варисы булыуын шәжәрәһен өйрәнгәс кенә белеүе хаҡында белдергәйне. Әңгәмәлә ул үҙенең шәхси тормош юлы, ижады һәм кешегә этник берҙәйлектең ни өсөн үтә мөһим булыуы хаҡындағы уйланыуҙары менән бүлеште.**

**Һүҙ башында үҙегеҙ менән таныштырып китһәгеҙ ине, Альберт Әҙип улы.**

- Мин 1974 йылда Нефтекама ҡалаһында тыуғанмын, ул сакта атайым, инәйем Ҡарман ГРЭС-ында эшләгән була. Улар үҙҙәре Шаран районынан: атайым - Сыуаш-Тамъян ауылынан булһа, инәйем Күгәрсен-Бүләк ауылында тыуып үҫкән. Миңә 4 йәш тулғас, Туймазы ҡалаһына күскәнбеҙ. Шунда мәктәпкә барҙым, һөнәрселек училищеһын тамамланым. Тәүге һөнәрем - станоксы: токарь, фрезерлаусы, шымартыусы, унан һуң крансы һөнәрендә лә уҡып сыҡтым. Шунан Татарстан яҡтарына сығып киттем инде. Тәүҙә Бөгөлмәлә бер нисә ай эшләнем, шунан Ҡазанға юл тоттом. Унда рабфакта ярты йыл уҡып, университетҡа имтихандар биреп ҡараһам да, конкурстан үтеп булманы. Әммә тап шул ваҡытта бында Татар дәүләт гуманитар институты асылғайны, әле аттестация-аккредитацияһы ла булмаған вузға уҡырға индем. Бында шул уҡ Ҡазан дәүләт университеты профессорҙары уҡыта ине, заманында ошо институт яңы Татар милли университетына нигеҙ булыр, тип уйланылған. Тәүге йылда татар теле факультетында уҡыным, икенсе курста сит телдәр факультетына күстем. Бында инглиз, ғәрәп, фарсы, төрөк телдәрен өйрәнеү өсөн мөмкинлектәр, уңайлы шарттар булдырылғайны.

**Һеҙҙең башҡа телдәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныуығыҙ тап ошо саҡта уяндымы?**

- Юҡ, телдәр менән унан алдараҡ та ҡыҙыҡһына инем, әммә тап институтта яңы телдәр үҙләштереү, уларҙы камиллаштырыу мөмкинлеге асылды. Ә төрөк телен мин 90-сы йылдар башында уҡ өйрәнә башлағайным. Ул заманда мәсеттәр күпләп асыла башланы, Төркиәнән килгән дин белгестәре лә күп ине. Тап ошо ваҡытта төрөктәр менән танышып киттем, Ислам диненә ҡарата ҡыҙыҡһыныуым да көсәйҙе. Дин менән бергә туған телгә, мәҙәниәткә яңыса ҡарай башланым - беҙ бит, ул саҡтағыса әйткәндә, "гурыт балаһы" булып, урыҫ мөхитендә үҫтек. Шулай ҙа бала сағымда йыл һайын йәйге каникулдарҙы Күгәрсен-Бүләктә, ҡарт инәйем өйөндә үткәрә инем. Миңә уның йоғонтоһо көслө булғандыр, тим. Хәҙер ҙә ошо бала саҡ йылдары иҫкә төшә, ҡарт инәйем әкиәттәр һөйләр ине, унан ошо ауыл мөхитендәге хәл-ваҡиғаларҙы, ололарҙың "ураҙа", "намаҙ", "ифтар" тигәндәрен, аңлап етмәһәк тә, ишетеп-күреп үҫтек. Ҡалала йәшәгәндә ошо хаҡта иҫкә төшһә, күңелдә ниндәйҙер бер йылылыҡ тойор инем. Ошо йылылыҡ туған телде ныҡлабыраҡ өйрәнеүгә, дин менән ҡыҙыҡһыныуға этәргес булғандыр. Дин ғәрәп телен өйрәнергә ынтылыш бирһә, тажик кешеләре менән танышып китеү фарсы теленә лә иғтибарымды көсәйтте. Ә институтта, булғас булһын инде, тип, инглиз телен дә өйрәнергә йөрьәт иттем. Шулай итеп, барлығы 6 тел буйынса белемем бар. Шуларҙың өсәүһе институттан алған дипломымда рәсми белгеслек сифатында күрһәтелгән. Башҡалары буйынса айырым курстарҙан бирелгән шәһәҙәтнамәләрем бар. Институт тамамлағас, 2 йыл мәктәптә эшләнем, 1 йыл институтта көнсығыш телдәрен уҡыттым.

**Һеҙҙә Татарстанда әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, музыкант буларaҡ та яҡшы беләләр. Ошо хаҡта ниҙәр әйтер инегеҙ?**



- Ул сакта Ҡазанда татар теле мөхитен булдырыу, татар телен уҡытыу мәсьәләләре үтә актуаль булды. Ошо йәһәттән йәмәғәт ойошмаларының эшендә ҡатнашып йөрөнөм. Музыка өлкәһенә килгәндә, мин ҡала йәштәре өсөн ҡыҙыҡлы рок, рэп жанрҙары буйынса эшләнем, ғөмүмән, заманса ҡала темаһы минең музыкаль ижадымда сағылыш таба ине. Ҡала мөхитендә йәшәгән йәштәр, заманса музыка менән ҡыҙыҡһынып, ойоша башлай, уларҙың, русса әйткәндә, үҙ "тусовка"һы барлыҡҡа килә.

**Миллилекте заманса, йәштәр өсөн хобби булырлыҡ саралар менән бәйләп, ҡайтарып булырмы һуң?**

- Беҙҙең халыҡтарыбыҙҙың әҙәбиәте, музыкаһы, мәҙәниәтенең тамырҙары - ауылда. Ул шулай булырға тейеш тә. Быға ҡаршы барып булмай, беҙ ошоно бер нисек тә инҡар итмәйбеҙ, шуға ҡарамаҫтан, заманса ҡала мәҙәниәтен үҫтереү, уның милли йөҙөн булдырыуға иғтибарыбыҙ булды. Ҡала мөхитендә йәшәйеш темпы, уның ритмы икенсерәк бит, шуға ярашлы ҡала мәҙәниәтенең яңы формалары, яңы образдары тыуа. Шаяртыбыраҡ әйткәндә, ауыл кешеһен һандуғас хисләндерһә, ҡалала йәшәүсе трамвай тәгәрмәстәре тауышынан да яңы музыкаль образ тыуҙыра ала. Шул уҡ Ҡазанда ҡала мөхите лә талантлы шағирҙарҙы, музыканттар тыуҙыра алды, уларҙың унда үҙ майҙаны бар.

**Кеше ҡайҙа ғына йәшәмәһен, ул һәр саҡта ла мәҙәнилеккә мохтаж, тиһегеҙ инде?**

- Мин быны рухи аҫыҡ, тип әйтер инем. Уны рухи аҙыҡ менән генә ҡәнәғәтләндереп була. Аҫ булмаған кеше ризыҡҡа мохтаж түгел, уны эҙләмәй ҙә. Шәхсән үҙемдә шундай "аслыҡ" тойоп йәшәнем. Әгәр мөхиттә ниндәйҙер хәл-ваҡиғалар бара икән, ниндәйҙер бер хәрәкәт башлана икән, уның мәҙәни сағылышы ла барлыҡҡа килә. Ул шиғырҙарҙа, йырҙарҙа бигерәк тә асыҡ сағыла. Бына мине, тыуған яҡтан ситтә йәшәһәм дә, Башҡортостан һәр саҡ үҙенә тартты. Рухи тамырҙарым ошонда минең.

**Төрки халыҡтарында һәр кемдең үҙенең ете быуынын белергә тейешлеге яҙылмаған ҡанун булып, быуындан-быуынға тапшырыла килгән. Һеҙ үҙегеҙҙең нәҫел-нәсәбегеҙ менән ҡасан ҡыҙыҡһына башланығыҙ?**

- Бик күптән, тип әйтә алам. Мәрхүм атайым бабаларыбыҙ хаҡында һөйләргә әүәҫ булды. Мәҫәлән, ҡышҡы һыуыҡтарҙа тунмаҫ өсөн бабаларыбыҙ йылҡы майын ашаған, тип һөйләр ине. Йәш бала сырхаулап китһә, мунсаға алып барып дауалағандар, хатта мылтыҡ дарыһын да дарыу итеп ҡуллана белгәндәр, тип, ғорурланып һөйләр булды ул. Граждандар һуғышы хаҡындағы кинофильмда аттарҙа сабып килеүсе баҫмасыларҙы күрһә, ана, беҙҙекеләр килә, тиер ине. Атабабалар менән үтә ныҡ ғорурланып йәшәне ул, үҙе лә ғорур кеше ине.

Музыкаға әүәҫлек тә ғаиләнән, нәҫелдән бирелә: атайым баянда уйнай, инәйем йырлай торғандар ине. Ғаиләбеҙҙә бөтәбеҙ ҙә йырларға яраттыҡ. Апайым педагогия училищеһында уҡып сыҡты, бер нисә музыка ҡоралында уйнай.

Ә ҡыҙыҡһыныуға килгәндә - тирә-яғыбыҙҙа, йәшәгән мөхитебеҙҙә мәғлүмәт шул тиклем күп, уны аңлап, ҡабул итеп, билдәле бер тәртипкә һалыу фарыҙ. Шәхсән үҙемдә электән үк оло төрки донъяһының бер өлөшө итеп күрә инем, ошо юҫыҡтағы ҡараштарым төрөктәр менән танышҡас, төрөк телен өйрәнә башлағас, дөрөҫкә сыҡты. Һәр бер тел аша донъяны өйрәнеп була. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҙә: "Бер тел - бер кеше кеүек", - тигән. Шулай булғас, минең аңымда 6 кеше йәшәгәнгә тиңдер инде.

Шуға күрә 90-сы йылдарҙың башында уҡ миңә ғөмүми төркилек тойғоһо ят булманы. Бер заман М. Ҡашғариҙың төркисә яҙылған китабын табып уҡыным, унда 20-ләп төрки халыҡтарының телдәре хаҡында бәйән ителә. Был да беҙҙең өсөн дөйөм тарихи мәғлүмәт. Ә беҙҙең аныҡ, ғәмәли тарихыбыҙ булмағанмы ни? Беҙгә башҡа халыҡтарҙың тарихын өйрәттеләр, боронғо гректар, Рим тарихын да уҡып белдек. Ә беҙҙең аныҡ тарихыбыҙ, әйтәйек, Туймазы районы ауылдарының тарихы билдәһеҙ булып ҡала бирҙе. Ул ерҙәрҙә боронораҡ ниндәй халыҡ йәшәгән дә, кемдәр ошондағы ауылдарға нигеҙ һалған? Быына нимә үтә мөһим ауылда йәшәүсе ябай кешегә.

**Заманында СССР тарихы китабында беҙҙең төбәктә йәшәүсе халыҡтар тарихы буйынса тик бер генә тема бар ине: Иван Грозныйҙың Ҡазанды яулап алыуы һәм Волга буйында, Көньяҡ Уралда, Себерҙә йәшәүсе ҡәүемдәрҙең Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуы. Был ни өсөн шулай булған, һеҙ ниндәй фекерҙәһегеҙ?**

- Асыҡтан-асыҡ әйтә алам: был сәйәсәтте дөрөҫ аңлата белергә кәрәк. 1917 йылға тиклемге китаптарҙа рус тарихсылары йыш ҡына башҡорттарҙы буйһондороу сәйәсәте, уларҙың ҡаршы тороу хәрәкәтен баҫтырыу хаҡында яҙа. Ысынбарлыҡта Волга буйы, Урал һәм Себер халыҡтары колонизацияға дусар ителә. Бына беҙҙең башҡорт ата-бабаларыбыҙ заманында барыбер ҡаршылыҡ күрһәткән бит. Уларға барыбер ҡан түгергә тура килә: башҡорт нисек итеп үҙ ирке менән сит-ят ерҙәрҙән килгән кешеләргә, тулайым ризалыҡ биреп, үҙенең аҫаба ерҙәрен биреп ҡуйһын инде? Шулай уйлау әкиәткә тиң бер ул. Тарихыбыҙ - Америка индеецтары тарихына оҡшаш. Ер хужаларын ҡыҫырыҡлау быуаттар дауамында алып барыла. Күпме башҡорт, еренән яҙҙырылып, типтәрлеккә күсерелгән, быны тарих үҙе генә белә. Типтәр сословиеһына ҡараусыларҙың күбәйеүе 1859 йылғы ревиз мәғлүмәттәренән яҡшы күренә. 1917 йылғы революциянан һуң, бигерәк тә большевиктарҙың "Ер тураһындағы декрет"ынан һуң типтәрлек аҡрынлап юғала бара: башҡорттарҙан булған типтәрҙәр яңынан башҡорт булып яҙыла башлай, ә яһаҡ түләүсе типтәрҙәрҙең ҡайһы бере башҡорт, ҡайһыны татар милләтенә күсә. Типтәрҙәр араһында мишәр, нуғай сығышлылар ҙа була, әммә революциянан һуң был этник төркөмдәр ҙә юғала, быының билдәле сәбәптәре бар.

**Тағы ла бер күренеш: XX быуат башындағы революцияға тиклем Рәсәй төркиҙәренең бер уртаҡ яҙма теле була - уны иҫке төрки тел, Волга төркиҙәре теле, тип тә атайҙар. Беҙҙең уҡымышлы ата-бабаларыбыҙ шул телдә уҡыған һәм яҙған, әммә ерле һөйләш телдәре һәр саҡта ла айырым, үҙаллы булған. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Һеҙҙең менән килешәм, әммә ошо Сыңғыҙ хан заманында уҡ рәсми тел рәүешендә формалаша башлаған яҙма тел урындағы һөйләштәр лексикаһы менән дә тулылана бара. Ошо яҙма телде ғалимдарыбыҙ ҙа шартлы рәүештә төрлө төркөмдәргә бүлеп ҡарай: Төньяҡ Кавказ төркие, Сығатай (Урта Азия) төркие, Иҙел-Урал төркие, Ҡырым төркие. XIX быуатҡа ҡараған төрки китаптарында ошо ерле айырмалыҡтар яҡшы күренә. Мәҫәлән, бер үк һүҙ йә "з", йә иһә "ҙ" хәрефе менән яҙыла. Кеше исемдәрен миҫал итеп килтереп була.

**Атайығыҙҙың исемен миҫалға алырға булалыр?**

- Эйе, тап шулай. Әдип, Әҙип һәм Әжип варианттары бар атайым исеменең, Баҡалылар һөйләшендә "ж" ҡулланыла. Ҡатыным Борайҙан, унда беҙҙәгесә "кәжә" түгел - "кәзә". Ғәрәпсә Дилара исеме Зилараға ла әйләнеп китә - былар ҡәҙимге тел күренештәре.

**Яҙма телебеҙҙең ғәрәп графикаһынан яңы графикаға күсерелеүенә ниндәй баһа бирергә була?**

- Ата-бабаларыбыҙ Ислам динен ҡабул иткәндән бирле иң кәмендә 1000 йыл ваҡыт уҙған. Ислам дине менән бергә ғәрәп графикаһы ла яҙма телебеҙҙә нығынып ҡала, ул мәҙәниәтебеҙҙең күнегелгән бер күренешенә әйләнә. Әле алдараҡ иҫкә алған революциянан һуң яҙма телдәребеҙ тәүҙә латин графикаһына, унан һуң кириллицаға күсерелә. Мин быны быуаттар дауамында тупланған яҙма мәҙәни мираҫыбыҙҙан мәхрүм итеү маҡсатында эшләнгән яһалма барьер итеп ҡа-

***✓ Башҡорттар көслө халыҡтарҙан һанала. Ни өсөн? Башҡорттоң үҙ ерҙәре, теле, мәҙәниәте, тарихы бар. Һәр башҡорт кешеһе ил тарихын да, шәжәрәһен дә яҡшы белергә тейеш. Үҙ ереңде һаҡлау - төп бурыс.***

# ШӘЖӘРӘМ БАР...

## ҡая шикелле ул

бул итәм. Беҙ хәҙер хатта замандында ауыл мәсеттәрендә яҙма рәүештә теркәп ҡалдырылған метрика мәғлүмәттәрен дә уҡый алмайбыҙ бит. Бының өсөн махсус әҙерлек, йә булмаһа, элекке графиканы үҙаллы өйрәнеү талап ителә.

**Батша Рәсәйендә 1897 йылда ғилми нигеҙҙә әҙерләнеп, империяла йәшәүсе барса халыҡтарҙың иҫәбен алыу ойошторола. Бында беҙҙе ҡыҙыҡһындырған бер нәмә бар: кешеләрҙең милләте түгел, ә туған телдәре яҙып алына. Өфө губернаһында йәшәгән барса халыҡтың 41 проценты (күпселеге) тиерлек туған телен башҡорт теле итеп күрһәтә. Минзәлә өйәҙендә йәшәүселәрҙең 32 проценты шулай уҡ башҡорт телле. Бәғзе берәүҙәр был хәлде башҡорт этнос түгел, сословие булған, тип аңлатырға маташа. Ә сословиеның туған теле буламы һуң? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

- Башҡорт - этнос та, сословие ла. Башҡорт сословиеһына инер өсөн иң элгәре ер биләмәһе хужаһы булыу мотлаҡ. Башҡорт этносословие икән, башҡа этностарҙан бер кем дә башҡортлоҡҡа дәғүә итә алмай. Телдәргә килгәндә, мишәр йә иһә типтәр теле, тип әйтеүе ҡыйыныраҡ, улар айырым тел булып формалашмаған, диалектҡа ғына индереп була уларҙы. Был, бәлки, халыҡтарҙы иҫәпкә алыуҙың бер эксперименты булғандыр. Административ бүленешкә килгәндә лә, батша властары халыҡтар йәшәгән территория сиктәрен даими үҙгәртеп торған бит. Тарихи башҡорт олоҫтарын да тора-бара үҙгәртеп, ҡайһыларын административ бүленештән алып ташлап бөтөрәләр. Бында башҡорттар биләгән ерҙәрҙе төрлө юлдар менән ҡыҫҡартыу, талап алыу сәйәсәте ғәмәлгә ашырылғанын иҫкә алыу фарыз.

**Тел, милләт, сәйәсәт араһындағы бәйләнешкә нисек ҡарайһығыҙ?**

- Был хаҡта шәхсән үҙ фекерем бар. Ниндәйҙер бер үҙҙәренә уңайлы сәйәсәтте ғәмәлгә ашырырға теләүселәр милләт, бигерәк тә тел проблемалары аша кешеләрҙе үҙҙәре алдан планлаштырылған уйынға йәлеп итергә тырыша. Ҡайҙа шундай сәйәсәт ҡорола, шунда аңлашмаусанлыҡ көсәйә, низағ-ыҙғыштар ҡуба. Бына, мәҫәлән, башҡорт этносмы, әллә сословиемы, тип бәхәс ҡороусылар күбәйҙе. Ә минең өсөн барыбер: мин былай ҙа башҡорт, тегеләй ҙә башҡорт. Бына документ бар - бабам унда башҡорт, тип яҙылған, һәм шуның менән бөттө бәхәс. Минең бер нисек тә ошондай уйында ҡатнашҡым килмәй. Уларҙың ҡағиҙәләре миңә ят. Нисек инде ул, һин былдай башҡортмо, әллә тегендәйме? Тора-бара барыһын да ихаталарына тиклем бүлгеләп бөтөрөргә була бит: һин Дим башҡортомо, әллә Черниковканыҡымы?

Ә минең шәжәрәм бар - ҡая шикелле ул, уны ватып-ҡырып булмай. Элек тә шулай булған. Бына бер ауылға икенсе башҡорт күсеп килә икән, ти. Унан мотлаҡ һорайҙар: "Кем булаһың, ырыуың кем, ырыуҙаштарыңдың ергә жалованный грамоталары бармы?" Ошолар билдәле икән, һис бер тотҡарлыҡһыҙ ҡабул итәләр уны, йәшәр өсөн ер ҙә бирәләр. Был башҡорт йәшәйешенең борондан килгән эске ҡануны. Аҫаба булмағандар ҙа ситкә тибелмәгән, типтәрлек алып, ҡуртымға алған ерҙәренә йылына шунда бер 10 тин түләү хаҡы менән үҙҙәренә артабан йәшәп китер урын тапҡан. Беҙгә әлеге заманда ла ошо ҡағиҙәнән ситкә тайпылырға кәрәкмәйҙер. Мин шәжәрәң булыуҙы паспортлы булыуға тиңләйем: бында, хәҙергесә әйткәндә, һинең шәхси резюмың яҙылған. Һәр кемгә ошоно мотлаҡ белеү фарыз: башҡорт икәнһең, ата-бабаларың ҡан түккән ерҙә йәшәйһең, был һинең ерең, һәм һиңә ниндәйҙер сәйәси уйында ҡатнашыу өсөн рөхсәт юҡ. Был әхлаҡи яҡтан да мөһим: хәҙерге башҡорт тарихи шәжәрәһен дауам итеүсе булып ҡалырға тейеш.

**Әле күптәребеҙ үҙ шәжәрәһен белмәй. Мосолманлыҡ менән бер рәттән, башҡорт кешеһенә шәжәрәһен тергеҙеүҙе заманса идея сифатында ҡабул итеү кәрәктер...**

- Шәжәрә - киләсәк өсөн дә файҙалылыр. Ерле башҡорттарҙан булыуыбыҙ - тарихи феномен. Был йәшәйешебеҙгә көс, дәрт бирә. Бәлки, киләсәктә ошо ер хужаһы булыуыбыҙҙан файҙалана алырбыҙ. Хатта урыҫ дворяндары вариҫтары үҙҙәренең элекке имениеларына дәғүә итә хәҙер. Шуның өсөн дә үҙ шәжәрәңде белеү кәрәк. Уны тергеҙеү - үҙе бер һөнәр кеүек. Уға өйрәнергә лә була. Бының үҙ нигеҙе, үҙ методикаһы бар. Ошо арала Туймазыла шәжәрә төҙөү буйынса махсус курс асырға йыйынабыҙ. Уны ниҙән башлау хаҡында мәғлүмәт кәрәк. Иң элгәре атаәсәйҙең, олатай-оләсәйҙәрҙең исем-шәрифтәрен, тыуған йылдарын, тыуып үҫкән, йәшәгән ауылдарын белеү мотлаҡ. Архивтарҙа совет осорона ҡараған йылдарҙа - 30-сы, 40-сы йылдарҙан башлап төҙөлгән хужалыҡ кенәгәләре бар, унан да яҡын туғандарың хаҡында мәғлүмәттәр табып була. Шунан һуң 1917 йылғы ауыл хужалығы иҫәбен алыу материалдарын, 1920, 1926 йылдарҙағы халыҡ иҫәбен алыу буйынса документтарҙы табып була. Әйткәндәй, хәҙер байтаҡ ҡына ауылдар халҡы хаҡында "Башархив.ру" сайтынан 1917 йылға ҡараған мәғлүмәттәрҙе табып була. Әгәр һинең ниндәйҙер бабаң 1917 йылда 58 йәштән оло булған икән, ул 1859 йылғы һәм унан алдағы ревиз материалдарында теркәлгән була. Уларҙың бер өлөшө "Башҡорт ырыуҙары тарихы" тип аталған күп томлы баҫмала бар. Әгәр һеҙ эҙләгән кеше ошо ваҡытҡа 58 йәштән кесерәк булһа, уның хаҡындағы мәғлүмәтте ауыл муллалары тарафынан теркәлеп яҙыла барған метрика кенәгәләренән табып була. Быны өсөн ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән яҙмаларҙы уҡый белеү мотлаҡ. Был йәһәттән белгестәргә мөрәжәғәт итәһең. Әлбиттә, табылған мәғлүмәттәрҙе сағыштырып ҡарарға, теге йәки был кешенең тыуған йылын, йәшәгән урынын аныҡларға мөмкин. Документаль нигеҙҙә төҙөлгән шәжәрә бик ышаныслы була.

**Тағы ла бер ҡыҙыҡлы һорау: һәр кемдең үҙаңы бар, уға милли үҙаң төшөнсәһе лә инә. Милли туған телен юғалтҡан кешеләр байтаҡ хәҙер. Туған телен белмәгән кешенең милли үҙаңы үҙгәрәме икән?**

- Әлбиттә, милли үҙанды һаҡлаусы төп факторҙарҙың береһе - туған тел ул. Әммә башҡа бер факторҙар ҙа кешенең милли үҙаңын хасил итә ала. Туған башҡорт телен белмәгән, әммә үҙҙәрен барыбер башҡорт тип һанаған кешеләр бар икәнен инҡар итеп булмай.

**Уларҙың бында ғәйебе юҡ, тип әйтеп буламы?**

- Улай тип әйтһәк, улар туған телдәрен өйрәнеүгә бөтөнләйе менән тотоноп та ҡарамаҫ ул. Ғәйепле, тиһәк, үпкәләп, тағы әллә ни уйларҙар. Был һәр кемдең үҙенән тора.

**Ниндәй милләттән булһаң да, мосолман була алаһың. Бәлки, үҙеңде башҡорт итеп танытаһың икән, аралашыу телеңдең башҡаса булыуына артыҡ баҫым яһарға кәрәкмәйҙер?**

- Мосолмандарҙан йыш ҡына ошондай фекерҙәрҙе ишеткәнем бар. Бәйғәмбәребеҙ үҙ милләтенән, йә иһә үҙ туғандарынан ваз кискәндәрҙе гонаһлы әҙәмдәр рәтенә индергән, тиҙәр. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙҙең этник сығышы аныҡ билдәле - ата-инәһе Абдулла һәм Әминә затлы көрәйш ҡәбиләһенән, ә уны имеҙеп үҫтергән һөт инәһе Хәлимә саф ғәрәп телле һаналған Бану Саад ырыуынан була. Ғәрәптәр кешенең нәҫеленә һәм теленә оло хөрмәт менән ҡарай. Изге Ҡөрьән-Кәримдә лә әйтелә бит: "Беҙ һеҙҙе халыҡтар һәм ҡәбиләләр итеп яралттыҡ, бер-береһен танып белһен өсөн". Тимәк, үҙеңдең ниндәй халыҡтан икәнлегеңде һәм сығышыңды, йәғни шәжәрәңде белергә бурыслыһың. Быны һанламау үҙе гонаһтыр ул.

**Башҡорт халҡының үҙ исемендә яҙма сығанаҡтарҙа иҫкә алыныуынан бирле иң кәмендә 1500 йыл ваҡыт уҙған. Көслө ҡәүемдәр генә шулай юғалмай йәшәй алалыр ул...**

- Эйе, башҡорттар көслө халыҡтарҙан һанала. Ни өсөн? Башҡорттоң үҙ ерҙәре, теле, мәҙәниәте, тарихы бар. Һәр башҡорт кешеһе ил тарихын да, шәжәрәһен дә яҡшы белергә тейеш. Башҡорттарҙа эске тормош ҡанун-ҡағиҙәләре мотлаҡ үтәлә килә. Үҙ ереңде һаҡлау - төп бурыс. Ниндәйҙер башҡорт еренән яҙа икән, башҡа урында уға ер бирелә, ярҙам ҡулы һуҙыла.

**Бөгөн шундай хәл килеп тыуҙы: билдәле сәбәптәр арҡаһында байтаҡ кеше этник сығышын белмәй. Кемдерҙеңдер, шәжәрәһен тергеҙеп, ата-бабаларының башҡорт икәненә инанып, үҙенең башҡорт булыуын белдереүенән ниндәйҙер хилафлыҡ эҙләү кәрәкме һуң?**

- Элегерәк үҙемдең сығышымды белмәй инем. Бәлки, мари, йә иһә сыуаш ҡаны ла барҙыр, тип тә уйлағаным булды. Атайымдың тыуған ауылы ла Сыуаш-Тамъян исемен йөрөткән бит. Миңә объективлыҡ кәрәк ине. Әммә, метрика ҡағыҙҙарынан ике яҡтан да (ата-инәм буйынса бабаларым) башҡорт тоҡомо икәнемде асыҡлағас, бик һөйөндөм. Башҡортмон икән, тимәк, мин ерле кеше. Үҙ еремдә йәшәйем, килмешәк түгелмен. Тамырҙарымды башҡа ерҙәрҙән эҙләү кәрәклеге ҡалманы, мин үҙ-үҙемде яңынан таптым. Документтарҙан ата-бабаларының башҡорт булғанлығы беленгәс, ҡай берәүҙәр быны бик ауыр кисерә, "Этого не может быть!" тип тә ебәрәләр. Ҡыуанырға ғына кәрәк бит.

**Ҡаҙан яғы төркиҙәре үҙҙәрен татар тип танный, быға ла бер кем дә ҡаршы түгелдер бит?**

- Ошо хаҡта бына нисек әйтер инем. Татар исемле милләт - әле бик йәш, сабый ғына. Уның ошо исемдә формалашыуына ни барыһы 100 йыл тирәһе генә. Әммә беҙ ялғанды ҡабул итмәйбеҙ, дөрөҫлөк булырға тейеш. Әллә нисә быуат буйына татар булғанбыҙ, тип әйтеү - ялған ул. Улар үҙҙәрен төрки халҡы итеп кенә таныһа, һүҙ ҙә булмаҫ ине. Юғиһә, ҡайҙа төрки халҡы бар икән, барыһынан да татар яһай башланылар. Был ялғанды күрәләтә дөрөҫлөккә тиңләү ул. Рус ғалимдары ла быны асыҡтан-асыҡ аңлашылмаусанлыҡ итеп ҡабул итә. Бөгөнгө татар милли сәйәсәте пантюркизмға әйләнеп бара, тик "төрки" һүҙен "татар" һүҙе менән генә алыштыралар. Дөрөҫ мәғлүмәт һәр саҡта ла ябай, тиҙ аңларлыҡ булһа, ҡайҙа ялған - шунда буталсыҡ, шунда аңлашмаусанлыҡ. Алмас та таштыр, әммә һәр бер таш алмас була алмай. Бар татарҙар ҙа төркиҙәр, әммә бар төрки ҙә татар түгел - бына шунда хәҡикәт. Татар һүҙенең ҡасандыр Европа өсөн, рустар өсөн төрки тигәндең уларға ҡулайлы варианты, тәржемәһе генә булғанын онотмайыҡ. Бына Ырымбур губернаһында 1916 йылдан ғына башлап метрика кенәгәләрендә "төрки-татар таифәһенән башҡорт", тигән яҙыуҙар күренә башлай. Быны бары бер төрлө генә аңлау фарыз: милләте - башҡорт һәм шулай уның төрки ҡәүемдәренән булыуы тәҡрарлана.

**Музыкант булараҡ, сәнғәттә миллилекте һаҡлауға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Әлбиттә, сәнғәт һәр заманда ла халыҡ тормошоноң айырым бер сағылышы булып формалаша. Сәнғәттә лә ҡәҙимге тормошобоҙ, ысынбарлыҡта булған хәл-ваҡиғалар, үҙеңдең шәхси субъектив кисерештәрең аша сағылыш таба. Ижадтың асылы шундалыр ул. Бына мин башҡорт ҡурайы менән электән үк ҡыҙыҡһына инем, алып ҡуйған ҡурайым да бар ине. Әммә үҙемдең башҡорт икәнлегем асыҡланғас, яңы һулыш, дәрт өҫтәлеп, ысынлап тороп ҡурайҙа уйнарға өйрәнеү теләгем барлыҡҡа килде. Был ниндәйҙер эске тойғолар, яңы кисерештәр менән бәйле минең өсөн. Милли ижадҡа килгәндә, мин бит тәүҙә урыҫ телле "гурыт балаһы" инем. Милли ижадҡа тотонор алдынан эске ҡурҡыуыңды еңеп, тәүге аҙым яһау зарур. Мин иң элек бәғзе бер шағирҙарҙың һүҙҙәренә йырҙар яҙып, башҡарырға йөрьәт иттем. Улар Ҡаҙанда танылыу тапты. Аҙаҡтан үҙем яҙған шиғырҙарҙы ла көйгә һалып, ижад итә башланым. Ижадымда ҡала жанрына өҫтөнлөк бирәм, сөнки ижад аша ҡала йәштәрендә туған телгә ҡарата яңы мөнәсәбәт тыуҙырып була. Оҙон көй ҙә, фольклор ҙа, популяр йырҙар ҙа кәрәк, әммә шул уҡ этнорок, рэп кеүек жанрҙарҙы ла үҫтереү файҙалы беҙгә. Тәржемәсе булып та байтаҡ эшләнем, шунда йәшәйештең төрлө өлкәләрендә һүҙ ҡытлығы булыуына төшөндөм. Бар өлкәләргә лә ижади ҡараш булыуы мотлаҡ, эксперимент кәрәк. Мин үҙ тормошомдо ла оҙайлы бер эксперимент итеп ҡарай башланым, гел үҙгәрештәр талап итә күңелем. Мин бик күп нәмәне нулдән башлап ҡора алдым. Башҡорт икәнһең, ни эшләп туған телеңде белмәйһең, өйрәнмәйһең? Шулай тип, тәнҡит һүҙен әйтергә лә хаҡым барҙыр, моғайын. Теләгең бар икән - барыһына ла өлгәшеп була. Түшәктә ятып ҡына бер ниәтеңде лә ғәмәлгә ашырып булмайҙыр. Башҡа телдәрҙе өйрәнер өсөн дә көс һалыу фарыз. Аллаһы Тәғәләбеҙ барыбыҙға ла тел өйрәнеү һәләтен биргән, тик ялҡауланмайынса, ваҡыт һәм көс һалыу зарур.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Альберт Исмаил менән әңгәмәбеҙ йәшәйешебеҙҙең иң көнүҙәк проблемалары хаҡында, һүҙгә һүҙ бәйләнеп, оҙаҡ барҙы. Ошо әңгәмәне ихлас тыңлап ултырған Хаят, Альберттың хәләл ефете, икегеҙҙең арағыҙға бер өтөр ҡуйырлыҡ мәл дә булманы, тип йылмайып ҡуйҙы. Ул үҙенең Борай башҡорттары нәҫеленән икәнлеген белә, гәзит уҡыусыларға балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә бала саҡтарынан уҡ туған телдәрен ныҡлап өйрәтһендәр ине, тип, үҙенең изге теләген белдерҙе. Ошо күркәм ғаиләгә беҙ ҙә яңы ижади уңыштар теләйбеҙ.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ**
**әңгәмәләште.**

* * *

Светозаров балаларын яратманы, яратманы ғына түгел тауышталарын да ишетергә теләмәне. Быны белгән ҡатындар ир ҡайтып инеү менән малайҙарҙы иң алыҫ бүлмәгә йәшерәләр ҙә, барлыҡтарын да һиҙҙермәскә тырышалар. Бер көн булған ваҡиға уларға шундай аҡылды биргәйне.

Анна менән Шәмсиҡәмәр залда балалар менән булып йөрөгән мәлдә Златослав Казимирович ҡайтып инде. Ҡатыны булдыра алғанынса ихлас сәләмләп ҡаршыланы. Ир уға нимәлер тип әйтте. Ҡулындағы кескәй баланың мыжыуынан ҡатын иренең һүҙен ишетмәй ҡалды һәм ҡайтарып һораны. Шул ваҡыт Светозаров тамаҡ төбө менән екерҙе:

- Аҡыртма баланды! Өнөн тыҡ шул басурман ҡалдығының!

Нисектер Анна ла ҡаршы өндәште:

- Беҙ ошо балалар аҫсаһына көн итәбеҙ, онотмайыҡ.

- Нимә-ә... тинең? - ир килә килеп ҡатынының терһәгенән эләктереп алып елтерәтеп тартты ла, беләгенән ҡыҫып тотто. Ауыртыуға сыҙамай Анна ҡысҡырып ебәрҙе:

- А-а! Ебәрегеҙ! Югиһә...

- Югиһә? Нимә югиһә?

- Был хаҡта атайым беләсәк!

Шул ваҡыт Светозаров балалы ҡатынға һелтәп һуҡты ла ебәрҙе. Анна артына салҡан ҡолап киткән ыңғайы, бәпесе ситкә тәгәрәне. Ҡото алынған бала шарылдап илап та ебәрҙе, аҡылы юйылған ир уға ташланды ла. Малайҙарҙың ҙурырағын итәге артына йәшереп, нисек итергә белмәй торған Шәмсиҡәмәр, ҡайҙан көс табыптыр, атылып килеп бәләкәс менән ирҙең араһына инеп өлгөрҙө, ауыр итек тап арҡаһына ғына төшөп бер арауыҡҡа тын ала алмай ятты. Артабан был итек нисә тапҡыр һәм ҡайһы еренә эләккәндер, уныһын белмәне, әммә ҡосаҡлап ятҡан баланың өҫтөнән ҡымшанманы. Таҡмаҡлай-таҡмаҡлай үсе ҡанғансы типкесләне уны Светозаров:

- Бына һеҙгә! Бына һеҙгә! Басурман тоҡомо! Мин һеҙҙе аҫып-киҫеп бөтөрмәй ҡалдырғанмын икән! Мә һиңә! Мә! Мин һинең унайлы мәл көтөп йөрөгәнеңде беләм! Көнтәй! Һеҙ мине ашатаһығыҙ буламы? Һеҙме? Кем ул һеҙ? Һеҙ - мал! Һеҙ минең итек аҫтында ошолай! Янып бөтмәй ҡалдыңмы? Тере ҡалдыңмы? Хәҙер дөмөктөрәм мин һине! Мә! Мә!...

Яҙалаусы сығып киткәс, Анна Шәмсиҡәмәр янына имгәкләп килде лә, тороп ултырырға ярҙамлашты, ҡыйшайып, йөҙөн япҡан яулығын йүнәтте. Уның аҫтындағы баланы алып түшенә ҡыҫты. Ҡатындар ҡосаҡлашҡан килеш иҙәндә оҙаҡ ҡына ултырҙы. Балалар уларға ҡушылып илап арығас, ҡулдарында йоҡлап киттеләр. Шул кисте ҡатындар уртаҡ дошмандарына ҡаршы аҙым яһарға - Аннаның атаһы Готовҡа хат ебәреү юлын эҙләргә һөйләштеләр.

* * *

"Катя" булып китеүенә өйрәнгәйне инде Шәмсиҡәмәр. Еҙбикәнең "Кәмәр" тип өндәшеүен бындағы ялсылар аңлай алмай "Комар" тип тә көләп йөрөнөләр. Ә үҙенә нимә тип әйтһәләр ҙә барыбер булды. Хужабикә бер көн, унайын тура килтереп: "Буду тебя называть Катенькой. Ты согласна?" - тип һораны. Ризалығын белдереп, баш ҡына ҡаҡты Шәмсеҡәмәр. Сөнки ул был мөхиттә, был халыҡ араһында исеме лә, үҙе лә, ҡылыҡтары ла элеккесә була алмаҫын аңлай ине. Хәҙер инде русса ла яраймы уҡ һупалай, һәр хәлдә, күргән әйтеп аңлата ала. Анна Дмитриевна атаһына ҡайтырға хәл иткәндән алып йәлап ҡына йәшерен йыйына һәм Катяны ла үҙе менән алып китергә теләй. Шәмсиҡәмәрҙең дә барыр, баш терәр урыны юҡ, икенсенән, ул Светозаровтар ғаиләһенең шәхси милеге лә. Донъяһына иҫе китмәгән һәм һуңғы йылдарҙа бигерәк тә эскелеккә бирелгән хужа аҙаҡҡы каратель экспедицияһынан алып ҡайтҡан "трофейҙарын" документлап беркетмәгән дә, крепостной крәҫтиәнгә итеп теркәмәгән дә ине. Шул иҫәптән Шәмсиҡәмәрҙең дә исемен белдергән бер ҡағыҙ юҡ. Анна Дмитриевна был эште яйға һалыу өсөн имениеның һәм ҡалалағы йорттоң ҡағыҙ-документ эштәрен алып барған управляющийҙы саҡырткайны, ул бындай ҡағыҙ алыу өсөн Шәмсиҡәмәрҙе суҡындырып, славян исем-шәрифендә ғаилә крепостнойы итеп теркәргә кәрәклекте аңлатты. Хатта бер ҡайҙа ла китмәй, ошонда тороп ҡалған хәлдә лә уға был әүерелеүҙән ҡотолоу юҡ икәнлеге билдәле ине һәм ҡатындар воскресный сиркәү уҡыуҙарының береһендә Шәмсиҡәмәрҙе Екатеринаға әйләндереп ҡайтты. Бер ниндәй ҙә үҙгәреш һиҙмәне үҙендә хәҙерге Екатерина, күңелендә лә, уйында ла яңылыҡ килмәне. Артыҡ бер нәмәгә лә баш ватмай ғына үҙенән талап ителгәнде үтәне лә йөрөнө: хужабикәһе өйрәткәнсә, мөйөшкә ҡарап суҡынды ла, ял көндәре сиркәүгә барып поптың ҡулын үпте. Ә кистәрен малайҙарын үҙенсә өшкөрөп, аяттарын уҡып, төкөрөнөп йоҡларға ятты.

...Тик ҡорған пландары тормошҡа ашманы ҡатындарҙың. Улар яллаған кеше һатлыҡ булып сыҡтымы, әллә Светозаровтың өйҙәге шымсыһы үтә һиҙгерлек күрһәттеме, Аннаның атаһына яҙылған хаты Златославтың ҡулына барып эләкте һәм ир һуңлап ҡына ярһып ҡайтып инде. Был ваҡытта Екатерина балаларҙы йоҡлатып, үҙе лә ятырға йөрөй ине. Коридорҙың теге осондағы хужалар бүлмәһендә тауыш сыҡты. Моғайын, арыр ҙа тыныр йәки китеп олағыр, тип йоҡлап китә алмай көтөп ятты ҡатын. Әммә ирҙең аҡырыуҙары көсәйгәндән-көсәйеп, нимәләрҙер даһырлап ауҙы. Ҡапыл Аннаның тауышы коридорҙа сарылдап сыҡты ла, өҙөлдө. Бисара ҡасмаҡ булып ишекте асты ла, өлгөрмәне, ахыры. Тимәк, хужабикәгә ярҙам кәрәк! Екатерина йәһәт тороп кейенеп сыҡты ла, аяҡ остарына баҫып, оло бүлмә ишегенә яҡынлашты. Эстәге шомло тынлыҡ уны ишек тотҡаһына үрелергә мәжбүр итте. Һәм яңылышманы ла! Ектән күҙ һалыуы булды - ҡото осто. Унда Светозаров Аннаның өҫтөнә ултырып алып муйынын һыға ине. Был хәлдә йәшенеп ҡарап торор әмәле ҡалмаған Екатерина, ингән ыңғайы камин өҫтөндәге тимер шәм ҡуя торған таяҡсаны эләктереп алып, шунын ауыр яғы менән өҫтәгенең елкә төбөнә һуҡты. Ишеккә арты менән торған ир әйләнеп ҡарап та өлгөрмәне, ҡатыны өҫтөнә ауҙы. Екатерина Аннаны аҫтан тартып сығарып, яурынынан тотоп һелкетте, иҫенә килтерергә теләп сикәләне, һыуынып барған ҡулдарын ыуҙы:

- Анна Дмитриевна! Анна... Анна...

Күтәреп алып китергә итеп ҡосағына ҡыҫҡайны ғына, Анна тәрән итеп һулыш алып ебәрҙе. Екатерина күҙ йәштәренә быуылды:

- Аннушка... Мин һеҙҙе үлгәндер тинем...

- Катя... Катенька... Мин үлгәйнем...

Екатерина хужабикәһен кире балаҫҡа төшөрҙө:

- Ирегеҙҙе... Хужаны...

Шунда ғына Анна Дмитриевна йәнәшәһендә яйһыҙ булып йөҙтүбән ятҡан Светозаровҡа иғтибар итте. Үрелеп, ҡулындағы, унан муйынындағы тамырын ҡапшап ҡараны ла, үҙенә хас булмағанса ҡырҡыу ҡарашын күтәрҙе:

- Үлгән.




- Ah! - Екатерина усын ауыҙына баҫып сүгәләне.

Анна бөтөн көсөн йыйып тороп баҫты, бүлмәне байҡап алды ла, аныҡ ҡына итеп фармандар бирҙе:

- Тор, Катенька. Бүлмәне йый. Шәмдәлде урынына ҡуй. Тыныслан! Ә быны... беҙ хәҙер...

Ҡатындар Светозаровтың ауыр кәүҙәһен баҫҡысҡаса һөйрәтеп алып барҙылар ҙа... төртөп төшөрҙөләр. Үлек тулы тоҡ һымаҡ бәрелә-һуғыла аҫҡаса тәгәрәне. Бер аҙҙан Анна Дмитриевна төкөтмә яҡта йоҡлаған ялсыларҙы уятты, Екатерина күсерҙе табип артынан ебәртте. Өйҙә таңғаса полиция, тәфтишсе булды, барыһынан да һорау алдылар. Яуаптар бер ине: хужа, гәҙәттәгесә, иҫерек ҡайтҡан... тауыш ҡуптарған... баҫҡыстан яҙа баҫып, күрәһең, ҡолап төшкән... өйҙәгеләр уны шулай тапҡан. Тәфтишсе, ниндәйҙер ос-ҡойроҡтарын һиҙгәндәй, ныҡышмаҡсы булып Светозаровты ерләгәндән һуң да йөрөй ине, хәбәр алыу менән юлға сыҡҡан Готов килә һалып етеп, ҡыҙын ҡурсыуға алды. Батша дворында, хөкүмәт парламентында үҙәк урындарҙың береһен тотҡан дворянин менән бәхәсләшеп торор көс тә, әҙәм дә табылманы был ҡалала. Тейешле йолаларын үтәгәс, йортто управляющий ҡарамағына тапшырып, ҡыҙы менән ейәндәрен алып һәм балаларҙың няняһы булған Екатеринаны эйәртеп, Петербургка юлланды Дмитрий Ярославович. Шул килеп төшөүҙән Готовтар ғаиләһенә үҙ кеше булып нығынды Екатерина. Йәшләй әсәйһеҙ үҫеп, ҙур йортта хужабикә ролен башҡарып өйрәнгән Анна Дмитриевна тыуған йортона ҡабаттан ҡайтып теҙгенде ҡулына алды. Уны күҙ ҡарашынан аңлай һәм һәр бойороғон теүәл үтәй белгән талымһыҙ, өндәшмәҫ Катенькаmake, балаларға торараҡ гувернантка, уҡытыусылар яллағас, унан тоғораҡ кеше таба ла һәм уға ышанған һымаҡ башҡаса берәүгә лә ышана ла алмаҫын белгән Анна, оло йортта управляющийҙан ҡала икенсе кеше - экономка итеп ҡуйҙы. Ошо бурысты намыҫ менән инде ун биш йыл үтәп килә ҡатын...

* * *

Эргәләге диванда йомарланып йоҡлап киткән хужабикәһен уятмаҫҡа тырышып, шым ғына йөрөп кейенде лә, кухняға юлланды Екатерина. Һуңғы көндәре ауырып ятып хужалығын да иғтибарһыҙ ҡалдырған бит ул. Быға тиклем бер тапҡыр ҙа бындай хәл булмағас, бер көнгә лә бер ҡайҙа ла китеп өйрәнмәгәс, әле енәйәт ҡылғандай тойҙо үҙен. Кухняла уны ашнаҡсылар сәләмләп ҡаршыланы:

- Хәйерле иртә!

- Хәлегеҙ нисек?

- Сәләмәт булыуығыҙҙы теләйбеҙ.

Екатерина бындай ихласлыҡҡа ҡаршы баш ҡағып һаран ғына йылмайҙы:

- Рәхмәтлемен... барығыҙға ла.

Аш бүлмәһендә генә ултырып ҡалас киҫәге менән бер шәшке сәй эсте лә, төшкө аш әҙерлеге буйынса ҡарарҙар биргәс, хужабикәһенең служанкаһын табып, урамға сығып киләсәген иҫкәртеп, күсер саҡыртты. Күсер ҡайҙа барасаҡтарын белергә теләне.

- Ҡала буйлап йөрөйбеҙ. Баҙар урамдарында... - унан эҙләйәсәк кешеһенең хәрби кейемдә булыуын да иҫләп өҫтәне. Казармалар тирәһендә...

Был көн эҙләнеүҙәре емешһеҙ булды. Икенсе, өсөнсө көндө лә. Аҙна тигәндә лә... Һуңғы көндәрҙә күңелен шикле уйҙар ҙа тырнай башланы: ә, бәлки, ул булмағандыр? Бәлки, яңылышҡандыр... Шулай ҙа, һәр көн иртән, хужабикәһе тороп сыҡҡанға тиклем, ҡала урамдарын ҡыҙырырға, баҙар көндәре тирә-яҡты бер һөҙөп ҡайтырға ғәҙәтләнде Екатерина.

...Хужаларҙың сираттағы шау-шыулы ҡунағынан һуң йортто йыйыштырыу менән мәшғүл сағы ине экономканың, дворецкий килеп хәбәр һалды:

- Һеҙҙе тышҡы ҡапҡа янында көтәләр.

- Ит алып килгән крәҫтиәндәр булһа, тура келәткә үткәрегеҙ,- тип күрһәтмә биргәйне, дворецкий кеселекле баш эйеп, һаман үҙенекен тылҡыны:

- Ит алып килеүселәр түгел. Был кеше шәхси йомош менән килгән. Тап һеҙҙе генә саҡыртыуҙы һораны.

Шул ваҡыт ҡапыл күкрәгендә нимәләр ҡыҫып алды ла, йөҙө ағарҙы ҡатындың. Тын алыуы ауырайғандай, һауа етмәй башлағандай булып, өҫкө төймәләрен ысҡындыра-ысҡындыра тышҡа ашыҡты.

- Мөмкин түгел... Булыуы мөмкин түгел... - баҫҡыстарҙан нисек төшкәнен дә, артҡы ишектән урам ҡапҡаһы тәңгәленә барып сыҡҡанын да тоймаңы, атылып килгән йөрәген тынысландырыу өсөн шулай шыбырланы ла шыбырланы. Ялан ҡулдаҡ, өй туфлийында булыуын һалҡын ҡурып алғас ҡына аңланы. Ҡар көрәгән дворниктар уға аптырап ҡараны. Ҡапҡаға еткәс, аҙ ғына икеләнде лә, башта суҡынырға уйлап бармағын маңлайына төрттө, унан ҡулын йәһәт тартып алып, ауыҙ эсенән өс тапҡыр "Бисмиллаһиррахмани-ррахим" тип ҡабатлағас, асып ебәрҙе. Ҡапҡа арьяғында арты менән торған кеше тимер шығырлаған тауышҡа боролоп ҡараны. Был баҙарҙағы теге ир ине.

- Здрави желаю, - тип яҡын килде, ҡатындың йөҙөнә төбәлеп баҡты. Ҡарашында аптырау ҙа, һорау ҙа, тағы әйтеп аңлатҡыһыҙ әллә ни саткылар сағылды унын.

- Һау... мыһығыҙ... - Екатерина ла уға төбәлеп ҡалды.

- Мин һеҙҙе... теге көн күргәндә... танығандай... -ир тотлоҡҡандай булды ла, ҡапыл башҡортсаға күсте: - Шәмсиҡәмәр... был һин бит?

Ҡатын ирҙең ҡосағына ҡолаға ла, иҫен дә юйҙы.

(Дауамы. Башы 52, 1-6-сы һандарҙа).

✓ Әллә ҡасан сыҡҡан әйберҙәрҙе ҡабаттан туплап, "Һайланма әҫәрҙәр" баҫыу модаға инеп китте. Һайланма әҫәрҙәр, уйлап ҡараһаң, кисәге көн, ә бит урамда бөгөн икенсе мөхит, икенсе мөнәсәбәттәр.



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Башҡорт прозаһы даими эшләгән, ижад иткән һәм китап магазины кәштәләрен әленән-әле яңы баҫмалары менән байытҡан яҙыусылар менән баһалана. Шундайҙарҙың береһе - Хәйҙәр Тапаҡов. Ул үҙен егәрле, эшмәкәр һәм заман проблемаларын тоя белеүсе ҡәләм оҫтаһы итеп танытҡан инде. Ошо көндәрҙә әҙип абруйлы юбилейын - 65 йәшен билдәләй. Ошо айҡанлы уҡыусыларыбыҙға Хәйҙәр Тапаҡов менән ойошторолған әңгәмәне тәҡдим итәбеҙ.**

# ИЖАДТА ЛА ШУЛАЙ:

## кем эшләмәй, шул ашамай



**➔ Хәйҙәр ағай, һәр яҙыусының ижади башланғысы бер хәтирә булып йәшәй, һеҙ бына тәүге яҙмаларығыҙҙы иҫләй алаһығыҙмы?**

- Ҡәләмгә ҡасан тотондом икән? Хәтерләмәйем. Яҙа белмәгәндә әле, таҡмаҡ сығарып, өлкәнерәк малайҙарҙан туҡмалғаным хәтерҙә, ике апайым да минең әсе теллелекте, телдәрлекте өнәп еткермәй ине. Шунан мәктәпкә барҙым. Унда ла дәрес барышында дәфтәр мөйөшөн күргән-белгәндәрем менән сыбарларға яраттым. Бишенсе класта география дәресе бара. Ул фәндән үтә лә ҡырыҫ холоҡло Булат ағай Бүләков уҡытты. Ә мин шул мәлдә мауығып китеп шиғыр яҙып аҙапланам. Ижадҡа бирелеп, яныма килеп баҫҡан уҡытыусыны ла абайламағанмын. Бына ул ҡағыҙ киҫәген тартып алып, таҡта яғына китте. "Бөттө баш, - мин әйтәм, - хәҙер йә дәрестән ҡыуылып сығам, йә насар билдә алам..." Шунан бер мәл Булат ағай класс уртаһында аяҡтарын киреп баҫты ла минең шиғыр йоратын уҡып ебәрмәһенме! Уҡып бөттө лә журнал битенә ҙур итеп "бишле" ҡуйғас, былай тине: "Хәйҙәр, һин бер ҡасан да шиғыр яҙыуыңды ташлама, йәме, тик уның яҙа торған урыны һәм мәле була..." Әгәр шул ваҡытта Булат ағай мине тиргәп ташлаһа, ҡулыма һуҡһа, кәмһетһә, бөгөн ҡәләмле булыр инемме икән? Икеле.

**➔ Ҡәләм тирбәтеү күңелегеҙгә ятһа ла, һөнәр алыуға медучилищеға юл тотҡанһығыҙ. Нисек булды был хәл?**

- Унынсы класты тамамлағас, Сибай медицина училищеһына алып барып документтарымды тапшырҙым. Унда уҡырға теләүҙең сере лә ябай - әсәйем йыш сырхай ине, уны дауаларға, сәләмәтләндерергә теләнем. Элеваторға иген ташыған машинаның башына ятып алып, киттем Сибайға. Медицина училищеһына документтарымды тапшырҙым, ятаҡхананан бер бүлмә лә биреп ҡуйған булдылар. Беренсе имтихан химия фәненән икән. Киттем билдәләнгән ваҡытта. Барһам, кабинеттың ишек ауыҙында тиҫтәгә яҡын ҡыҙ-ҡырҡын йыйылған. Бына бер мәл эске яҡтан "Инегеҙ!" тигән уҫал саҡырыу ишетелде. Шуны ғына көткәндәр, тиерһең, теге ҡыҙҙар ишекте асып, эске яҡҡа мине этә төртөп индереп ебәрҙеләр. Иҙән уртаһына һөрләгөп барып яттым да шул килеш башымды ҡалҡыта биреп: "Здрасьте!" - тигән булдым. Ир кеше һорай ҡуйҙы: "Вы готовы сдавать экзамен?" "Кәнишне!" "Тогда берите билет!" Алғы партаға барып ултырҙым. Һорауҙарҙы беләм һымаҡ, тик ҡайһылайтып яуап бирергә, тип аптыранам, урыҫса ла икмәк-тоҙлоҡ ҡына бит әле. Ултыра бирҙем дә билетты өҫтәл ситенә алып барып һалып ишек яғына йүнәлдем: "До свидания!" "Подожди, парень, ты куда?" - ти ир. "Куда-куда, домой!" "А отвечать кто будет?" "У меня с русским языком очень плохо, хорошо понимаю, без ошибок пишу, а разговаривать не могу". "Тогда, давайте договоримся так, вы чисто на башкирском языке отвечаете. В ходе ответа за каждое добавленное русское слово снижаю балл. Идет?" "Согласен!" Саф башҡортсанан һалдырып яуап бирә башланым. Уҡытыусы иғтибар менән тыңлап бөткәс, былай тине: "Признаюсь, мне очень стыдно, что я не знаю своего родного языка. Сегодня вы мне преподали важный урок, не вы сдали экзамен, а я. Спасибо Вам." Ошо һүҙҙәрҙән аҙаҡ имтихандан ҙур итеп "бишле" ҡуйҙы... Училищены тамамлағас, үҙемдең Йылайыр районында Сәлим тигән бәләкәй генә ауылда мунса ҙурлыҡ медпунктта хеҙмәт юлымды башланым. Ай ярым да эшләп өлгөрмәнем, армия сафына алдылар. Сик буйы ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт итеп, старшина булып ҡайттым. Ҡайтҡас, Ейәнсура районында "Тиҙ ярҙам" станцияһында эшләп алдым, шунан тыуған ауылымда яңы ғына асылған табип амбулаторияһына мөдир итеп саҡырттылар. Коллегалар медицина институтына инергә димләнеләр, әммә яңғыҙ әсәйҙе ҡалдырып ҡайҙа ғына бараһың инде?..

**➔ Шулай ҙа беҙ һеҙҙе бөгөн башҡорт прозаигы итеп беләбеҙ...**

- Аҡ халатлылар мөхите, әлбиттә, ижадымда эҙһеҙ үтмәне, беренсе сыҡҡан китабым "Ғүмер бүләк итәм" тип юҡҡа ғына аталмай бит. Шунан көтмәгәндә бирелеп китеп шиғырҙар яҙырға тотондом. Һирәкләп хикәйәләр ҙә яҙыштырам. Беренсе хикәйәм - "Тоҙло перәниктәр". Ул "Йәшлек" гәзитендә донъя күрҙе. Әммә яҙыусы булғы килмәй шыпа ла, яҙыусы булһаң, сәхнәгә сығып шиғыр уҡып булмай ҙаһа! Бер саҡ шиғырҙарымды бер папкаға тултырып алдым да Өфөгә юлландым, "Йәшлек" мөхәрририәтенә барып индем дә Хәсән ағай Назарҙы эҙләп таптым. Ул ҡабаланмай ғына яҙмаларымды уҡып сыҡҡас, һәр һүҙен кәлепләп үлсәп былай тине: "Мыртый, шиғырҙарың урта сама. Шәп тә түгел, насар ҙа. Әммә һинең ише имгәк шағирҙар беҙҙә быуа быуырлыҡ, йөрөрһөң инде шуларҙың араһында буталып. Мин бит һинең хикәйәләреңде уҡып күҙәтеп барам, арыу яҙаһың. Бар әле "Ағиҙел"дә ултырған Рәшит Солтангәрәйгә, минеңсә, һин уның кешеһе..." Рәшит ағай барып инеү менән былай тине: "Әле генә Хәсән шылтыратты, нишләп йөрөйһөң унда аҙашып?.."

Тағы ла ике йылдан республикала уҙғарылған йәш ижадсылар конференцияһында ҡатнаштым. Мостай ағай ҙа килгәйне. Ул сығышында Александр Твардовскийҙың "Топи котят пока слепые" тип ҡасандыр әйткән һүҙҙәрен дә иҫләп алды. Уның хаҡлы икәнен бөгөн килеп белдем - ҡулыңдан килмәһә, һәләтең булмаһа, ижад менән шөғөлләнмә икән ул, Хәсән ағай әйтмешләй, ниңә йөрөргә һалыҡ булып, үҙең йонсоп, башҡаларҙы этләндереп. Хәсән ағайға теге саҡ тәҡдим иткән шиғырҙар һаман да ята бер сумаҙан булып, ташларға ҡул бармай нишләптер, ни тиһәң дә, минең күҙ нурҙары тамған бит уларға, ихласлығым, тырышлығым һалынған.

Шулай итеп, ижад минең матур, ҡәҙерле донъяма, Мостай ағай әйтмешләй, тормошомдоң ҡояшлы яғына әйләнде. Туҡтауһыҙ тын алырға кәрәк булған кеүек, яҙмайынса йәшәй алмайым. Яҙмышымды яҙам. Күргәнкисергәнемде яҙам. Яҙыу аша тирә-яғыма шәхсән мөнәсәбәтемде белдерәм, әле булған, булып ятҡан, булырға тейеште күҙаллап яҙам. Йәштәр уҡыуҙан биҙҙе, тигәнде күҙҙә тотоп, уларға ҡулайлашып алып, уймаҡ хикәйәләр яҙа башланым. Яҙам да интернеттағы битемә ҡуям. Ниməһе ғәжәп, уҡыйҙар бит, үҙҙәренең теләктәрен һәм ҡараштарын белдерәләр. Хәҙер уймаҡ хикәйәләрҙән торған ҙур бер йыйынтыҡ әүәләп тә бөттөм инде, уның ҡасан донъя күререн бер Хоҙай белә. Шулай булмай тағы, "Китап" нәшриәтендәге сират биш йылға бер тапҡыр ғына бит. Ошо сиратты боҙорға, алдан ынтылырға, әрһеҙләшергә ярамай. Ә бит боҙорға ине. Кем ижад итә, кем эшләмәй, шул ашамай, принцибына таянып баҫһындар, әйҙә. Юғиһә, әллә ҡасан сыҡҡан әйберҙәрҙе ҡабаттан туплап, "Һайланма әҫәрҙәр" баҫыу модаға инеп китте, ә йәш кеше беренсе китабын сығара алмай көтөп йөрөй. Һайланма әҫәрҙәр, уйлап ҡараһаң, кисәге көн, ә бит урамда бөгөн икенсе мөхит, икенсе мөнәсәбәттәр, ана шул хаҡта яҙырға, ана шуларҙы яҡтыртырға кәрәк.

Элек әҙәби осрашыуҙар бик йыш була торғайны, яҙыусылар халыҡ араһына йыш сыға ине. Бына ошо матур күренеш тә юҡҡа сыҡты. Аралашыу, фекер алышыу юҡ. Үҙ донъябыҙға бикләндек. Яҙырға ла мөмкин, яҙмаһаң да һине борсоусы юҡ, йәғни үҙеңә-үҙең хужа. Был бик насар, үтә лә насар. Аралашҡанда ғына кешенең күңеле байый, бер-береңә яҡын булғанда ғына яңы фекер, идея тыуа.

Кеше китаптан биҙҙе, уҡыуҙан ситләште, тинем. Шулай булһа ла ижад итәм. Мине бер кеше генә уҡыған хәлдә лә яҙыр инем. Уҡымаһалар ҙа иҫем китә һалып бармай, тимәк, мин уның яҙыусыһы түгелмен, юғиһә, ҡайһы бер ҡәләмдәштәр, мине уҡымайһығыҙ, тип үпкәләй һалып бара. Уҡыу өсөн дә үҙәккә үткәреп, урын-еренә еткереп яҙа белергә кәрәк бит әле. Бөгөн "яҙыусылар", "шағирҙар" үтә лә үрсеп китте, теге саҡта Хәсән ағай әйтмешләй, улар эт тубығынан. Яҙа-йоҙа яҙалар ҙа аҡсаһын, яйын табып, үҙнәшер юлы менән китап итеп тә сығаралар. Ә унда йә хикәйә юҡ, йә шиғыр тигәндәй. Әүәле күҙәтеп барыу бар ине, контроль бар ине. Хәҙер ауыҙ тултырып яҙыусы, йә шағир тип иғлан итәләр, оятыма ҡаршы мин ул кешене белмәйем дә, уҡымағанмын да. Китаптың ҡәҙере китеп бара, һүҙҙең бәҫе, ҡеүәте кәмене, шуны ғына әйтмәксемен.

Шулай ҙа бөгөнгө йәштәргә өмөтөм ҙур. Шағирҙарҙан Салауат Әбүзәрҙе, Зөлфиә Ханнанованы яратып уҡыйым, сәсмә әҫәрҙәр йәһәтенән Мөнир Ҡунафинды, Миләүшә Ҡаһармановалы. Уларҙың ижадын күҙәтеп барам, яҡшы әйберҙәрен уҡыһам, ҡыуанып шылтырата һалам. Алай ҙа ошондай йәштәребеҙ бар. Тимәк, әҙәбиәтебеҙ йәшәне һәм йәшәйәсәк! Ай, Аллам, йәштәр, тим тағы, уларым бөгөн ҡырҡ-илле йәшлектәр икән дә баһа! Ә ҡайҙа 20-25 йәшлектәр? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юҡ. Бәлки, барҙыр ҙа. Эҙләһәң, табып та булалыр. Был теләгем - Яҙыусылар берлегенә.

Әҙәм балаһын өмөт йәшәтә, тиҙәр, әйҙәгеҙ, бөгөнгө көндө яманламай яҡты киләсәккә өмөт итәйек. Матурлыҡты күрәйек, матур булырға тырышайыҡ. Ижадтың асылы ла бит - яҡтылыҡ, нур!

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА әңгәмәләште.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# НИСЕК КӘЗӘ ҠАЯНАН ҠОЛАМАЙ?



**Кеше, башҡа йән эйәләренә ҡарағанда мин күпкә көслө бит әле, тип маһайып ҡуя. Әммә тормош ваҡыты менән тап киреһен иҫбатлап тора.**

Бына әле һеҙ күргән фотоһүрәттә һөйәп ҡуйған кеүек текә ҡаяла ғорур баҫып кәзә тәкәһе тора. Әлбиттә, кеше был "геройҙан" күпкә көслө, ә шулай ҙа беребеҙҙең дә ошо ҡаяға менеп, уның эргәһенә баҫып торорға йөрәге етмәҫ, моғайын. Мин был кәзәне Ағиҙел буйында, әле төҙөлөп ятҡан мәсет тапҡырындағы ҡаяла, төшөрөп алдым. Шуныһы аптырамалы, әле ҡыш айы, ҡар яуғанға байтаҡ ваҡыт үтеп китте, ә кәзә буйтым көр генә, бер ҙә аслыҡтан йонсоп йөрөгән малға оҡшамай.

Дөйөм әйткәндә, бауһыҙ-арҡанһыҙ бер кеше лә менә алмай быҙдай текә ҡаяға. Яланғул көйө ҡаяға үрмәләү түгел, хатта яҡын барырға ҡурҡып торабыҙ. Ә кәзә, беҙҙән көлгәндәй, хатта мыҫҡыл иткәндәй, шул ҡаяла дыу килә: йә аҫҡа сабып төшә, йә өҫкә үрмәләй, йә ғорур ҡараштарын өҫкә төбәп, ҡатып ҡала. Йәйге йылы көндә ҡая ташы, бәлки, баҫыуға уңайлылыр, кәзә һәйбәт урынды алдан күрәлер. Әммә бөгөн ҡыш, ҡая киртләстәрен ҡар ҡаплаған. Ҡайҙа баҫырға кәрәк-кәрәкмәй икәнен кәзә нисек һиҙәлер ҙә нисек самалайҙыр, быны беҙгә аңлауы ҡыйын. Ә беҙ бит ваҡыты менән хатта тигеҙ юлда тигеҙ итеп атлай белмәйбеҙ. Йә абынып китәбеҙ, йә һөрөнөп китәбеҙ, хатта ҡолап китәбеҙ. Аҙаҡ кире аяҡҡа баҫҡас, ҡул менән салбар-малбарҙы ҡаҡҡас, дүрт аяҡлы ат та һөрөнә әле, тип үҙебеҙҙе йыуатабыҙ. Ә берәй сәбәп табып, ҡаяға үрмәләргә кәрәк була ҡалһа, эш харап. Ҡолас буйы арҡаны кәрәк, әллә ниндәй ҡорамалы кәрәк, тағы әллә нимәләр кәрәк. Ҡаяла ҡыя-мыя һикереп йөрөү ҡайҙа ул, тура ғына менәбеҙ ҙә тура ғына төшәбеҙ.

Бына шулай, был йүнәлештә иҫәп әлегә беҙҙең файҙаға түгел.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



## ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨ

■ 18 йыл буйы 47 мең пациентты күҙәткәндән һуң, немец ғалимдары йәйәү йөрөүҙең күп ауырыуҙарға ҡаршы тороуын асыҡлаған. Саф һауала йәйәү йөрөргә яратыусыларҙы йөрәктәре, йөрәк-ҡан системаһы ғына түгел, эсәк-ашҡаҙан сирҙәре лә һирәгерәк борсой.

■ Диабет менән яфаланыусылар әстерхән сәтләүеген йышыраҡ ҡулланып, ҡан тамырҙары һығылмалығын арттыра ала. Бындай һығымтаға АҠШ-ның Нью-Хейвен университеты ғалимдары килгән. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм грек сәтләүеге ашаған һәм эксперимент аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы арткан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сәтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып (мәҫәлән, 56 грамм әстерхән сәтләүегендә - 400 ккалорий), дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

■ Германияның Тирә-яҡты һаҡлау буйынса федераль ведомствоһы аш-һыу әҙерләү өсөн тик таҙа һыу ҡулланырға кәңәш итә. Быны өсөн улар крандһ асҡандан һуң 10-20 секунд көтөп торорға һәм шунан ғына һыу алырға ярай, тип белдерә. Һыу краны 4 сәғәттән артыҡ асылмай икән, торбалағы һыу ундағы зарарлы матдәләрҙе үҙенә һендерә башлай. Шуға ла кранды асҡас, бер аҙ көтөп тороу сәләмәт булыуҙың бер шарты, ти ғалимдар.

■ Ҡыш тыуған балалар ҡурылдай астмаһы менән өс тапҡырға йышыраҡ сирләүсән була, тип хәбәр итә Америка ғалимдары. Улар был хаҡта, һәр ваҡыттағыса, раҫлап ҡына ҡалмайынса, сәбәптәрен дә аңлатып бирҙе. Элегерәк был сирҙең сәбәптәрен ҡыштың осорҙа тын юлдары вирусының киң таралған мәл булыуына бәйләнәләр, әле иһә ҡыш һауала саң һәм үңәҙ һеркәләренең күпләп туплаңыуы менән аңлатыла.

■ Америка ғалимдары асыҡлауынса, ашҡаҙан аҫты биҙенең яман шеш сире кешенең ниндәй ҡан төркөмөнә ҡарауына бәйле. 100 мең кешенең һаулыҡ торошон тикшергәндән һуң, ғалимдар ҡаны I төркөмгә ҡараған кешеләрҙең ашҡаҙан аҫты биҙе менән бик һирәк сирләүе, ә III төркөм ҡанлыларҙың был сиргә йыш бирешеүен асыҡлаған. "Әгәр I төркөм ҡанды өлгө рәүешендә ҡараһаҡ, ҡаны II төркөмгә ҡараған кешеләрҙең яман шеш менән ауырыу хәүефе - 32, III төркөм өсөн - 72, ә IV төркөм өсөн 51 процентҡа арта", - тип раҫлай тикшеренеүселәр. Шул уҡ ваҡытта улар III төркөм ҡан йөрөтөүселәрҙе, сирҙе ваҡытында асыҡлау өсөн, ашҡаҙан аҫты биҙҙәрен УЗИ ярҙамында йышыраҡ тикшереп торорға саҡыра.

■ Джорджия штатының Атланта ғалимдары белдереүенсә, үҙенең тирә-яғынды гел генә таҙа тоторға тырышыу депрессияға килтерә. Яңыраҡ Британия ғалимдары был сәйер ғәҙәттәр исемлеген тағы ла тулыландырған. Лондондың Cranley клиникаһы дерматологы Ника Лоу әйтеүенсә, ҡулдарҙы йыш йыуыу ҙа насар, йылы һыу һәм һабын ҡул тиреһенең кибеүенә килтерә. Лафборо университеты профессоры Джим Хорн 8 сәғәттән күберәк йоҡламаҫҡа кәңәш итә, юғиһә, арыу тойғоһо барлыҡҡа киләсәк. Оҙаҡ йоҡлау урынына көндөҙ 4-15 минут серем итеп алыу файҙалыраҡ икән. Стоматолог Фил Стеммер теште таҙартҡандан һуң ауыҙҙы һыу менән сайҡайтыуҙы ла насар ғәҙәткә һанай, сөнки теш пастаһының файҙалы матдәләре йыуыла. Бынан тыш, ашағандан һуң тештәрҙе йыуырға ярамай, аҙыҡ-түлек теш эмален йомшарта һәм уға кире үҙенең элекке хәленә ҡайтыу өсөн ярты сәғәт тирәһе ваҡыт кәрәк.

ЕТМЕШ ЕТЕ ҺӨНӘРЛЕ...

**Ҡыҙыҡ, донъялар алмашына: элегерәк беҙ урамдан машина үтеп барһа, йә тәҙрәгә йомолоп, йә урамға йүгереп сығып ҡарап ҡала инек, ә хәҙер ыжламайбыҙ ҙа, машина күп урамда, хатта оло юлда торған малдар ҙа әйләнеп ҡарамай, ә бына саналы ат үтеп барһа - таңһыҡ, күреп ҡалырға тырышабыҙ: санаһы ла, атының еңелсә юртып барыуы ла күңелгә яҡын, санаһындағын таныған килә.**

# АТЛЫ, ЭТЛЕ ҺӘМ...

## мылтыҡлы Хәбир



Беҙҙең Килдеғолда ата-бабалар рухын һаҡлап, боронғолоҡто йәшәтеп, саналы атта йөрөүсе икәү бар. Уларҙың береһе - Исхаҡов Хәбир, аты-ние менән хатта Ҡыҙыл китапҡа индерерлек. Кем нисектер, ә беҙҙең Хәбир атһыҙ, этһеҙ, мылтыҡһыҙ һәм урманһыҙ йәшәй алмай. Улар Хәбирҙең йөрәк түрендә, ҡанында. Атаһы Әмир ағай Исхаҡов та шулай булды, алдынғы колхозсы, өстәүенә атаҡлы һунарсы ине. Аулаған айыу-бүреләре 60-лап, тау артындағы йыуан ҡарағайҙа ҡоролған таҙғағының һайғауҙары әле булһа һаҡлана, үткәндәрҙе, ҡыйыу һунарсы ауылдаштарын белһендәр тип, уҡыусыларҙы алып барып, тарихын һөйләп, таҙғаҡты күп күрһәттем.

Әмир ағай менән Гөлнур апай ете бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Бәләкәй саҡымдан хәтеремдә, улар тәүҙә беҙҙән өй аша ҙур булмаған йортта йәшәнеләр. Һуңынан түбәндә, ауылға ингән ерҙә иркен һәм матур йорт һалып сыҡтылар. Ауыл осонда булғанғамылыр, әлләй хужаларҙың яҡты йөҙө, киң күңеле, ҡунаҡсыллығы тартып торҙомо, Урал йәйләүҙәренә барыусы-ҡайтыусылар, башҡа юл-йөрөмсәләр тәүҙә уларҙың ишеген шаҡыны һәм был йортта йылы тапты.

Шундай ғаиләлә үҫте Хәбир. Ғәфүр ағайы, Хәлим, Ғәлим ҡустылары кеүек үк, бәләкәйҙән йорт эшендә лә, колхоз эшендә лә атай менән бергә булды, әйткәндәй, Әмир ағай малайҙарын ҡатынҡы, эшкә беше итеп тәрбиәләне. Малай ғына сағынан атҡа атланды Хәбир, йәйгелек һәр иртәлә урмандан атайһын атын табып алып ҡайтыу үҙе бер ҡыуаныс ине. Шул саҡта башланды ла инде уның тилберлеге, урманға ылығыуы.

Армиянан һуң Бөрйәндә тракторсылыҡҡа, Йылайырҙа веттехникҡа уҡый ул. Ике йыл тракторҙа, өс йыл ветеринар булып эшләй. Бер осор "Урал"колхозы йылҡысылыҡҡа иғтибарҙы көсәйтте, хатта ҡымыҙ фермаһы булды. Хәбирҙең йөрәгендәге ут инде ат, йылҡыға күсә. Аталы-уллы Хәйҙәр, Фәнил Әйүповтар һәм ағаһы Ғәфүр Исхаҡов менән ат ҡарап, көндәре, айҙары, йылдары урманда үтә. Көн дә урман гиҙеү ҡанда булғанды уятып ебәрә лә инде, аусы ҡомары йоҡҡан Хәбир йәшләй генә һунар итә башлай. Айырыуса бүре аулауға әүәҫләнеп ала. Ә инде төлкөгә, бүрегә һунар итеүселәр беҙҙә ҙур почетта. Сөнки яҡшы беләбеҙ: ҡалала, йылы һәм яҡты кабинетта йомшаҡ креслола ултырған ҡайны берәүҙәр өсөн генә ул бүре - санитар, хатта докторлоҡ диссертацияның яҡларға мөмкин, ә бына мал көсөнә таянып йәшәгән ауыл кешеһе өсөн ул иң зыянлы йыртҡыс, бер төндә кәртәндәге бөтә һарыҡтарыңды тамаҡлап сығырға мөмкин. Бындай миҫалдар күп бит инде хәҙер.

Утыҙ йылдан ашыу һунарсылар йәмғиәтендә ағза булып торған Х. Исхаҡовты районда ла, башҡа яҡтарҙа ла ҡурҡыу белмәҫ бүре аулаусы тип беләләр, ҡыҙыҡһыныусылар әллә ҡайҙарҙан киләләр, бүре тиреһе һорайҙар. Һарғаялағы Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы музейына ла Хәбир тотҡан бүре ҡатырып ҡуйылған.

-Төлкөнө һанап тормайым, алған бүреләремдең һаны 42-гә етте, - ти тәжрибәле һунарсы. - Күберәген ҡапҡанға, тоҙаҡҡа эләктерәм. Эттәрем шәп, бер йылы урманға мылтыҡһыҙ сыҡҡайным, бүре осраны. Эттәрем бәстырып киттеләр тегене. Мин атым менән ҡыуам. Ҡыуып етеп күҫәк менән туҡмап алдым яуызды. Бүрегә һунар бик хәүефле, ныҡ һаҡ, һиҙгер булыу кәрәк. Аҡылға һай түгел йыртҡыс. Бер йылы Ваһапов Рәүеф менән Яланйылғала мал көтөп ятабыҙ. Бүрегә тоҙаҡ ҡорҙом. Икәүләп барып ҡараһаҡ, эләккән, ағас төбөндә тора ырылдап. Рәүеф тегегә яҡынлағайны, ҡапыл ырғыны, саҡ эләктермәй ҡалды, битен йолҡа тарта ине. Тоҙаҡ торосо оҙон ғына ине шул.

Быйылғыларының тарихы былай: бер ҙур боланды баҫтырып барып, Ҡыҙҙаргиткәндә йыҡҡандар ҙа яртыһын ашап киткәндәр. Эҙҙәр буйлап барып, емтек эргәләп тоҙаҡ һалып ҡайта Хәбир. Икенсе барыуына бүре эләгеп олоп ултырмаһынмы. Тоҙағын тағы ҡороп ҡайтһа, йәнә эләккән. Бер-бер артлы өс бүрене ала. "Әле һигеҙ бүре йөрөй эйәртенешеп, тик улар үрҙән был яҡҡа күстеләр", ти алтмышын ҡыуған Хәбир. Ауылдаштары уға артабан да табышлы һунар теләй, юғиһә, хәҙер бүре күбәйҙе, малға ғына түгел, кешегә, емеш-еләккә тип урманға сыҡҡан ҡатын-ҡыҙға, бала-сағаларға ла ҡурҡыныс.

Хәбир Әбйәлил ҡыҙы Рәмзилә менән ике ҡыҙ, бер ул тәрбиәләп үҫтерҙеләр, ҡыҙҙары ҡырҙа тормошта, улдары үҙҙәре менән. Вәли ҙә атаһына оҡшап эшкә әрһеҙ, урманда йылғыр. Исхаҡовтар кәртә тултырып мал тоталар тиһәм, ҡоро һүҙ генә буласаҡ. Сөнки кәртәң бәләкәй булһа, бер һыйыр менән дә тулып торорға мөмкин, шуға асыҡлап әйтәм: 6 һыйыр, 5 ат, берәнсә баш ваҡ мал көтәләр. Йыл да йәй уларҙың күркәләре тау тулып йөрөй торған. Рәмзилә хат ташыусы булғанында эшкә бик яуаплы ҡарауын күрһәтте. Әле лә тик ятмай, кәсебе бар: магазиндарға ултыртҡан һөтөн шундуҡ алып бөтәләр, үҙҙәренең һыйырҙары быҙаулағанысы хәлгә инеүенә рәхмәтле ауылдаштары. Сафина Гөлнара менән бына бер нисә йыл инде район үҙәгенә һатыу итергә йөрөйҙәр. Базарҙа үҙ урындары, өстәлдәре бар, тауарҙарын теләп алалар.

Йәшәйем, ғаиләмде йәшәтәм, тигән ауыл кешеһе сосайып, эшен дә, шөғөлөн дә табып тормошон көйләй. Беҙҙең Исхаҡовтар шундайҙарҙан.

**Мөнир ФӘЙЗУЛЛИН.**
**Бөрйән районы.**

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# ЙОРТ ТУРҒАЙЫ

**Йорт турғайы беҙгә бәләкәйҙән таныш. Уның башҡа исемдәре лә етәрлек - өй турғайы, өй сыпсығы, (нишләптер) хәрәм турғайы, ауыл турғайы. Ә шулай ҙа беҙ уны ябай ғына итеп, турғай, тип йөрөтәбеҙ. Был ҡош өй-һарайҙың ҡыйыҡ башына оя ҡорорға ярата. Шифер менән ябылғандары бигерәк дан инде уға. Шифер тулҡындары инергә-сығырға ла уңайлы, өй тәҙөү өсөн дә йәтеш. Оя ҡорорға урындар етәрлек булһа ла, нишләптер, ваҡыты менән сыйырсыҡ ояһына оялап ҡуя. Яҙ осоронда сыйырсыҡтар ғаиләһенең "баҫҡынсыларҙы" оянан ҡыуып сығарыуға көстәре етә былай. Ә шулай ҙа йәй осоронда, киреһенсә, ҡайһы ваҡыт турғайҙар сыйырсыҡ ғаиләһен оянан ҡыуып сығарып ебәрә.**

Турғай кеше йәшәгән ерҙән алыҫ китергә яратмай. Улар ауылда йәшәүселәрҙең йәшәү рәүешенә бик тиҙ ҡулайлаша. Әгәр берәй кеше һатып алған бойҙайын тоғо-ние менән ултыртып ҡуйҙы икән, турғайҙарға хөрриәт инде. Би-

*СӘЙЕР ҒӘҘӘТ*

# ҺЫНАМЫШТАРҒА...

## һаман ышанабыҙ әле



**Башҡорт халҡында һынамыштар бик күп, улар тәбиғәтте, уның айырым күренештәрен йәнләндереү һымаҡ бик боронғо замандарҙан килгән тәжрибәгә таянып та, мәжүсилек осорондағы ышаныуҙарҙан, хәҙерге замандарҙа тәбиғәт күренештәрен күҙәтеү нигеҙендә лә барлыҡҡа килгән.**

Бына ауылда нык таралған ышаныуҙарҙан ошондайҙарҙы килтерергә булалыр: ауыл эсендә кәкүк саҡырһа, бәлә килеүе бар, уны тиҙерәк ҡыуып ебәрергә кәрәк; ҡоҙғон ҡарҡылдаһа, мәйет сығыр, тигән кеүек ышаныуҙар һаман да йәшәп килә. Аҡкошто, торнаны атырға ярамай, өйгә бәлә килер, тигәнде булған бәлә-ҡазалар менән раҫлап та ҡуялар. Тағы эт олоһа ла ҡазаға, тауыҡ әтәс булып ҡысҡырһа ла яҡшыға түгел, тиҙерәк һуйып ашарға кәрәк, тәбиғәт күренештәренән имән япраҡ ҡоймаһа, ирҙәргә ауырлыҡ килер, йә һуғыш сығыр һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Төрлө тәрбиәүи һынамыштар ҙа бар ине беҙ йәшерәк саҡта: мәҫәлән, олатайҙар, бабайҙар ҡыш көнө ат менән бесәнгә барһаң, тейәгән саҡта таған башында бесән ҡалдырма - бисәң мыйыҡлы булыр, тиер ине. Яңағыңа таянма - етем ҡалырһың; иҙәнде таҙа һепер - ирең быжыр (шаҙра) булыр; тупһала ултырма - үҫмәҫһең; утҡа төкөрмә - ауыҙың ҡутырлар; киҫкән тырнағыңды теләһә ҡайҙа ырғытма- шайтан ашыңа һалыр, бирәнгә әйләнерһең; сәс киҫкәс, утҡа яҡ, юғиһә, ҡош бейектәге ояһына ташыр ҙа шунан башың ауыртыр; кеше алдынан буш биҙрә менән үтмә, ярамай; өйҙә һыҙғырма, тешең төшөр тигән һәм башҡа бик күп һынамыштар аша тәрбиәләне беҙҙе ололар.

Тағы шундайыраҡтары иҫтә ул тәрбиәүи һынамыштарҙың. Мәҫәлән, беҙҙә урманда, яланда аш бешергәндә башҡа яҡтарҙағы кеүек ҡатмарлы тағандар яһап тормайынса, кәкерерәк таяҡ киҫеп алалар ҙа бер яғын ослайҙар, икенсе яғына һауыт элерлек киртләстәр яһайҙар. Таяҡтың осланған яғын ергә (аҫҡылыҡ, аҫҡаҡ тиҙәр) ҡыялатып ҡағалар ҙа аҫтына ут яғып, аш бешерә лә башлайҙар. Һуңынан таяҡты һурып алып, һалып китергә ҡушалар. Сөнки мал ҡаҙалыуы бар. Был эш мотлаҡ башҡарылһын өсөн шулай тип әйтәләр: әгәр ергә ҡатылған килеш ҡалдырһаң, ирлек кәрең кәмер, имеш... Ошоға бәйле бер мәҙәк хәлде лә һөйләйҙәр: бесәндән ҡайтырға йыйынғас, кейәүҙәре таған урынынан һурып алырға уйламай ҙа икән. Ҡәйнәһе: "Кейәү, тағанды ергә һалып кит, ямғыр теләп тормаһын", - тигән була икән. Күрәһең, ул да ышанғандыр был юрамышҡа, ҡыҙын ҡайғыртҡан инде...

Юлға сыҡҡанда ҡайһы бер юллыҡһыҙ тип иҫәпләнгән кешегә осраһалар, әле лә кире боролоп кереп, көҙгөгә ҡарап, йә һыу эсеп, йә яңынан өҫтәл артына ултырып сәй эсеп, яңынан ҡуҙғала күптәр. Шул кешегә осрағайным, кире ҡайтып торманым, барыбер юлым уңманы, тигәндәрен дә ишеткән бар... Ә ҡара бесәйҙең юлды киҫеп үтеүе юлдың уңмауына килтерә тигәнгә ышаныуҙар кәмегәнгә оҡшай, шулай ҙа... Һынамыштарға ышаныуҙарҙың кәмей төшөүе дини белемдәр таралыуы, халыҡтың дингә ылығыуы һәм диндең йондоҙнамә фаразларын, күрәҙәлек итеүҙәрҙе әллә ни хуплап бармауы менән дә аңлатылалыр.

Тәбиғәт күренештәренә һынамыштар байтаҡ, миҙгелдең, айҙың, көндәрҙең нисек килеүен юрауҙар шул һынамыштарға таяна. Беҙҙең ауылда, мәҫәлән, көнбайышта Инйәр йылғаһы Түбәнге ауыл һырты менән Өкө тауы араһында офоҡ сигендә өскөл барлыҡҡа килтерә. Уны Өскөл ти ҙә ҡуялар. Өскөл болотло булһа - яуынға, оҙаҡ яуындан һуң Өскөл ҡыҙарһа - аяҙға. Болот Йөйәк башына ағылһа - яуынға, Болот Өкө тауы яғына китһә - аяҙға. Ҡаратауҙан томан тәгәрләп төшһә - яуын туҡтай, Ҡымыҙлыҡ һырты шаулаһа - яуынға. Тәүге ҡар күренеп, ҡырҡ көн үтһә, ҡыш булыр. Ай кәртәләнһә, көн боҙолор, ай салҡан тыуһа, көн һәйбәтләнер һәм башҡа шундай бик күп һынамыштар йәшәй ауылда. Тик күп һынамыштар хәҙер бик тап килеп тә бөтмәй, быны төрлөсә аңлата халыҡ: йәнәһе, күкте тишеп, тәбиғәтте үҙгәртеп, Аллаһы Тәғәләнең башын әйләндереп бөттөләр, тиҙәр. Мәҫәлән, элек Мәскәүҙә аяҙытһа, йә ямғыр башланһа, өс көндән беҙгә шул һауа торошо килеп етә торғайны, хәҙер улай түгел. Америка беҙгә климат яуы асҡан, имеш, тип һөйләй биреп ҡуя мәғлүмәт сараларының һуңғы яңылыҡтары менән танышып барыусылар. Ә барыбер һынамыштарға ышаныуҙы дауам итә әле халыҡ...

**Ринат ШӘЙБӘКОВ.**
**Белорет районы**
**Йөйәк ауылы.**



гerәк тә хужа, йыбанып, тоҡ ауыҙын асыҡ ҡалдырһа. Асыҡ ҡалдырмаһа ла артыҡ зыян юҡ. Турғайҙарға тоҡто тишеп алыуы әллә ни ауыр түгел. Әгәр ҙә инде бойҙай ныҡлы ларға бушатылып, уның ауыҙы бикле булһа, турғайҙар кешенең тауыҡтарға ем һипкән мәлен күҙәтә-аңдый башлай. Бында кешенең хата ебәреүе бар. Әгәр ул бойҙайҙы услап ергә һибә икән, турғайҙарға тағы хөрриәт. Һибелгән аҙыҡтың бик әҙ генә өлөшө тауыҡтарға барып эләгә. Яу һымаҡ ябырылған "башы ҡороғорҙар" уны тиҙ арала сүпләп бөтә. Әгәр хужа бөтмөр икән, әгәр бойҙайҙың бөртөгө лә турғайҙарға тәтемәй икән, улар өй тирәһендәге ҡоймаға теҙелеп, бушты бушҡа бушатып бушҡа өмөт итеп ултырмайҙар. Аҙыҡты ауылдың башҡа тирәһенән эҙләйҙәр. Ә шулай ҙа был өйгә ара-тирә күҙ һалып китергә онотмайҙар. Кем белә, бәлки, хужаның малайы емде "урын-еренә еткереп" һалып инеп китер. Шулай була ҡалһа, бындай "шатлыҡлы" хәбәр турғай өйөрөнә бик тиҙ барып етә. Күп тә үтмәй, улары осоп та килеп етә.

Һибелгән бойҙай менән генә туҡланмай турғай. Бөжәктәр менән дә туҡланырға ярата, хатта мәжбүр була. Сөнки атай-әсәй үҙ себештәрен бөжәктәр ашатып үҫтерә. Әйткәндәй, беҙҙең өсөн турғай ғаиләһе үрнәк була ала - йәш ғаилә ғүмерҙәре буйына бер-береһенә тоғро ҡала, парҙар бер-береһен ташламай. Танышыу-һөйләшеү осоро әллә ни оҙон булмаһа ла төҙөлгән ғаилә ныҡлы була. Йәш ҡоштар февраль-март тирәләрендә үҙ парҙарын эҙләй башлай. Марттың аҙағына "силәктәрҙең" күбеһе үҙ "ҡапҡастарын" табып бөткән була. Уҙа барһа, ай ярым була танышҡандарына, ә бер-береһенә булған тоғролоҡ ҡала ғүмергә! Ошолай йәш ғаиләнең тормошо башланып китә. Апрель айында ояла тәүге йомортҡалар барлыҡҡа килә. Инә ҡош етегә хәтлем йомортҡа һала. Уларҙы ике аҙна самаһы баҫалар. Бәпәй-себештәр көсһөҙ генә булып донъяға килә. Атай-әсәй уларҙы матур итеп ҡарай-тәрбиәләй. Ун көндән һуң йәш ҡоштар осорға һәләтле була. Тора-бара улар үҫә, нығына, үҙаллы тормош ҡорорлоҡ була.

Уйлап ҡараһаң, бәләкәй генә, ҡарар күҙгә әллә ни салынып бармаған ябай ғына ауыл турғайы. Ә ғаилә ныҡлығы менән күптәргә өлгө булырлыҡ икән был ҡош!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 8-се идея: Уңышмы әллә еңелеүме?

Үҙ эшмәкәрлегеңде һин уңышлы тип иҫәпләйһеңме, әллә түгелме? Мин тормошобоҙҙағы уңышһыҙлыҡтарҙың күбеһе - уйыбыҙҙағы, аңыбыҙҙағы күрһәтмәләрҙең эҙемтәһелер, тип уйлайым. Әгәр шәхес уңышҡа ышанмаһа, уға өлгәшә алмай.

Әммә тәүәккәл, үҙ-үҙенә ышанған һәм ҡыйыу кешеләр өсөн юл һәр ваҡыт асыҡ булалыр ул. Тап уйыңда үҙеңде еңеүгә көйләү, үҙ көсөңә ышаныу һәм эске өҫтөнлөгөңдө тойоу был донъяла мөғжизәләр тыуҙыра ла инде. Әгәр һиндә үҙеңде ошондай көйләү булмаһа, бөгөндән үк уны формалаштырырға тотона алаһың.

Беҙҙе ҡатмарлы көстәр системаһы уратып алған, һәм ҡайһы берҙә даими, тиҙ үҙгәреп торған донъяла беҙ шарттар көсө тәьҫирендәбеҙ, тип ҡысҡырғы килә. Ысынында иһә, беҙ үҙебеҙ өсөн нимә һайлағанбыҙ, шуны ғына үтәйбеҙ.

Хатта билдәле бер юлды һайларға теләмәһәк тә, аҙаҡ килеп, барыбер уға баҫабыҙ, сөнки беҙгә был юлда ҡаршылыҡтар кәмерәк кеүек тойола. Беҙ күрәләтә еңел юл һайлайбыҙ, ә бит киләсәктә быны уңайһыҙлыҡтар һәм ҡыйынлыҡтар килтеререн аңлап торабыҙ. Беҙ һәр ваҡыт - эш мәсьәләләрендә булһынмы, ғаилә мөнәсәбәттәрендәме, көндәлек эштәр донъяһындамы - ҡарарҙар сатында ҡалабыҙ. Һәр ваҡыт һайлау мөмкинлеге бар, шуға күрә дөрөҫ һайлау үтә мөһим.

Күреүегеҙсә, теләһә ниндәй ҡаршылыҡты ла еңергә ярҙам итеүсе көс үҙебеҙҙең эстә булыуын аңлағас, ярҙам һорап саҡырыуҙан туҡтайбыҙ. Беҙ үҙебеҙҙең эске "Мин"ебеҙ менән тыныс ҡына әңгәмә ҡорабыҙ һәм шул саҡта менталь көстөң Эске ресурстарына көйләнеүебеҙҙе асыҡлайбыҙ. Был көстөң сере фекерләүгә, тәртип нормалары ресурстарын аңлауға ҡайтып ҡала. Теләгән нәмәбеҙҙе эшләргә, теләгән һөнәребеҙгә эйә булырға, ынтылған бөтә нәмәгә өлгәшергә булышлыҡ итеүсе көс беҙҙең эстә булыуын аңлай башлағас ҡына беҙгә тормош, ғүмер уңышы - үҙ уңышыбыҙ килә. Тормош юлында осраған төрлө көстәрҙән һәм шарттарҙан өҫтөн тороусы ниндәйҙер бөйөк Көс үҙ эсендә булыуына ышанмай тороп, кеше бер генә бөйөк ғәмәлде лә ҡыла алмай, тип иҫәпләйем.

Быға ышанған кешеләрҙән, "бер көйләрәк" тип иҫәпләп, дуҫтары һәм күршеләре көлөүе ихтимал. Шунан оялып һәм, ысынлап та, йүләрлек тип иҫәпләп, күптәр ғәҙәти көндәлек тормошона әйләнеп ҡайта һәм ғүмер буйы арып-талып, уңышһыҙлыҡтары менән килешеп йәшәй ҙә, үлемде борсолоуҙарҙан ҡотолоу, еңеләйеү тип ҡабул итә. Һин шундай кешеләрҙең береһе булырға йыйынаһыңмы, әллә үҙеңдең Эске Көсөңә ҡолаҡ һалырһыңмы?

Үҙ аңыңдың ижад итеү көсөн файҙалана башла. Алдан күрә белә торған көсөңдө файҙалан, сөнки һинең фекерләүең был көстө эшләргә мәжбүр итеүсе көслө ағым булып тора. Үҙ менталь көсөңдө Ғөмүми Зиһенең менән тоташтыр - һәм һин сағыу шәхескә әйләнәсәкһең. Маташ, әйҙә! Тормошоңдағы һәр төрлө проблемаларҙы хәл итерлек асҡыс табыуыңды асыҡларһың. Ябайлаштырып әйткәндә, әгәр һин "был эш минең хәлемдән килә" тип, бөтә ихтыярыңды туплап уйлаһаң, нимәгә тотонһаң да, ҡулыңдан килер, башҡарып сыға алырһың. Һәр төрлө шарттарҙа ла уңыш, еңеү тәүҙә һәм иң элек һинең аңыңда бара. Үҙеңде маҡсатыңа өлгәшеүсе итеп күр, һәм һин уға өлгәшерһең.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## БСТ
## 17 ФЕВРАЛЬ ДҮШӘМБЕ

7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.
14.00 Итоги недели (на рус. яз.).
14.45 Специальный репортаж. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
16.15 "Гора новостей".
16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
17.45 Интервью.
18.00 Ради добра. [6+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК Сочи.
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Теге өсәү. [12+]
23.30 Күстәнәс. [12+]
0.00 Т/с "Зоя". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Матери ждут сыновей". [12+]
4.45 Орнамент. [6+]
5.00 Историческая среда. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 18 ФЕВРАЛЬ ШИШӘМБЕ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
11.15 Республика Live. #Дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә" (на баш. яз.).
14.30 "Дорога к храму". [0+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Тайм-аут. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Криминальный спектр". [16+]
20.30, 23.00 История одного села. [12+]
20.45 Полезные новости. [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 "Детей много не бывает". [0+]
23.15 Земляки. [12+]
23.30 Үткән ғүмер. [12+]
0.00 Т/с "Офицерские жены". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Моя звезда". [12+]
4.45 Орнамент. [6+]
5.00 Историческая среда. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 19 ФЕВРАЛЬ ШАРШАМБЫ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
11.15, 18.00 100 имен Башкортостана. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә" (на баш. яз.).
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "АйТекә!" [6+]
15.45 "Сыйырсык". [0+]
16.15 "Гора новостей".
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Инцидент-репортаж. [12+]
20.45 Честно говоря. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Т/с "Офицерские жены". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Суд матери". [12+]
4.45 Наука 102. [12+]
5.15 Орнамент. [6+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 20 ФЕВРАЛЬ КЕСАҘНА

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә" (на баш. яз.).
14.30 Земляки. [12+]
14.45 Ради добра. [6+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Д/ф "Рами Гарипов". [12+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 100 имен Башкортостана. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Криминальный спектр". [16+]
20.45 Полезные новости. [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 Республика Live. #Дома. [12+]
23.00 "Вернусь..." [12+]
0.30 Т/с "Офицерские жены". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.30 Спектакль "Земляки". [12+]
5.15 Весело живем. [12+]
5.30 Наука 102. [12+]
6.00 Историческая среда. [12+]

## 21 ФЕВРАЛЬ ЙОМА

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]
11.15 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Точка Z. [12+]
12.30, 21.00, 6.00 Башҡорттар. [6+]
13.00, 18.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30, 16.30 Это мы! [6+]
14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей".
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.20 Хоккей. КХЛ. "Барыс" (Нур-Султан) - "Салават Юлаев" (Уфа).
22.00 "ВасСәләм!" [16+]
23.00 "Мисс Интернешнл". [12+]
23.30 Уфа. Живое. [12+]
0.15 Т/с "Офицерские жены". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.15 Спектакль "Бәндәбикә и Ерәнсә Сәсән". [12+]
4.00 "Бай". [12+]
4.30 Автограф. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]

## 22 ФЕВРАЛЬ ШӘМБЕ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.15 Посмотрим... [6+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 Преград.Net. [6+]
10.30 "Книга сказок". [0+]
10.45 "Сыйырсык". [0+]
11.00 "Апчхи". [0+]
11.15 "Байтус". [6+]
11.30 Бирешмә. Йырла. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Автограф. [12+]
13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
13.15 Земляки. [12+]
13.30 Хазина о Хазине. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Концерт группы "Бүреләр". [12+]
19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.00 Ради добра. [6+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Караоке по-башкирски. [12+]
22.30, 2.45 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 Концерт Уфимского фольклорного ансамбля песни и танца "Мираҫ". [12+]
1.15 Т/с "Офицерские жены". [16+]
3.30 Спектакль "Шаймуратов генерал". [12+]
5.30 Д/ф "Самые крупные катастрофы". [12+]

## 23 ФЕВРАЛЬ ЙӘКШӘМБЕ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15, 13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 "Станем мы солдатами". [0+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТекә!" [6+]
10.30 Д/ф "Герои среди нас". [0+]
11.15 Первый студенческий форум #Дома. [0+]
11.30 "Гора новостей". [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [6+]
12.30, 5.30 Историческая среда. [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.45 Башҡорттар. [6+]
16.15 "Дорога к храму". [0+]
16.50 Хоккей. КХЛ. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа).
19.30 Полезные новости. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 Теге өсәү. [12+]
21.00, 22.30 Республика Live. #Дома. [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.00 "Красная кнопка". [16+]
23.45 Концерт группы "Аргымак". [12+]
1.45 Х/ф "Перед рассветом". [16+]
3.15 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]


ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

# Обогреватель с эффектом горячего кирпича

## Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"




**В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".**

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене,* не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко",** который сочетает в себе теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

### МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются... А еще падает давление в системе... А еще... Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!



Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.

**"ТеплЭко"** не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.

### ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.

### САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия пожизненная, срок эксплуатации 10 лет.

**ЭКОНОМИЧНЫЙ** 2-3,5 кВт в сутки при использовании терморегулятора
**БОЛЬШОЙ СРОК СЛУЖБЫ** Срок службы 10 лет, гарантия пожизненная
**БЕЗОПАСНЫЙ** 100% пожаробезопасность
**КОМФОРТНЫЙ** Не сушит воздух, не сжигает кислород
**ПРОСТОЙ В УСТАНОВКЕ** Справится любой хозяин дома
**ЭКОЛОГИЧНЫЙ** Наша продукция соответствует санитарным требованиям
**ПОЛЕЗНЫЙ ДЛЯ ЗДОРОВЬЯ** Улучшает самочувствие, исчезает усталость

СДЕЛАНО В РОССИИ
Подтверждено европейское качество
CE

ТЕПЛЭКО

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
**ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, (964) 956-23-00, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)**
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru
ОГРН 1177847333993
На правах рекламы.

✓ *Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең ни теләгәнен дә белмәй. Әммә шул белмәгәндә алыу өсөн һине киҫәккә турарға әҙерҙәр.*

*(Дон Маркис).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# "БАШҠОРТОСТАН УҠЫТЫУСЫҺЫ"на - 100 йыл




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 февраль Премьера! "Рөстәмдең сере"** (С. Баженова, Ғ. Ҡотойҙоң "Рөстәм мажаралары" әҫәре буйынса). 11.00, 13.00 6+

**21 февраль Премьера! "Рөстәмдең сере"** (С. Баженова, Ғ. Ҡотойҙоң "Рөстәм мажаралары" әҫәре буйынса). 11.00, 13.00 6+

**"Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия. 12+

**22 февраль "Һауанан ергә тиклем"** (А. Саҙрыев), бәпәй-спектакль. 12.00 0+

**"Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс. 18.00 16+

**23 февраль "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтгәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 февраль "Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 16+

**22 февраль "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. 12.00 0+

**"Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 18.00 16+

**23 февраль "Аладдин"** (И. Казакова), мажаралы әкиәт. 11.00 0+

**"Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. 15.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 февраль "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 12.00, 14.00 0+

**23 февраль "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 февраль "Шехеразада һәм башҡалар"** концерт. 6+

**22 февраль Музыку слушаем вместе"** 11.00, 13.00 0+

**23 февраль "Weekend с органом"** 15.00 6+

**5-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡәләм. Һабанай. Аша. Һуҡа. Утрау. Буранай. Ҡарасай. Ыу. Алаша. Прага. Ара. Шаҡай. Йома. Илле. Һөтай. Арҡан. Даһи. Аҡъюлай. Тирәк. Һыуығай. Ҡарабаш.

**Вертикаль буйынса:** Ҡырпағай. Һарысай. Скважина. Һауа. Ҡорһаҡ. Ҡибла. Авеню. Лапы. Алағарай. Айова. Майай. Йәш. Уйы. Шаһит. Урҙа. Ул. Урағай. Йөк.


# Жизнь в движении



**Нас консультирует главный врач Красноусольского детского санатория Амирьян Сафаргулов.**

Боли в спине и суставах - одни из самых распространенных жалоб на здоровье. Болезни опорно-двигательной и периферической нервной системы приносят немало неприятностей и страданий. Их развитие чаще всего происходит в результате дегенеративных и дистрофических изменений в костной и хрящевой ткани. Еще не так давно подобные заболевания встречались преимущественно у людей преклонного возраста, что было связано с возрастными изменениями. В настоящее время болезни спины и суставов все чаще диагностируются у молодых людей, детей и подростков. Причины этого кроются в малоподвижном образе жизни, избыточной массе тела, плохом состоянии экологии и других негативных факторах, влияющих на весь организм в целом, включая и опорно-двигательную систему.

Лечение суставов, как правило, длительное, но если развиваются необратимые изменения в тканях, полностью восстановить здоровье становится невозможным. Предупредить такие изменения помогает своевременная терапия лекарственными препаратами и периодические курсы санаторно-курортного лечения в профильных санаториях.

В большом разнообразии различных услуг санаториев по лечению суставов и позвоночника подчас бывает трудно разобраться. Как правило, каждый санаторий, где проводится лечение суставов, предлагает новые аппаратные методики, ортопедические приспособления, разнообразные лекарства и т.д. и т.п. Какому же санаторию стоит отдать предпочтение?

Известно, что при суставных проблемах наиболее эффективно лечение с применением лечебных грязей, сероводородными ваннами, аппаратными методами физио- , лазеро- и магнитотерапии. Эти методы обязательно дополняются специальными комплексами лечебной гимнастики, массажем, рефлексотерапией. Курс лечения длится не менее десяти недель. Стоит отметить, что улучшение становится заметно уже через несколько дней, а лечебное действие многих процедур продолжается и после окончания курса лечения.

В Красноусольском детском санатории для лечения суставов используются все названные методы. Комплексное лечение коленного, плечевого или любого другого сустава в санатории избавит вас от многих неприятностей. После курса лечения должны исчезнуть боль и отечность, восстановиться подвижность, что позволит вам забыть обо всех проблемах, связанных с болезнью суставов. Для закрепления полученного эффекта один раз в год рекомендуются повторные курсы санаторно-курортного лечения.

**ГАУЗ КРАСНОУСОЛЬСКИЙ ДЕТСКИЙ САНАТОРИЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН**

ПРЕДЛАГАЕТ ЛЕЧЕНИЕ

- **опорно-двигательного аппарата**
- **заболеваний желудочно-кишечного тракта**
- **заболеваний кожи**
- **общеукрепляющее лечение**

Приглашаем детей от 7 до 14 лет, детей с родителями от 4 до 15 лет и взрослых до 70 лет.

**Телефон 8 (34740) 29677, полная информация на сайте www.krasnousoldetsan.ru**

**Адрес: Гафурийский район, с. Курорта, ул. Лесная, д. 27.**

Лицензия № ЛО- 02-01-005812 от 21.08.2017 г.

НЕОБХОДИМА КОНСУЛЬТАЦИЯ СПЕЦИАЛИСТА О ВОЗМОЖНЫХ ПРОТИВОПОКАЗАНИЯХ.

Реклама.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТОСТАН-ГӨЛБОСТАН, ТИП...

## мең тапҡырҙар йырларға яҙһын!

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры тәҡдим иткән яңы спектакль күп уй-тәьҫораттар һәм асыштар вәғәҙә итте. Исеме генә ниндәй бит - "Гөлбостан"! Был сихри һүҙ башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич оранынан уҡ беҙҙең ғәзиз тыуған ерҙе һәм уны өҙөлөп һөйөү тойғоһон сағылдыра. Яңы сәхнә әҫәре лә тамашасыны тап ошо юҫыҡҡа әйҙәй: күр һәм уйлан, хислән һәм таны - һүҙ Гөлбостан хаҡында бара. Был турала уйларға һәм хыялланырға, ниндәйҙер фекер йөрөтөргә форсатың һәм дәртең бармы әле?**



Күренекле шағир һәм драматург Ҡадир Даян башҡорт мәҙәниәте һәм шиғриәте өсөн ифрат тос, фәһемле образдар ҡалдырған. Уның һүҙҙәренә яҙылған "Шайморатов генерал" йыры ғына ла тотош бер эпик ҡобайыр һымаҡ булып беҙҙең аңға һәм йөрәккә уйылған. Әҙиптең "Таңсулпан" драмаһы башҡорт театры сәхнәһендә оҙаҡ йылдар уйнала. Пьеса 1941 йылда яҙыла һәм ул, совет илендәге синфи көрәш ҡырҡыулығын бөтә фажиғәһе менән күрһәтергә тейешле әҫәр булараҡ, социалистик реализм талаптарына ҡаршы килмәй. Шулай ҙа "Таңсулпан"дың төбөндә бөтөнләй икенсе бер әрнеүле һорау ята: тыуған ер көсө кешегә күпме бирелә һуң, нисек ул тойғо кешене йәшәтә?

Башҡорт театрының художество етәксеһе Айрат Абушахманов классик пьесаны - башҡорт драматургияһы үрнәген эш өҫтәленә һалған саҡта иң мөҡәддәс уй менән яна: бөгөнгө милли сәхнәне рухи тергеҙеүсе һәм уға алға этәргес ҡеүәт бирерҙәй аҡтамырҙы табырға кәрәк! "Был спектакль минең өсөн милли булмышыңды үҙ итеү, милләтеңде яҡын күреү, яратыу, аңлау һәм үҙ-үҙеңдә милли тоғролоҡ тойғоһон барлау, таныу, милләттәшеңә табып биреү, ярҙам итеү..." Спектакль авторы өсөн төп һорауҙарға яуап табыу бик мөһим. "Бөгөнгө донъяла башҡорт кешеһе үҙен нисек тоя: халҡының боронғо теле үҙгәргән, тарихи яралары һыҙлай, милли үҙаңы томаланған... Бөгөн миллилектең тышҡы билдәләренә, ялтырауыҡ үҙенсәлектәренә иғтибар өҫтөнлөк ала: милли кейем, биҙәктәр, кәсептәр... Ә етди милли проблемалар тәрәндә ҡала һәм улар тәү сиратта хәл итеүҙе көтә: туған тел, тыуған ер, тәбиғи байлыҡтар, рухи азатлыҡ. Ҡасандыр ил һәм халыҡ исеменә яҙылған тарихи яҙмалар, өндәмәләр, шәжәрәләр ҙә телгә килергә тейеш, ләкин уларҙы бөгөн кем дөрөҫ аңлай һәм аңлата ала? Милли театр саф һәм сағыу башҡорт әҙәби телендә һөйләшә, ул милләт тауышын ишеттерергә бурыслы, ләкин тыңлаусыға сәхнә теле барып етәме?"

Башҡорт театрының тыуған көнөнән башлап, бер быуат элек үк ҡуйылған бурыстары бөгөнгө тарих таблоһында тағы ла нығыраҡ янып китә: театр - мәғрифәтсе, театр - сәнғәт уҡытыусыһы, театр - тел һаҡсыһы, моң аҫҡысы, рух бишеге. Театрҙың баш режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Айрат Абушахманов туплаған ижади төркөм йәнә бер мәртәбә талапсан һәм ажарлы һынау тота кеүек. "Таңсулпан" пьесаһы буйынса "Гөлбостан" спектакле өсөн яңы сәхнә версияһын драматург Дамир Йосопов яҙа. Әҫәрҙең башҡортсаға тәржемәһен сәхнә теле белгесе Динара Ҡәйүмова атҡара, башҡорт фольклоры үҙенсәлектәрен хәҙерге заман күҙлегенән ҡулланыу яғынан республика Халыҡ ижады үҙәгенең бүлек мөдире Гөлгөнә Баймырҙинаның ғәмәли кәңәштәре ярҙам итә. Башҡорт театры спектаклдәренең егерме беренсе быуат сәхнәһендәге биҙәлешен үҙенсәлекле ҡороусы ғына түгел, ә милли сәнғәттең яңылыҡтарын Рәсәй кимәленә уңышлы тәҡдим итеүсе рәссам Альберт Нестеров ҡуйған образдар аныҡ һәм оригиналь сиселешле. Спектаклдә бер мәлгә лә тамашасының хис даръяһын ысҡындырмай торған музыкаль ағым бик көслө булды - композитор Марат Фәйзуллин был йәһәттән ярайһы уҡ ҡыйыу һәм тетрәндергес көйҙәр тапҡайны. Әлбиттә, һәр персонаждың сәхнәүи траекторияһын билдәләү - уның ролен асыуҙа бик мөһим, был тарафтан хореограф Алина Мостаеваның эшмәкәрлеге актерҙарҙың шәхси һәләтен тағы ла арттыра төҫлө. "Гөлбостан" спектакленең сағыу ылыҡтырғыс төҫтәрен рәссам-яҡтыртыусы Илшат Саяхов оҫталығы ла бик ныҡ асты, тиергә мөмкин, сөнки сәхнә киңлеген айҡаған берсә йыһан, берсә мәмерйә, берсә тау-дала нурҙары Башҡортостан тигән ил өсөн янған йөрәктәрҙең дөйөм бер ҡояшын барлыҡҡа килтергәйне...

Гөлбостан... Фәнтәзи ил. Халыҡ бер комбинатта йәшәй. Бойһонған ҡанундары - йолалар, йәнәһе. Боронғо йола бөгөн дә йәшәй. Уларҙы заманға ярашлы үҙгәртеү ҙә мөмкин эш. Ләкин шуныһы бар: йолалар һаман да халыҡты бойһондороп тотоу өсөн файҙаланыла. Кәләш алырға теләгән егет ҡыҙҙың ата-әсәһенә мәһәр, йәғни ҡалым бирергә тейеш. Ҡалым түләргә көсө етмәгән йәш егетте хәлле кеше - комбинат хужаһы ҡыҫырыҡлай ала, һәм был законлы!.. Йәш ҡыҙҙы мәһәр түләп кенә һатып алмаҡсы бай өсөн донъяның йәме аҡсаға һәм дәрәжәгә ҡарап үлсәнә. Тимәк, йолалар - халыҡты ҡотҡарыусы ла, батырыусы ла, ти әҫәр. Ҡатын-ҡыҙ бәхете, кеше яҙмышы ҡәҙерһеҙләнгән ил - Гөлбостан бәхетле була аламы? Бөгөнгө Гөлбостандың аһ-зарҙары етерлек, ҡурҡыныс төштәрен һөйләгәндәй, ауаз һалып, оран һалып, геройҙар ил ҡайғыһын сисә - улар бәхетле була алмай, сөнки тыуған ер яралы, тыуған хистәр-моңдар тапалған, тел кәмһетелгән... "Аҡтамыр ҡайҙа, Гөлбостан? Аҡтамырға тотон!" - тиеп ҡысҡырғы килә... Ләкин күңел төбөндә боронғо йыр яңынан ярала: "Башҡортостан - Гөлбостан!..." Был йыр әкиәт түгел. Был йыр - ил йыры. Шуға күрә спектакль тамашасыла һүнмәҫ өмөт һәм илһөйәрлек осҡонон дөрләтә - "Башҡортостан - Гөлбостан" тип тағы мең-мең мәртәбә йырларбыҙ әле беҙ!

Спектаклдең премьераһы Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле сәхнәһендә уйналды. Төп ролдәрҙә Гөлназ Хайсарова (Гөлбостан), Азат Вәлитов (Айсыуаҡ), Олег Ханов (Күсәрбай), Алһыу Бәхтиева (Медэксперт), Ирек Булатов (Сурағол), Илдар Сәйетов (Көҫәпҡол), Илдар Ғүмәров (Сағанбай), Зиләрә Юлтаева (Гөлбаныу), Илсур Байымов (Юламан), Урал Әминов (Ишмай), Әхәт Хөсәйенов (Мортаза), Сара Буранбаева (Йәнбикә), Айҙар Шәмсетдинов (Бикмырҙа) яңы фиҙакәр табыштары һәм талантлы образдары менән ҡыуандырҙы.

Күмәк сәхнәләрҙәге таныш артистар ҙа залда көтөп алынған сәхнә оҫталары булып тора, улар араһында Илгизә Ғилманова, Морат Рафиҡов, Артур Кәбиров, Алмаз Йосопов, Руслан Ғәлимов, Гөлмирә Исмәғилева, Гөлнара Ҡаҙаҡбаева, Лилиә Ғәлиналарҙың йәш, илһамлы уйынын күреү үҙе бер бүләк. Афарин, башҡорт театры!

**Сәрүәр СУРИНА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЭТТЕ ТҮРӘ ИТҺӘҢ...

### эт ҡәҙере күтәрелә

Донъяның ҡәҙерен йөрөгәндә, мал ҡәҙерен бөлгәндә, йәндең ҡәҙерен үлгәндә белерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

...Иң аҡыллыһы ошондай ауыл хужалығы алымы булыр: яҡшы климат булдырығыҙ, тейешле ашлама менән тәьмин итегеҙ һәм кешеләргә үҙҙәренсә үҫтерергә мөмкинлек бирегеҙ. Бына шул саҡта улар һеҙҙе аптыратасаҡ.

**(Макгрегор)**

Милләттең алдынғылығы - уның үҙ-үҙенән көлә белеү һәләтлегендә.

**(Питер де Врайз).**

Бөйөк кешеләр ике тапҡыр үлә: тәүҙә кеше булараҡ, аҙаҡ... бөйөк булараҡ.

**(Поль Валери).**

Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең ни теләгәнен дә белмәй. Әммә шул белмәгәнде алыу өсөн һине кисәккә торарға әҙерҙәр.

**(Дон Маркис).**

Күпселек аҙсылыҡ билдәләгән ҡараштар тотҡонлоғонда йәшәй.

**(Станислав Ежи Лец).**

Кешегә әйбергә ҡараған кеүек ҡарарға ярамай, уның хаҡы барыбер әйберҙеке кеүек үк түгел.

**(Патрик О,Рурк).**

Танау аҫтындағыһын күреү өсөн күп талант кәрәкмәй, ә бына танауҙы ҡайһы яҡҡа борорға икәнде белеү ябай эштәрҙән түгел.

**(Уистен Оден).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер билдәле шағир үҙ әҫәрендә шулай тип фекер йөрөтә: "Беҙҙең бар тормошобоҙ - оҙон бер коридор, ике яҡлап бик күп ишектәр урынлашҡан. Ул ишектәрҙең ҡайһы берҙәрендә "Беләм", икенселәрендә "Ышанам" тип яҙылған. Беҙ коридор буйлап киләбеҙ һәм ишектәрҙең ҡайһыһына инергә белмәйбеҙ. Ҡайһы ишек артында хәҡиҡәт, ҡайһыһында - ялған, тип баш ватабыҙ. Әммә... ишекте дөрөҫ һайламай, яңылышабыҙ. Ә аҙаҡ: "Ниңә былай килеп сыҡты һуң әле?"- тип аптыранабыҙ. Мин бит "беләм" инем, тибеҙ. Эйе, мәңгелек йомаҡ был. Бында аҡыл ғына ярҙам итмәйәсәк. Ышанһаң - көслө булырһың, белдекле икәнһең - көсһөҙ... Шуға ла, һеҙҙең алда "Нисек йәшәргә?" тигән һорау торһа, йөрәгеңдән һора. Аҡыл - хәйләкәр ул, ә йөрәк һәр ваҡыт дөрөҫтө белә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 4007
Заказ -102/02